ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-4
ноябрь - декабрь
(ҡырпағай - аҡъюлай)
2015
№48 (674)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Лайыҡлы йәшәү кимәле - төп социаль бурысыбыҙ



4

Хәтирәләр



7

Һәр кемдең үҙ сәскәлеге...



йәки Менталитет хаҡында бер нисә һүҙ 8-9

Беҙ эсергә атайҙарҙан өйрәндек,

ә атайҙар ул гәҙәтте һуғыштан алып ҡайтты



13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Алдан уҡ иҫкәртеп ҡуябыҙ: 2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланыр алдынан, 3 декабрҙән 13 декабргә тиклем, республиканың бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә арзанырак хаҡҡа яҙыла алаҫаҡһығыҙ. Хаҡтарҙы шул уҡ почта бүлексәләрендә белешергә була. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Ә быға тиклем яҙылып, бүләккә лайыҡ булғандарҙың исемлеген 2-се биттә уҡығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Королтайҙан ниндәй һүҙ көткәйнегеҙ, өмөтөгөҙ аҡландымы, ишетергә теләгән һүҙегеҙҙе ишеттегеҙме?

***Йәғәфәр ЯМАНҺАРИН, Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Башҡорт телен үҫтереү, мәктәптәрҙә әсә теле дәрестәрен һаҡлап ҡалыу юлдары тураһында ишетергә теләгәйнем. Борсолоуыбыҙ юҡҡа түгел, беҙҙә барлыҡ мәктәптәрҙә лә башҡорт теле дәрестәре бөтөрөлдө. Ә бит Конституция буйынса һәр кем үҙенең туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Әммә Ырымбур өлкәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең был тәңгәлдәге хоҡуҡтары ҡыҫыла икәнен үҙ елкәбеҙҙә татып беләбеҙ. Беҙ ҙә шул уҡ тиң хоҡуҡлы Рәсәй граждандары, шулай уҡ илгә һалым түләп тороусылар түгелме икән ни, тип аптырарға ғына ҡала инде. Икенсенән, сығыштарҙа ла, үҙ-ара аралашҡанда ла "Айыҡ ауыл" конкурсы тураһында ишеттем һәм уны Ырымбурҙа ла ойоштороорға кәрәк, тигән ниәт менән ҡайтып китәм. Был изге һәм матур башланғысты һүндерергә ярамай, уны киңерәк таратыу кәрәк.

***Рәшит ШӘКУР, филология фәндәре докторы, профессор:*** Төп проблемалар күтәрелде, секция ултырыштарында ла һәйбәт сығыштар булды. Һәр хәлдә, халыҡтың тын алышы, алда торған проблемалар әйтелде. Темаларҙың барыһын да күтәреп бөтөп булмай, шулай ҙа Беренсе, Икенсе, Өсөнсө ҡоролтайҙарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың ҡайһылары үтәлгән, ҡайһылары үтәлмәгән, шуларҙы ла барларға кәрәк ине, әлбиттә. Ундай барлау булманы. Әммә был эш киләсәктә күҙ уңынан ысҡындырылмаҫ, тип өмөтләнәм. Юҡһа, матур ҡарарҙар ҡабул итәбеҙ, ә уларҙың үтәлеше хаҡында яуап бирергә генә онотабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ҺӘР БЕРЕБЕҘ...

## ғәмәлдәр ҡылайыҡ!



**IV Ҡоролтай ҙа үтеп китте. Хәҙер унда ҡатнашҡан һәм ҡатнашмаған һәр кем йыйын тураһында фекер алыша, уның әһәмиәтен билдәләй, етешһеҙлектәрен дә күҙҙән ысҡындырмай.**

Ә бит һәр делегат - ул ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыусы булырға тейеш, ул туй генералы түгел, ә эш менән туранан-тура шөғөлләнергә тейеш шәхес. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр ҡоролтайҙарҙа ҡунаҡ булып ҡына ултырып ҡайта ла, аҙаҡ шул эшләнмәй, был эшләнмәй, тип тәнҡитләп, йә илаулап йөрөй башлай. Ә кем эшләргә тейеш һуң милләткә ҡағылған барлыҡ был эштәрҙе, кемдән күрһәтмә кәрәк? Тот та эшлә!

Йәмәғәт ойошмаһы бит ул Ҡоролтай, уның хакимиәт хоҡуҡтары юҡ, ә бары ошо хакимиәттәр аша, хөкүмәт аша бурыстарҙы тормошҡа ашырыу вәкәләте бар. Файҙаланайыҡ ошо мөмкинлектәрҙе!

Үткән ике Ҡоролтай аралығында ла кемдер әүҙем эшләне, кемдер өнөн дә сығармаҫ булды, ә кемдер эшләмәү генә түгел, гел Ҡоролтай Башҡарма комитеты ағзаларын хурларға, бысраҡ өйөргә тотондо. Эйе, тәнҡит кәрәк, ләкин ул бит тик әрләшеүгә ҡоролорға түгел, ә аныҡ эш башҡарыуға килтерергә тейеш.

Бына, мәҫәлән, ҡайһы бер урындарҙа ҙур тырышлыҡ һалып, башҡорт гимназияһы тип асылған уҡыу йорттарын дөйөм гимназияға әйләндергәндә яҡлашып алып ҡалып була ине бит. Тик шунда эшләгән уҡытыусыларҙың, үҙ мәнфәғәтен генә уйлап, бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәүен нисек аңларға? Ул гимназиялар законға ярашлы асылған, дөйөм стандарттар буйынса эшләп ята ине - нимәһенән ҡурҡырғалыр? Етмәһә, шул шымып ҡалғандарҙың уҡ ҡоролтай делегаты булып килеүенә нисек аптырамаҫҡа?.. Делегат булып килгән икән, яңынан башҡорт гимназияһы статусын ҡайтарырға көс һалһын ул уҡытыусылар! Ҡоролтайҙа бит тап шул мәсьәләләр иң мөһимдәр тип әйтелде. Был кешеләр үҙен таныр, моғайын. Әлегә бармаҡ менән төртөп күрһәтмәй торам.

Һәр беребеҙ бер ҡоролтай булып, милләт өсөн шәп эштәр эшләйек! Һәр башҡорттоң бурысы ул башҡортто үҫтереү! Ҡоролтайҙан килеп, бишек йыры йырламаҫтар, баланы башҡортса өйрәтмәҫтәр, уҡытмаҫтар - был һәр ата-әсәнең бурысы!

Ә яңы составҡа ҡеүәт, уңыштар теләйек!

**Гүзәл СИТДИҠОВА,**
**яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

12+

***✓ Әгәр Башҡортостан Рәсәй күләмендә иҡтисади йәһәттән көслө булһа, күберәк инвестициялар йәлеп итһә, ауыл халҡына эш булһа - бына ошолар халҡыбыҙға йәшәргә ярҙам итәсәк.***



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була.**

● **Хаҡтар шулай:** "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - **545 һум 76 тин**, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - **575 һум 76 тин**.

● **Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә.** Шулай итеп, октябрь-ноябрҙә 2016 йылдың беренсе яртыйыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәгеләр:



Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Фәнзилә Ҡолоҡаева, Ҡыйғы районы Ибрай ауылынан Светлана Шиһапова - **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**;

Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Д. Хәсәнова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**;

Сибай ҡалаһынан Нурғәле Йоносов, Хәйбулла районы Маҡан ауылынан З. Ниғмәтуллина - **Гөлнур Яҡуповаың "Ҡатындар"**;

Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Һәҙиә Әбдрәшитова - **"Антология поэзии Башкортостана"**;

Шишмә районы Яңы Ябалаҡлы ауылынан Тәнзилә Гәрәева, Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылынан Зәкиә Әбүбәкерова - **Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы"**;

Баймаҡ районы Аҡмороп ауылынан Гәлиә Исламғолова, Иҫке Сибай ауылынан Зәкиә Йосопова, Билал ауылынан Р. Әбйәлилов, Иглин районы Меңъетәр ауылынан Зөлфирә Садиҡова, Әлшәй районы Иҙрис ауылынан Сәүиә Муллағолиева, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Г. Камалетдинов, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Урал Псәнчин, Өфө ҡалаһынан Х. Сабирова, Әбйәлил районы Үтәгән ауылынан Ҡасим Йәһүҙин, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылынан Гөлсирә Исламова - **башҡортса "Дини календарь"**;

Дәүләкән районы Дуҫлыҡ ҡасабаһынан Ю. Fәтиәтуллин, Ҡырмыҫҡалы районы Мукай ауылынан Рәйфә Фәйрушина, Әбйәлил районы Бураңғол ауылынан Вәсилә Килдейәрова, Әбдрәш ауылынан Зифа Мәжитова, Учалы районы Учалы ауылынан Т. Насиров - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

**Дәртләндереү саралары дауам итә. Йыл аҙағына тиклем 2016 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", "Антология поэзии Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", 2016 йылға "Мәктәп календары", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарын алып шатланыуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Королтайҙан ниндәй һүҙ көткәйнегеҙ, өмөтөгөҙ аҡландымы, ишетергә теләгән һүҙегеҙҙе ишеттегеҙме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәүәзт ҠОЛМӘНБӘТОВ, Ханты-Манси автономиялы округы башҡорттары королтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Һуңғы йылдарҙа, әлбиттә, тормошобоҙға тәрлө яҡлы йоғонтолар бик күп, шуға ҡоролтайҙан нимә көтәбеҙ: әүҙемерәк эшләй башларға кәрәк. Бөгөнгө сәйәсәттән, иҡтисадтан артта ҡалмайынса, ваҡыт менән бер ҡатарҙан атлау етешмәй беҙгә. Башҡорт телен, тарихын, мәҙәниәтен һаҡлау яғынан әллә ниндәй ҙур проблемалар бар тип уйламайым. Ә бына икенсе тармаҡтарға иғтибар бүлергә кәрәк. Әгәр Башҡортостан Рәсәй күләмендә иҡтисади йәһәттән көслө булһа, күберәк инвестициялар йәлеп итһә, ауыл халҡына эш булһа - бына ошолар халҡыбыҙға йәшәргә ярҙам итәсәк. Аҡса булһа, уны артабан мәҙәниәткә, йолаларҙы, гөрөф-гәҙәттәрҙе, телде һаҡлауға йүнәлтергә мөмкин. Мин үҙем ауыл малайы. Элек тыуған ауылымда - 16, күрше ауылда 30 өй бар ине, ул ауылдар хәҙер юҡ. Башҡорт ауылдары бөткәс, башҡорт халҡының тамырҙары өҙөлә. Шул мәсьәлә борсой. Элек урман эше менән булышҡан бәләкәй генә ауылдарҙа хәҙер эш юҡ. Уларҙа эш асырға кәрәк. Эш асығыҙ, мөмкинлектәр етерлек, тип трибуна артынан һүҙ һөйләргә, бойороҡ биреп ултырырға түгел, ә әҙер проекттар эшләп, уларҙы ауылдарға бирергә кәрәк. Проекттар Сбербанк тарафынан финансланырға тейеш. Улар бизнесты үҫтереү үҙәге асып, улар аша әҙер проекттарҙы халыҡҡа тәҡдим итһен ине. Халыҡтың эшләгеһе килә, әммә ул бит, нимә эшләйем икән, тип уйлап сығара алмай. Әҙер, бөгөндән эшләй башларлыҡ проекттарҙы ауылдарға эшләп бирергә кәрәк. Тел, рух, мәҙәниәт буйынса һүҙ күп булды, әммә бына ошо эшҡыуарлыҡҡа әҙер проекттар тәҡдим итеү, ауыл халҡын эш менән тәьмин итеү тураһында һүҙ ишетмәнем.

***Салауат ӘСФӘТУЛЛИН, яҙыусы, Калуга өлкәһе:*** 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, һәләк булған атай-олатайҙарыбыҙ алты полк тәшкил итә - 3180 кеше. Әгәр шуларҙың һәр ҡайһыһынан бишәр генә бала донъяға килгәндә лә, милләтебеҙ миллион ярымға артығыраҡ булыр ине. Тимәк, бөгөн республикала йәшәгән башҡорттарҙың һанынан да күберәк вариҫтарыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ килеп сыға. Ошо атай-олатайҙарыбыҙға ҡуптән Өфөлә, Сибайҙа ла, башҡа ҡалала ла түгел, ә тап Өфөлә һәйкәл ҡуйылырға тейеш ине. Аллаға шөкөр, бөгөн был мәсьәләнең көн үҙәгендә тороуын ишетеп ҡыуандым. Ул һәр ваҡыт планға инделәлә, ләкин һәр саҡ өҫтәл тартмаһына тығып ҡуйыла килде. IV Ҡоролтайҙа был мәсьәлә тағы ла күтәрелде. Был дөрөҫ тип уйлайым, сөнки атай-олатайҙарға рәхмәтле була белергә тейешбеҙ. Был минең өсөн иң мөһим мәсьәлә булып тора ине. Һуңғы 10-15 йылда Төньяҡ амурҙары тарихы буйынса махсуслашам, ҡайһы берҙә үҙәк журналдарҙа ла сығыш яһайым. Был бик еңелдән түгел. Бөгөн тарих секцияһында ошо һәйкәл мәсьәләһен ҡабат күтәрҙеләр. Тамсы тама-тама таш тишә, тигән кеүек, был һәйкәлде лә күрербеҙ тип өмөтләнәм һәм уның лайыҡлы урыны Совет майҙанында тип уйлайым. Һәйкәл майҙан ҙурлығында юғалып ҡалырға түгел, ә уға тап килгән дәүмәлдә булырға тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БӨРЙӘНДӘР ӨСӨН...

## аҡса эшләүҙең яңы юлы

**Ҡоролтайҙа ҡатнашыуымдың маҡсаты - туризм өлкәһендәге мәсьәләләр буйынса, эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә аяҡ салған ҡайһы бер ҡытыршылыҡтарҙы хәл итеү юлдары тураһында фекерҙәр ишетергә теләү ине.**

Беҙҙең районда 400-ҙән артыҡ бәләкәй һәм урта эшҡыуар иҫәпләнә. Республика бюджетынан уларға быйыл 3,5-4 млн күләмендә ярҙам алдыҡ, район иҫәбенән дә 500-600-700 мең тирәһе аҡса бүлергә тырышабыҙ. Шулай уҡ ҡайтарылмай торған субсидиялар, махсус программалар менән дә файҙалана халыҡ. Шулай ҙа үҙ эшен асыу өсөн һәр эшҡыуарға ер биләмәһе кәрәк һәм ул биләмәне алыу өсөн ҡатмарлы юлдар үтергә тура килә уға. Белеүегеҙсә, Бөрйән районының 96-98 процентын урман биләй һәм ул урман федераль ерҙәр булып иҫәпләнә. Район халҡы аҫаба ерҙәренең 7 проценты менән генә ҡуллана ала. Бөрйән - ул бөтә Рәсәйҙә ике федераль ҡурсаулыҡы булған берҙән-бер район, улар ерҙәребеҙҙең 42 процентын тәшкил итә. Беҙҙә халыҡ эшҡыуарлыҡтың, туризм өлкәһендә эшләүҙең асылын яңы аңлай ғына башланы. Ерле халыҡ туристар иҫәбенә аҡса эшләп ҡалыу яйын ҡарай. Был шөғөл менән ауыл халҡы ғаиләһен туйҙыра ала, әйгни, балын, итен, ҡул эштәрен, аш-һыуын һатып, килем ала ала икән - был үҙе үк алға алып барыусы бер аҙым. Югиһә, беҙҙең халыҡ сауҙаға ярақлашмаған, тип ҡул ҡаушырып тик ултырабыҙ. Йәйләп яраҡлаша, өйрәнә Бөрйән халҡы яңы кәсепкә. Тик бына үҙ эшен асырға теләгәндәр нимәлер тәҙәү өсөн ер һорап килә, ә ул ерҙе алыу мөмкинлеге юҡ иҫәбендә. Был халыҡта етәкселеккә ҡарата кире мөнәсәбәт уята.

Әлеге Ҡоролтай йыйынының комиссия ултырышында төбәктә туризмды үҫтереү буйынса арыу ғына һөйләшеү булды. Ғөмүмән, Бөтән донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетынан ошо ниәттәребеҙҙе тормошҡа ашырыуҙа йоғонтоло ярҙам көтәбеҙ.

Ҡоролтай барышында ҡайһы бер бәхәсле темаларҙа бер-беренә ғәйеп ташлау кеүек кире күренештәр күҙәтелеүе бер аҙ көйәфте ҡырҙы. Кемдәндер нимәлер талап итеү, "Һеҙ шуны эшләмәгәнһегеҙ", тип, дәғүә белдерер алдынан, үҙ-үҙеңә: "Мин үҙем нимәләр эшләнем һуң?" - тигән һорауҙы бирергә кәрәктер ул. Һәр беребеҙ үҙ урынында халҡыбыҙ, республикабыҙ өсөн ҡулынан килгән ғәмәлдәр башҡарһа, һис һүҙһеҙ, алға китеш буласаҡ.

**Рөстәм ШӘРИПОВ,**
**Бөрйән муниципаль район хакимиәте башлығы.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары 2016-2018 йылдарға Башҡортостан бюджетын раҫланы. 2016 йылда килем - 126,2 миллиард, сығым - 136,2 миллиард һум; 2017 йылда килем - 107,3 миллиард, сығым - 116,8 миллиард һум; 2018 йылда килем - 114,0 миллиард һәм сығым 123,0 миллиард һум тәшкил итәсәк. Шуның менән бергә дефицит тәүҙә билдәләнгән кимәлдә һаҡланған: 2016 йылда - 10 миллиард һум, 2017 йылда - 9,5 миллиард, 2018 йылда - 9 миллиард.

✓Рөстәм Мәрҙәнов республика Хөкүмәте Премьер-министры вазифаһына тәғәйенләнде. Уның кандидатураһын тәҡдим Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тәҡдим итте. Республика парламенты депутаттары тәҡдимде хупланы. Рөстәм Хәмитов депутаттар алдында Рөстәм Мәрҙәновты республика Премьер-министры итеп тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов традицион конфессияларҙың дини лидерҙары менән осрашты. Унда конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу, дини экстремизмға ҡаршы эш итеү мәсьәләләре тикшерелде. Осрашыу барышында Башҡортостан Республикаһы менән Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты, Рус православие сиркәүенең Башҡортостан митрополияһы, Башҡортостандың үҙәк йәһүд дини ойошмаһы, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты араһында социаль партнерлыҡ тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

✓Ағымдағы йылдың ғинуар-сентябрь айҙарында Башҡортостанда уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы былтырғы менән сағыштырғанда 3,5 процентҡа артҡан һәм 25 165 һум тәшкил иткән. Бюджет өлкәһендә эш хаҡының артыуы күҙәтелә. Статистиктар иҫәпләп сығарыуынса, эш хаҡы мәғарифта - 19 949, һаулыҡ һаҡлауҙа - 22 853, коммуналь, социаль һәм шәхси хеҙмәттәр өлкәһендә 22 202,2 һум тәшкил иткән.

✓Владимир Путин "Экстремистик эшмәкәрлеккә ҡаршы эш итеү тураһында"ғы Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль законға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, христианлыҡтың, исламдың, иудаизмдың, буддизмдың рухи нигеҙҙәрен тәшкил иткән Библия, Ҡөрьән, Танах һәм Ганджур китаптары, уларҙың йөкмәткеһе һәм цитаталары экстремистик материал була алмай. Документ Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советы тарафынан 2015 йылдың 18 ноябрендә ҡабул ителде.

✓ *Башҡортостандан бик күп йылдар ситтә йәшәһәм дә, туған тел ҡәҙерен беләм. Сөнки туған тел кешегә аралашыу өсөн генә бирелмәгән, уның аша беҙгә милли рух һалына. Ҡан-ҡәрҙәштәрем быны ваҡытында аңлаһын ине.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# АҠЪЮЛАЙҒА - АҠ ЮЛДАР




**Йылдың тажы - декабрь ҙә етеп килә. Әллә заман аҡбуҙы шәп елә, әллә үҙебеҙ ҡайҙалыр ашығабыҙ - ваҡиғалар кино кадрҙары һымаҡ алмашынып ҡына тора; көн артынан көн үтеп, йыл ахырына ла килеп етелгән, имеш. Әммә ләкин быйылғы йылға ҡылыҡһырлама урыны-мәле еткәс бирелер. Ә бөгөнгә беҙҙе уның һуңғы айы - үҙебеҙсә әйткәндә, аҡъюлай ҡыҙыҡһындыра.**

Башҡалары кеүек үк, был айҙың да иҫтәлекле көндәре һәм юбилярҙары байтаҡ ҡына. Ә шулай ҙа айҙың тәүге көнө борсоулы уйға һалыр ваҡиға менән билдәләнә: СПИД менән Бөтөн донъя көрәш көнө. Был йәһәттән хәүефле күҙаллауҙар һуңғы мәғлүмәттәрҙән дә бик асыҡ күренә. Мәҫәлән, быйыл республикала асыҡланған 2 511 ВИЧ йоҡтороусының 66,5 проценты - ир-егеттәр, 33,4 проценты - ҡатын-ҡыҙ. Шуныһы айырыуса шом тыуҙыра: был сирлеләрҙең күбеһе ВИЧ инфекцияны енси юл менән йоҡтора. Ә был иһә халыҡ, айырыуса йәштәр араһында тәрбиә-иҫкәртеү эштәренең тейешенсә алып барылмауы хаҡында һөйләп тора. Ҡайһы бер сирлеләр, үҙҙәре ауырыуы ғына етмәй, уны аңлы рәүештә башҡаларға ла таратырға тырыша икән. Мәҫәлән, Баку ҡалаһында Әхмәдова тигән ҡатындың 200-ләп кешене аңлы рәүештә ВИЧ инфекция менән зарарлауы хаҡында яңыраҡ интернетта хәбәр таралды. Бындай ғибрәттәр һәр кемгә үҙ тәртибен үҙенә күҙәтергә, осраҡлы енси бәйләнештәрҙән алыҫ йөрөргә тейешлекте иҫкәртә. Ә шулай ҙа теләһә ниндәй сирҙән ҡотолоу юлының сәләмәт тормош рәүеше алып барыуҙа икәнен иҫбатлап тороу ҙа кәрәкмәй. Сәләмәтлек сығанаҡтарының иң йоғонтолоһо - физкультура һәм спорт, әлбиттә. Шуға ла спорт һөйөүселәр иғтибарын **1 декабрь** билдәләнеүсе Бөтөн Рәсәй хоккей һәм Бөтөн донъя футбол (**10 декабрь**) көндәренә йәлеп итәйек. Телевизор ҡарап, диванда ятыусы пассив көйәрмәндәр түгел, майҙансыҡтарҙа туп һәм шайба артынан ҡыуыусы спорт һөйөүселәр күп булыуын теләйек.

**3 декабрҙә** Билдәһеҙ һалдат көнө хәтергә алынһа, ошо уҡ көндә юристарҙы һөнәри байрамдары менән ҡотларға була. Халыҡ-ара инвалидтар көнө лә ошо датаға тап килә, ләкин ғәриптәргә иғтибар, мәрхәмәтлек ғәмәлдәре бер көн менән сикләнмәһен. Уларға күңел йылыбыҙҙы һәр ҡасан, һәр ерҙә лә йәлләмәйек, тип иҫкәртә төҫлө был көн. Граждандар авиацияһы (**7**) етди һынауҙарға дусар ителә бөгөн. Һәр көнө, сәғәте-минуты хәүеф менән бәйле ошо һөнәр эйәләренә уңышлы рейстар теләйек!

Ә һеҙ беләһегеҙме: Тауҙар көнө (**10**) лә бар икән, йәмәғәт! Уны тәҡдим иткән кешегә рәхмәттәр яуһын инде. Кемгә - нимә, әммә беҙ һуңғы көндәрҙә Торатауыбыҙ өсөн нисек борсолдоҡ! Рәхмәт Республикабыҙ Башлығына, уяу йәмәғәтселеккә - ҡурсылап алып ҡалдыҡ шикелле. Ләкин күңел һаман уяулыҡ талап итә: бөгөн - тауыбыҙға, ә иртәгә илебеҙҙең тағы ниндәй ымһындырғыс ырыҫына ҡул һуҙыр һөмһөҙҙәр? Әйткәндәй, ошо айҙа билдәләнәсәк РФ Конституцияһы (**12**) һәм БР Конституцияһы (**24**) көндәре беҙгә, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы граждандарына, үҙ еребеҙҙә уңайлы мөхит шарттарында йәшәүгә хоҡуҡтарыбыҙҙы ғына түгел, шул уҡ ваҡытта тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡыларыбыҙҙы хәстәрлекләү, һаҡлау бурысыбыҙҙы ла тағы бер ҡат иҫкә төшөрә.

Декабрҙең икенсе яртыһында шулай уҡ Рәсәйҙә ЗАГС органдары көнө (**18**), Халыҡ-ара фәҡирҙәргә ярҙам көнө (**19**), Рәсәйҙә ҡотҡарыусылар көнө (**27**) һәм Халыҡ-ара кино көнө (**28**) билдәләнәсәк. Йыл ахыры аҡъюлайҙа тыуған билдәле шәхестәребеҙҙе лә телгә алып китеү фарыз. Бына улар: актер, режиссер, педагог, С. Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты **Ғабдулла Ғиләжевҡа** 1 декабрь 85 йәш тулған булыр ине. 2 декабрь - билдәле дәүләт эшмәкәре, 1977-1986 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы секретары **Фәйзрахман Хисмәтуллиндың** тыуыуына - 90 йыл. 4-дә - милли театрыбыҙға нигеҙ һалыусы, актер һәм режиссер **Вәлиулла Иманскийҙың** (Мортазин) тыуыуына - 130 йыл. 9-да - яҙыусы, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры **Мирас Иҙелбаевҡа** - 70 йәш. 10-да - Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалыусы, 1917-1920 йылдарҙағы милли хәрәкәт лидеры, тюрколог-шәрҡиәтсе, философия фәндәре докторы, Стамбул һәм Манчестер университеттары профессоры **Әхмәтзәки Вәлидиҙең** (Вәлидов) тыуыуына - 125 йыл.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СИТТӘ ЙӘШӘҺӘК ТӘ...

## үҙ асылыбыҙҙан айырылмайбыҙ

**Рәйлә ИМЕЛБАЕВА, IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты, Ҡырым Республикаһы:** Милләттәштәргә иң тәүге әйтер һүҙем, әлбиттә, туған тел тураһында булыр. Башҡортостандан бик күп йылдар ситтә йәшәһәм дә, туған тел ҡәҙерен беләм. Сөнки туған тел кешегә аралашыу өсөн генә бирелмәгән, уның аша беҙгә милли рух һалына. Ҡан-ҡәрҙәштәрем быны ваҡытында аңлаһын ине. Туған телебеҙ йәшәһен өсөн тәү сиратта уны балаларыбыҙға ғаиләлә өйрәтеү фарыз. Быны барыбыҙ ҙа яҡшы беләбеҙ. Минең балаларым һәм ейән-ейәнсәрҙәрем сит ерҙә тыуып үҫһә лә, башҡорт телендә һөйләшә, йырлай һәм бейеүҙәр башҡара. Тимәк, "урыҫ теленең ҡулланылышы киң, башҡорт теленең перспективаһын күрмәйбеҙ" тигән һылтаныуҙар урынһыҙ. Һис юғында, Кавказ илдәре, Татарстан республикаһы халыҡтарына ҡарап өлгө алайыҡ. Ҡайҙа барһалар ҙа үҙ телендә һөйләшеп, беҙ шул милләт кешеләре, тип ғорурлыҡ менән күкрәк киреп йөрөйҙәр. Кавказ халыҡтары балаларына ла сит милләт исеме ҡушмай. Ә башҡорттарым араһында үҙ милләтенән һәм теленән оялып йәшәүселәр бар. Тормошобоҙҙағы күп проблемалар тәү сиратта халҡың, тарихи үткәнең менән ғорурлана белмәүҙән, телгә әһәмиәт бирмәүҙән килә ләбаһа.

Быға тиклем Башҡортостанға ҡунаҡҡа ҡайтҡан һайын китап магазиндарынан башҡортса китаптар һатып алып китә торғайным. Хәҙер һатып алырлыҡ башҡортса китаптар ҙа юҡ. Был нилектән килә? Кешеләр интернет киңлектәрендә мәш килеп, тик шуның аша ғына мәғлүмәт алыуға күсеүҙән түгелдер бит инде был. Күрәһең, башҡортса китаптар һатып алып уҡый алғандар, әҙәбиәтебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ менән ҡыҙыҡһыныусылар һирәгәйеүҙәлер быны сәбәбе. Шуға күрә, милләттәштәр, туған телебеҙҙән, башҡорт рухынан айырылмайыҡ, үҙ ғаиләбеҙҙә үҙ телебеҙҙә һөйләшәйек, тип әйткем килгәйне.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Драматург Халдун Танерҙың йөҙ йыллыҡ юбилейына арналған Халыҡ-ара пьесалар конкурсының һөҙөмтәләре билдәле булды. Беренсе урын танылған башҡорт яҙыусыһы Мәрйәм Бураҡаеваның "Шәүлә" пьесаһына бирелде.Конкурсты ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы менән берлектә Евразия Яҙыусылар союзы ойоштороҙо. Финалда төрлө илдәрҙән һәм Рәсәй төбәктәренән 109 пьеса ҡатнашты. Объективлыҡ өсөн уларҙың барыһы ла бәйгегә псевдоним аҫтында ебәрелде.

✓20 декабргә тиклем Өфөлә 19 боҙ ҡаласығы төҙөргә ҡарар ителде. Ике төп майҙандан тыш, "Дим" мәҙәниәт һәм ял паркында, Мотор эшләүселәрҙең мәҙәниәт һарайы алдында, Инорс, Шакша биҫтәләрендә, "Тулҡын" скверында, "Нижегородец" стадионында, Мөбәрәков һәм Софья Перовская урамдары киҫелешендә, "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында, Спорт һарайы, Өфө балалар филармонияһы алдындағы, С. Орджоникидзе исемендәге майҙандарҙа, шулай уҡ Нуғай, Яңы Черкассы, Тимашев, Иҫке Турбаҫлы, Чесноковка ауылдарында боҙ ҡаласыҡтары төҙөлә.

✓Башҡортостанда иң яҡшы таҡмаҡҡа һәм клипҡа Яңы йыл конкурстары иғлан ителгән. "Ҡыш бабай - Торатау итәгендәге төп ҡунаҡ тирмәһендә" темаһына иң яҡшы музыкаль клипҡа эштәр ҡабул ителә. "50 йәштән өлкәндәр" конкурсында теләгән һәр кем ошо уҡ тема буйынса иң яҡшы таҡмаҡтарын тәҡдим итә ала. Еңеүселәр аҡсалата призлар менән бүләкләнә. Ижади эштәр 2016 йылдың 10 ғинуарына тиклем ошо адрес буйынса ҡабул ителә: Башҡортостан, Ишембай районы, Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы, Ҡыш бабайға.

✓2016 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә Федераль закон ғәмәлгә инә, уға ярашлы, әгәр юл хәрәкәтен боҙған водитель ҡарар сығарылғандан һуң 20 көн эсендә штраф түләһә, уға талап ителгән сумманың яртыһын ғына индерергә кәрәк буласаҡ. Ләкин ташламалар хоҡуҡ боҙоуҙарҙың бөтә төрҙәренә лә ҡағылмай. Мәҫәлән, теркәлмәгән автомобиль менән ҡабаттан идара иткән, эскән килеш руль артына ултырған, бер яҡлы хәрәкәт итеү юлы буйынса ҡаршы йүнәлештә барған, зыян күреүселәр булған юл-транспорт ваҡиғаһы өсөн штраф түләгәндә ташлама ҡаралмаған.

**“Башинформ”дан.**

КӨН ҠАҘАҒЫНДА

# ЛАЙЫҠЛЫ ЙӘШӘҮ КИМӘЛЕ -

## төп социаль бурысыбыҙ



**Рөстәм Хәмитов республиканың бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 24-се ултырышында Башҡортостан Республикаһы Башлығының йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны. Гәзит уҡыусыларға Мөрәжәғәтнамәнән ҡыҫҡаса тезистар тәҡдим итәбеҙ.**

● Республикала конкурентлыҡ ҡеүәһен арттырыуҙың мөһим шарттарының береһе - уңғай демографик хәл. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быйылдан башлап бөтә ил буйынса күрһәткестәр насарая төштө. Кире динамиканың төп сәбәптәре - сабыйҙар һанының, бала табыу йәшендәге кешеләр күләменең дөйөм кәмеүе, тирә-яҡ мөхиткә саманан тыш техноген баҫым, һаулыҡ һаҡлау селтәрендәге етешһеҙлектәр.

● Йәштәр сәйәсәте һәм спорт, Мәғариф министрлыҡтары, муниципалитеттар асыҡ спорт инфраструктураһын, шул иҫәптән ауылда әүҙемерәк ойошторорға, "сәләмәтлек киңлеге"н булдырырға тейеш. Тәрбиәүи эште традицион рухи ҡиммәттәргә, Рәсәй тарихына һәм күп милләтле мәҙәниәтенә таянып, яңы кимәлгә күтәрергә кәрәк.

● Бөгөнгө шарттарҙа халыҡтың мәшғүллеген тәьмин итеү селтәренә һөҙөмтәле идара итеү, иҡтисадтың барлыҡ тармаҡтарында һәм сегменттарында эш биреүселәр менән бәйләнеш булдырыу мөһим. Республика Хөкүмәтенән квалификациялы белгестәрҙе үҙебеҙҙә һаҡлап ҡалыу һәм кәрәкле кадрҙарҙы башҡа биләмәләрҙән йәлеп итеү буйынса сараларҙың комплекслы планын әҙерләүҙе һорайым. Ведомстволара нигеҙҙә Башҡортостандан ситтәге вуздарҙы тамамлаған йәштәрҙең үҙебеҙгә ҡайтыуын дәртләндереү алымдарын булдырырға кәрәк.

● Лайыҡлы йәшәү кимәлен тәьмин итеү - тәү сираттағы социаль бурысыбыҙ. Республика Хөкүмәтенә Эш хаҡын арттырыу саралары планының үтәлешен бөтә кимәлдә лә контролдә тоторға, хеҙмәтсәндәрҙең законлы хоҡуҡтарын яҡлау буйынса эшмәкәрлекте көсәйтергә кәрәк.

Халыҡтың үҙмәшғүллеген, унан эшҡыуарлыҡ әүҙемлеген арттырыу йәшәү кимәлен күтәреүҙең, эшһеҙлекте кәметеүҙең ысын факторын тәшкил итә.

● 2015 йыл беҙҙең бюджет системаһын ныҡлыҡҡа һынау осоро булды. Министрлыҡтар, ведомстволар һәм муниципалитеттарҙың эшен координациялау, ҙур предприятиелар, һалым органдары, башҡа федераль структуралар менән үҙ-ара тығыҙ хеҙмәттәшлек итеү хәлде контролдә тотоу ғына түгел, килемдә 13 процентҡа арттырыу мөмкинлеген бирҙе.

Ил Президенты Владимир Владимирович Путиндың федераль Хөкүмәткә "Башнефть" компанияһы акцияларының 25 процентын Башҡортостанға тапшырыу тураһындағы күрһәтмәһе бюджетты тулыландырыу йәһәтенән республика өсөн яҙмышлы хәл иткес ваҡиғаға әүерелде. Дивидендтарҙың төүгө 5 миллиард һумы төбәктә үҫтереүгә йүнәлтелде, халыҡҡа файҙа килтерә.

● Йәмғиәттә финанс ғилемен үҫтерергә, граждандарға хоҡуҡи һәм иҡтисади белем биреү менән шөғөлләнергә, уларҙы алдаҡсыларҙан һәм финанс пирамидаларынан яҡларға кәрәк.

● Киләһе үсеш нөктәһе - ауыл хужалығы. Тармаҡты сифат йәһәтенән күләмле модернизациялау талап ителә. Беҙҙең бурыс - һәр ерҙә заманса технологияларҙың файҙаланылыуына, ныҡлы хужалыҡтар нигеҙендә эшҡыуарҙарҙың тулы циклы булған агрохолдингтар асыуға, иң элек һөҙөмтәләлеген иҫбатлаған, буленгән һәр һумды аҡлаған етештереүселәргә дәүләт ярҙамы күрһәтеүгә күсеү. Ҡулланыусылар баҙарында фермер һәм шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙың өлөшөн арттырыу өсөн ауыл хужалығы продукцияһын һатып алыу, һаҡлау һәм һатыу системаһын яйға һалыу талап ителә.

● Бәләкәй һәм урта бизнестың ҡеүәтен тулыраҡ асыу фарыз. Ошо өлкәлә мәшғүл булғандар һанын эшләгән халыҡтың өстән бер өлөшөнә тиклем, ә тулайым төбәк продуктында эшҡыуарҙы сирек өлөшкә еткереү мөһим. Беҙ намыҫлы, кәрәкле эшҡыуарҙарға "йәшел ут" булдырырға тейешбеҙ.

● Иҡтисади үсештең тағы ла бер мөһим нөктәһе - төҙөлөш комплексы. Торлаҡ алыу мөмкинлеген арттырыу уның төп бурысы булып тора. Әле республикала был баҙар ныҡ монополиялашҡан, төп уйынсылар хаҡты юғары ҡуя. Ошонан файҙаланып, намыҫһыҙ төҙөүселәр алдау юлы менән кешеләрҙе арзан торлаҡ һатып алыуға йәлеп итергә тырыша.

Республика Хөкүмәтенә хоҡуҡ һаҡлау органдары менән берлектә бындай енәйәттәргә юл ҡуймау сараһын көсәйтеү бурысын йөкмәтәм.

● Беҙ властың бөтә кимәлдәрендә коррупцияны тамырынан юҡ итеү буйынса эште дауам итергә, бындай хоҡуҡ боҙоу осраҡтарында ҡәтғи сара күрергә тейешбеҙ. Республика ҡарамағындағы дәүләт унитар һәм башҡа предприятиелар эшмәкәрлегенә контролде көсәйтеү мөһим. Хоҡуҡ һаҡлау органдары менән берлектә республика милкен, ер участкаларын шәхси структураларға күсереүгә бәйле енәйәти алымдарға ныҡлы кәртә ҡуйырға кәрәк. Һәм исемдәргә ҡарамаҫтан, барыһына ла берҙәй булаҫаҡ.

● Башҡортостанда ҙур форумдар үткәреү хоҡуғын алыу буйынса эште системалаштырыу зарур. Беҙҙә был йүнәлештә уңышлы эшмәкәрлек миҫалдары бар. Мәҫәлән, бер ай элек 2020 йылда Өфөнөң Рәсәйҙә беренсе тапҡыр уҙғарыласаҡ Бөтә донъя халыҡ ижады фестивале - Фольклориаданың баш ҡалаһына әүерелеүсәгә хаҡында ҡарар ҡабул ителде. Был "мәҙәни Олимпиада"ла донъяның тиҫтәләгән иленән меңдәрсә артист ҡатнашасаҡ. Мөһим форумға әҙерлекте әле үк башларға, мәҙәниәт учреждениелары һәм сәхнә майҙансыҡтарын, һабантуй үткәрелгән урындарҙы тәртипкә килтерергә, ҡала, райондарҙы төҙөкләндерергә кәрәк.

● Республиканы танытыу өсөн сағыу медиалы образ, иҫтә ҡалырлыҡ визуаль бренд булдырыу зарур. Ошо мөһим эшкә төбәктән ситтә йәшәгән биләле яҡташтарыбыҙҙы - ҙур уңышҡа өлгәшкән һәм бөгөн илдең ғорурлығы булған сәйәсмәндәрҙе, эшҡыуарҙарҙы, сәнғәт эшмәкәрҙәрен тулыраҡ йәлеп итергә тейешбеҙ. Был шәхестәр менән тығыҙ бәйләнеш булдырайыҡ, уларҙы "республиканың тулы хоҡуҡлы вәкилдәре" итеп күрһәтәйек.

● Рәсәй халыҡ-ара терроризмдан бөтә планетаға янаған хәүефте бөтөрөү өсөн ҡәтғи саралар күрә. Власть органдарына, көс структураларына, бөтә йәмғиәткә бөгөн айырыуса уяу булырға кәрәк. Тыйылған ойошмаларҙың эшмәкәрлегенә, йәштәрҙе пропагандалау маҡсатында эшкәртеүгә етди кәртә ҡуйырға, бының өсөн йәмәғәт берекмәләрен, киң мәғлүмәт сараларын, танылған дини үҙәктәрҙе йәлеп итеү фарыз.

● Әле Рәсәй милләтен туплау мәсьәләһе иң мөһимдәрҙең береһенә әүерелә. Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәте стратегияһын республикала һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу буйынса алдыбыҙҙа ҙур эш тора. Быйыл үткәрелгән Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһының III съезы һәм IV Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҙур әһәмиәткә эйә булды. Власть органдарына, милли-мәҙәни берекмәләргә, йәмәғәт ойошмаларына, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә республикала күп быуатлыҡ дуҫлыҡ һәм татыулыҡ йолаларын артабан да һаҡлап ҡабул буйынса берҙәм аҙымдарҙы дауам итергә кәрәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Татарстандың баш ҡалаһы Ҡазанда Көрәш буйынса IV донъя чемпионаты һәм Билбау көрәше буйынса VIII донъя чемпионаты уҙҙы. 90 килограмға тиклемге ауырлыҡ үлсәмендә көрәш буйынса Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында Башҡортостан көрәшсеһе Наил Мөхәмәтйәнов алтын миҙал яуланы һәм донъя чемпионы исеменә лайыҡ булды. 100 килограмдан ашыу ауырлыҡ үлсәмендә иркелә стилдә билбау көрәше буйынса Рөстәм Арыҫланов икенсе, 62 килограмға тиклемге ауырлыҡ үлсәмендә классик стилдә Илфат Ибәтуллин өсөнсө урын алды.

✓Башҡортостан "Европа - Көнбайыш Ҡытай" транспорт коридоры төҙөлөшө өсөн төбәк ҡаҙнаһынан аҡса бүлгән тәүге өс субъект иҫәбенә инде. Юғары тиҙлекле транспорт юлының дөйөм оҙонлоғо 702 саҡрым тәшкил итәсәк, шунын 282 саҡрымы Башҡортостан биләмәһе аша үтә. Республика биләмәһендә "Европа - Көнбайыш Ҡытай" магистраленең түләүле участкаһы төҙөлөшөнөң инвестиция проекты "Баулы - Күмертау" юлын төҙөүҙе күҙ уңында тота. Маршрутҡа ҙур сәнәғәт ҡалалары - Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат, Мәләүез, Күмертау индерелгән.

✓Йыл башынан Башҡортостан приставтары 522 легаль булмаған мигрантты республиканан сығарған. Улар араһында 322 Үзбәкстан граждандары, 105 Тажикстан граждандары, 95 Әзербайжан, Әрмәнстан, Вьетнам, Төркиә, Молдова, Ҡаҙағстан һәм башҡа дәүләттәрҙең граждандары бар. Сентябрь уртаһында 400-гә яҡын кеше тыуған иленә ҡайтарылған.

✓Һамарҙа Башҡорт йорто төҙөлә башланы. Уны 2017 йылға тамамларға ниәтләйҙәр. Бөтә милли ихаталар ҙа Һамар өлкәһенең Халыҡтар дуҫлығы йорто етәкселегендә берҙәм стилдә ҡорола. Улар Дубовый Ерик йылғаһы буйында Дуҫлыҡ паркында урынлаштырыла. Проекттың дөйөм майҙаны 12 гектар тәшкил итә. Проектта 500 урынлыҡ милли аш-һыу ресторанЫ, конференциялар залы, милли байрамдар уҙғарыу өсөн асыҡ һауала ҙур майҙан ҡаралған. Һәр йорттоң йылғаға төшөү өсөн үҙ юлы буласаҡ.

✓4-5 декабрҙә "Башҡортостан" концерт залында "Башҡорт йыры"проектының биш йыллығына арналған ҙур тамаша буласаҡ. Унда Башҡортостандың иң танылған йырсылары сығыш яһаясаҡ. Татарстан йырсыларының сығыштары ла көтөлә.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ТАМЫРҘАРЫБЫҘҘЫ БАРЛАНЫҠ,

## ә улар ҡеүәтле һәм ныҡ

**21 ноябрҙә баш ҡаланың Конгресс-холында IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙҙы. Уның эшендә Башҡортостандың район-ҡалаларынан, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙән, сит илдәрҙән 419 делегат ҡатнашты.**



"Оло йыйын Башҡорт автономияһы өсөн башланған милли хәрәкәт лидеры, публицист, тарихсы, шәрҡиәтсе, төркиәт белгесе, философия фәндәре докторы, профессор Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 125 йыл тулыу ваҡыты менән тура килде. Шуға ла оло ҡорҙа ҡараласаҡ мәсьәләләр башҡорт, Башҡортостан халҡы өсөн генә түгел, ә Рәсәйҙең барлыҡ халыҡтары өсөн дә мөһим булып тора. Быны Ҡоролтайҙа Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе К. Толкачевтың, РФ Федерация Советындағы Башҡортостан вәкилдәренең, депутаттарҙың ҡатнашыуы, РФ субъекттары вәкилдәренең, халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары ағзаларының, Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән килгән ҡунаҡтарҙың, РФ Халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Светлана Смирнованың булыуы ла раҫлай", - тине тантананы асып БР премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов.

Тәрбиқләү һүҙе менән сығыш яһап, БР Башлығы Рөстәм Хәмитов был көндөң көтөп алыныуын билдәләне, сөнки фекер алышыр мәсьәләләр - туған тел яҙмышы, рухи хазиналарҙы һаҡлау, башҡорт милләтенең бөгөнгө көнкүреше, республика тормошо һәм башҡалар бик күп йыйылған. "Беҙҙең төп бурысыбыҙ - Башҡортостанды үҫтереү, уны көслө республика булараҡ танытыу, күтәреү. Беҙ бары тик яңырыу, үҫеш юлынан ғына атларбыҙ, - тине ул. - "Ағас тамыры менән көслө", ти халыҡ мәҡәле. Ә беҙҙең быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан тамырҙарыбыҙ, ысынлап та, ҡеүәтле, көслө һәм ныҡ. Республикабыҙ һәр саҡ бөйөк Рәсәйҙең терәге булған һәм буласаҡ.

Башҡортостан халҡының Көнсығыш сифатына хас булған ҡунаҡсыллыҡ, ихласлыҡ, изге күңеллелек, ярҙамсыллыҡ, ойошҡанлығын Көнбайыштың цивилизация моделе: айыҡ прагматизам, маҡсатҡа өлгәшеүсәнлек менән байытырға тейешбеҙ. Республикабыҙ тәбиғәт хазинаһына бай, үҙенең иҡтисады, фәне, мәғарифы һәм һәләтле, хеҙмәт һөйөүсе халҡы менән көслө. Фиҙаҡәр хеҙмәт һөҙөмтәһендә Башҡортостан йылдан-йыл Рәсәйҙең динамикалы үҫешкән төбәктәре араһында үҙенең позицияларын нығыта бара. Шуға ҡарамаҫтан, эшләйһе эштәребеҙ күп. Иң беренсе бурыс - яңы эш урындары булдырыу, белем, медицина, фән өлкәһендә үҫештәргә өлгәшеү. Шуға ҡала һәм ауылдарҙа тормош сифатын төрлө яҡлап күтәрергә тырышырға кәрәк. Туған телде, мәҙәниәтте һаҡлау, йәштәргә дөрөҫ йүнәлеш биреү, республикабыҙ өсөн кәрәкле кешеләр итеп тәрбиәләү мөһим. Йәштәр дөрөҫ юлдан барһын өсөн уңайлы шарттар булдырырға, ваҡыттарын һәм көстәрен кәрәкле эшкә йүнәлтергә тейешбеҙ.

Кәңәшле эш тарҡалмаҫ, ти халыҡ. Бөгөн төрлө фекерҙәр, теләктәр күп булыр, сөнки һәр бер делегат халҡы өсөн янып йәшәй. Уларҙың барыһының да фекере тыңланыр, Ҡоролтай мөһим ҡарарҙар сығарыр тип ышанам. Беҙҙең төп бурыс - бергә, татыу йәшәү. Илебеҙ, тыуған еребеҙ сәскә атһын, туған телебеҙҙе, рухыбыҙҙы һаҡлайыҡ".

Ике Ҡоролтай арауығындағы эшмәкәрлекте йомғаҡлап, БДБҠ Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев отчет докладының менән сығыш яһаны. Уның тәҡдиме менән йыйылыусылар Ҡоролтайҙың беренсе рәйесе, күптән түгел генә арабыҙҙан киткән Нияз Мәжитовтың яҡты иҫтәлеген бер минут тын тороп хөрмәтләне. Румил Талғат улының сығышында яңғыраған тәҡдимдәр: Башҡортостан Республикаһын "Башкирия" тип атауға протест белдереү, ҡурай музыкаль уйын ҡоралын башҡа милләттәр үҙләштереүҙән һаҡлау, башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәренә һәйкәлдәр эшләү һәм уларҙың исемдәрен урамдарға биреү һ.б делегаттар тарафынан хуплау тапты.

Рәсәй Халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Светлана Смирнова Ҡоролтайҙың ролен баһалап, уның башҡорттарҙың үҫешен, телен һәм мәҙәниәтен һаҡлап тороусы иң ҙур йәмәғәт ойошмаһы ғына түгел, күп милләтле илебеҙҙең киләсәге буласаҡ Рәсәй милләте берлеген нығытыу мәсьәләләре буйынса фекер алышҡан иң абруйлы ойошма булып тора, тип белдерҙе. Шулай уҡ ул мәғлүмәт сәйәсәтенән башҡа бер генә халыҡтың да киләсәге булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Башҡортостан Халыҡтары Ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина, башҡорттар бөгөн көслө, белемле, эш һөйөүсән, үҙенсәлекле мәҙәниәтле тыныслыҡ яратыусы халыҡ, тип билдәләне һәм бары тик Рәсәйҙең күп милләтле халыҡтары менән берлегендә генә уның этнос булараҡ һаҡланып ҡалыуы һәм үҫеше мөмкин булыуын белдерҙе.

Пленар ултырыштан һуң фекер алышыу "Хәҙерге Башҡортостанда эшҡыуарлыҡ, туризм һәм ер мәсьәләләре", "Мәғариф системаһын реформалау шарттарында башҡорт милли мәғарифының проблемалары һәм үҫеш перспективалары", "Тарих һәм милли мәҙәниәт: үткәндәрҙән киләсәккә", "Башҡорт ғаиләһе: ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, һаулыҡ һәм демография", "Башҡорт телендә интернет, киң мәғлүмәт саралары: проблемалар һәм уларҙы хәл итеү юлдары", "Йәштәр - башҡорт халҡының стратегик ресурсы" темалары буйынса секцияларҙа дауам итте.

Йомғаҡлау пленар ултырышында 60 ағзанан торған яңы башҡарма комитет, яңы рәйес вазифаһына Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшеренеү институтының генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Әмир Ишемғолов һайланды. Резолюция проекты нигеҙҙә хупланып, уға тәҡдимдәр индереү ваҡыты 1 декабргә тиклем оҙайтылды.

КӨНАУАЗ

# ТӨРКИӘГӘ...

## юлдар өҙөләрмө?



**Һуңғы 15 йылда Рәсәй менән Төркиә иҡтисади мөнәсәбәттәр өлкәһендә ҙур аҙымдар эшләне. Ошо ваҡыт эсендә ике ил араһындағы тауар әйләнеше 10 тапҡырға тиерлек артты. Ләкин Төркиәнең Сирияла Рәсәй хәрби самолетын бәреп төшөрөү ваҡиғаһынан һуң был мөнәсәбәттәр, тәбиғи, ҡаҡшаны. Хәҙер иһә оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән "Төрөк ағымы" ("Турецкий поток") газ үткәргесен һәм "Росатом" АЭС-ын төҙөү кеүек бизнес-проекттарҙың да үтәлеүе шикле.**

Уҙған йыл күрһәткестәре буйынса, 31,6 миллиард һум күләмендәге тауар әйләнеше менән, Төркиә илебеҙҙең иң әүҙем ауҙа партнеры рәтендә ине. Рәсәй Төркиәгә газ, нефть һәм нефть продукттары, металл, күмер һәм бойҙай экспортлаһа, улар беҙҙе төрлө аҙыҡ-түлек һәм ауыл хужалығы сеймалы, еңел автомобиль, ҡоролмалар, туҡыма, өҫ һәм аяҡ кейеме менән тәьмин итте. Шулай уҡ Төркиә Рәсәйгә йәшелсә-емеш, ит, балыҡ һәм һөт продукттары килтереүсе иң ҙур илдәрҙең береһе. Был йүнәлештәге партнерлыҡты өҙөү ике ил өсөн дә яйлы түгел. Рәсәйгә Евросоюз илдәренән йәшелсә-емеш импортлау тыйылғанға күрә, Төркиәнән дә юл ябылыуы беҙҙең ил баҙарында был өлкәлә ҙур дефицит тыуҙырыуы һәм, тәбиғи, хаҡтарҙың артыуына килтереүе ихтимал. Ә Анкара иһә быңдай бәйләнеш юғалыуынан миллионлаған һум күләмдәге аҡсанан ҡолаҡ ҡағасаҡ.

Был ситуацияның илдең хеҙмәт баҙарында ла кире сағылыш табыуы бар. Рәсәйҙә төҙөлөш эштәре менән мәшғүл төрөк ойошмалары, подрядсылары һәм ошо йүнәлештә хеҙмәттәшлек иткән инвесторҙар бихисап. Үҙҙәрен грамоталы белгестәр итеп танытҡан төрөк төҙөүселәренең был өлкәнән китеүе күсемһеҙ милек баҙарында сифатлы йорттар төҙөлөү өмөтөн дә ҡаҡшатасаҡ, шулай уҡ күп эшсе ҡулдарҙың эшһеҙ ҡалыуына ла килтерәсәк.

Ләкин халыҡты иң борсоғаны, әлбиттә, СУ-24 менән булған ваҡиғаның ике ил араһында хәрби бәрелештәргә килтереү мөмкинлеге. Шулай ҙа Евросоюз янындағы Рәсәйҙең даими вәкиле Владимир Чижовтың: "Беҙҙең ил самолеты менән булған инцидент өсөн Рәсәй Төркиәгә хәрби йәһәттән яуап бирергә йыйынмай",- тип белдереүе күңелгә бер аҙ йылылыҡ өҫтәй. Ни тиһәң дә, ҡыяр менән помидор ашай алмау - бер, ә ҡан ҡойолоуы - бөтөнләй икенсе шул...

**Гөлназ МАНАПОВА.**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Организмды таҙартыу

❖ Организмды таҙартыу өсөн кистән ярты стакан ҡатыҡҡа 3 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһы һалырға, иртәнсәк ас ҡарынға ашарға. Бер сәғәт буйына бер нәмә лә ашамаҫҡа ла, эсмәҫкә лә, 1 сәғәттән һуң 1 стакан ҡайнар сәй эсергә. 10 көн дауам итергә.

### Үксә ярылһа...

❖ Үксә ярылһа, тигеҙ күләмдә араҡы, глицерин, һеркә эссенцияһын болғатырға. Аяҡтарҙы йылы һыуҙа тотҡандан һуң ҡоротторға һәм ошо ҡатнашманы һөртөргә. 2-3 тапҡыр ҡулланғандан уҡ шифаһы беленәсәк.

### Атеросклероз

❖ 20 грамм андыҙ тамырын ваҡлап, ҡараңғы быялалы шешәгә һалып, шешәнең яртыһына тиклем медицина спирты ҡойорға. 20 көн ҡараңғы урында төнәткәс, һөҙөргә, килеп сыҡҡан күләмде ошондай уҡ күләмдәге 20 процентлы прополис төнәтмәһе менән болғатырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 25-30-ар тамсы эсергә.

### Глаукома

❖ Әгәр ҙә дауаламаһаң, глаукома һуҡырлыҡҡа килтереүе лә мөмкин. Дауаланған мәлдә көн режимы һаҡлау ҙа кәрәк. Тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡларға, йоҡлар алдынан түгел, ә алдараҡ ашарға. Яҫтығығыҙ бейек булһын, шул саҡта күҙ эсе баҫымы күтәрелмәҫ. Глаукома менән яфаланыусыларға кәүҙәне, башты ныҡ эйергә, киҫкен хәрәкәттәр яһарға, ауырлыҡ күтәрергә, башты йылытырға ярамай. Китап уҡығанда, бәйләгәндә бүлмәлә яҡты ут янһын. Рациондан ыҫланған, тоҙланған ашамлыҡтарҙы, тәмләткестәрҙе алырға. Бөтөн ризыҡты үҫемлек майында әҙерләргә, итте һәм балыҡты быуҙа бешерергә. Глаукома мәлендә һөт ризыҡтары, емеш-еләк, йәшелсә файҙалы.

❖ Глаукома аҙып китмәһен өсөн ярты ҡалаҡ кесерткән, 1 балғалаҡ ынйы (ландыш), 1 ҡалаҡ һыу ҡушып, 8-9 сәғәт ҡараңғы урында төнәтергә, ярты балғалаҡ аш содаһы төнәтмәһе ҡушырға һәм яҡшылап болғатып, ауыртҡан күҙҙәргә ябырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр эшләргә. Кесерткән менән ынйы үләнен май айында әҙерләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Торатау аҫтындағы һыу диңгеҙгә тоташҡан, тип тә, Торатау - ерҙең кендеге, тип тә һөйләй торғайны өләсәйҙәр. Туфан һыуы ошо тау аҫтынан ҡалҡыр, тиелгән дини сығанаҡтарҙа.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АҠҠОШ...

## ҡатын-ҡыҙҙы һаҡлай

**Башҡорт халҡы аҡкоштоң үҙен изгеләштереүҙән тыш, уның һүрәте, хатта кәүҙәһенең ҡайһы бер өлөштәре магик көскә эйә, тип уйлаған.**

"Урал батыр" эпосында аҡкош ҡанаттары ғәҙәти булмаған энергия, көскә эйә. Ҡанаты һынған аҡкош эпостың төп геройҙары (Йәнбирҙе, Йәнбикә, Урал һәм Шүлгән) ҡулына эләккәс, сәләмәт ҡанатын һелкеп ебәреүе була, өс ҡауырһын төшә. Был ҡауыйҙарҙы ялалы ҡанатынан һарҡып торған ҡанға манғас, ҡайҙандыр өс аҡкош килеп сыға һәм уны алып китә.

Малайҙарҙың теүәйәтенә аҡкош йөнө тегеп ҡуйыу уны насар күҙҙән һаҡлай, тиҙәр. Байрам еләненең арҡаһына аҡкош йөнөн ҡушып яһалған биҙәктәр ҡатын-ҡыҙҙы шулай уҡ кире көстәрҙән һаҡлаусы булып хеҙмәт иткән. Аҡкош ҡауырыйы менән тырнағы борондан кешене һаҡлаусы бетеү булараҡ ҡулланылған. "Аҡкош һөтө" әкиәтендә аҡкош һөтө (бәлки, аҡкоштоң ҡаны тураһында һүҙ баралыр) йәшәү эликсиры, мөғжизәле эсемлек итеп күрһәтелә, уны эскәндән һуң батша шунда уҡ һауығып китә.

Башҡорттар йорт тәҙрәләрен бер-береһенә ҡаршы осоп барған аҡкош һындары менән биҙәй (Илеш районы). Бындай биҙәү элементтары ҡапҡаларҙа (Бүздәк, Хәйбулла райондары) ла осрай, йәғни улар был йортҡураны насар көстәрҙән һаҡлап тора.

Бындай ышаныуҙар Себер һәм Алыҫ көнсығыш халыҡтарында ла бар. Аҡкош ҡауырыйынан яһалған шаман башлыҡтары, алтай һәм ҡырғыҙ ҡатын-ҡыҙҙарының эске ягына аҡкош тиреһе тегелгән бишмәттәре ошо хаҡта һөйләй. Татар фольклорында аҡкоштоң эске ағзалары һауыҡтырыу сифатына эйә. Мәҫәлән, бер әкиәттә ауырып ятҡан бабайҙы кейәүҙәре тотоп алып ҡайтҡан аҡкоштоң бауыры һәм йөрәге менән дауалайҙар. Хантыларҙа ауырлы ҡатын алдан уҡ аҡкош тиреһенән йылы юрған тегеп ҡуя, ул тыуасаҡ баланың ғүмерен һаҡлап тора. Селькуптар легендаһында геройҙы аҡкош йөрәге менән терелтәләр.

Башҡорт архитектураһында осраған аҡкош һүрәттәре Байкал буйы бүрәттәре шамандарының кейемендә осрай. Бүрәттәрҙең, хантыларҙың, мансиҙарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың табыныу урындарында аҡкош һындары ла булған. Нанайҙарҙың туй кейеменә, шулай уҡ шаман итәктәренә аҡкош биҙәктәре сигеү киң таралған. Ҡыҙҙарҙың баш кейемдәренә парлы аҡкоштар сигеү шулай уҡ йыш осраған сюжет.

Ағас һауыттарҙың тотҡаһы аҡкош башы формаһында булыуы ихтимал, ул башҡорттарҙа ла, татарҙарҙа ла бар. Нанайҙар кәмә башын аҡкош башы формаһында эшләй. Йәғни, һәр осраҡта та был һындар, биҙәктәр кешене һаҡлап торорға тейеш булған, күрәһең.

Тик улар ҡошто изгеләштереүсе, һаҡлаусы булыуҙан тыш, ҡатын-ҡыҙға, бигерәк тә йәш килендәргә, беренсенән, бала табыу һәләте бирһә, икенсенән, был һүрәттәр шамандарға яңы сифатта "тыуыу" мөмкинлеге биргән, ахыры. Шуға ла боронғо йолаларҙың барыһында ла тиерлек аҡкош һынына бәйле элементтар бар.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТАЙ ҺҮҘЕ

**Ата-әсә өсөн сабый баланы бағыу, уны тәпәй баҫтырып, кеше араһына сығарыу мәле татлы ла, үтә йонсоткос та. Тамағын хәстәрләү, аҫтын бер туктауһыҙ ҡоротоп алыу, тәнен һылап тороу, йоҡоһоҙ төндәр, ҡабатланып торған сырхауға ҡаршы көрәш - ата-әсәнән сабырлыҡ талап иткән, бер нисә йылға һуҙылған көндәлек бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр. Баланың йылмайыуы, ятҡан урынынан аяҡ-ҡулын сабыулап талпыныуы, тәпәй баҫып китеүе, тәүге һүҙе, һөйләшә башлауы - былар инде шул ыҙаларың өсөн мул бүләк, йөнөңә ягылған бал һәм май. Мин үҙебеҙгә һәм уландарыма тағы бер бүлөк эшләгәнмен: балаларымдың шул ҡабатланмаҫ бала сағының ҡайһы бер мәлдәрен ҡағыҙға теркәп барғанмын. Шул яҙмаларымдан өҙөк тәҡдим итмәксе булдым әле "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар иғтибарына.**

# УЛАНДАР ТӘРБИӘҺЕ ТУРАҺЫНДА ҺӘМ...

## ул турала ғына ла түгел



### Иң оло ғәҙелһеҙлек был!

Кем әйтмешләй, тәҙөүселәрҙең йыш ҡына йә иҙмәһе, йә кирбесе булмай. Эштә шулай, сараһыҙҙан ҡул ҡаушырып, донъялыҡ мәшәҡәттәре тураһында уйланып ултырғанда, баламды балалар баҡсаһына бирергә ваҡыт еткәне иҫемә төштө. Ошо уй башыма килгән мәлдәге кисерештәремде хәҙер ҙә теүәл һәм айырым-асыҡ хәтерләйем. Мин тетрәнеү кисерҙем... Баланы бөтөнләй сит мөхиткә илтеп тапшырырға мәжбүр булыуыбыҙ тураһында ошоға тиклем ныҡлы уйлап ҡарамағанмын икән. Инде килеп, мәле еткәс, баланың ниндәй хәлгә ҡуйыласағын бар тәрәнлеге һәм аяныслығы менән йөрәгем аша үткәрҙем. Башҡорт теле мөхитендә донъяны таный башлаған сабый балалар баҡсаһында урыҫ теле даирәһенә барып эләгәсәк! Ул уны уратып алған иң ҡәҙерле кешеләренең - атаһының, әсәһенең, Айнур ҡустыһының, ауылдағы өләсәһенең, ҡартәсәһенең һәм башҡа туғандарының, тимәк, ошоға тиклем белгән һәм таныған ысынбарлыҡтың ситен булыуын аңҡы аңы аша аңлап, тетрәнеү кисерәсәк һәм алдағы бөтөн ғүмерен ағыулаясаҡ кәмһенеү комплексына эйә буласаҡ. Ғаиләһенән айырылыу ғына ла бала өсөн оло стресс. Өҫтәүенә, ул башҡалар менән аралашырлыҡ та, уға өндәшеүҙе аңларлыҡ та хәлдә түгел. Бала - мәғлүмәт вакуумында!

Уйымдың ошо урынында, сыҙамай, ултырған урынымдан кинәт һикереп торҙом, йөрәкте ҡыҫҡан ауыр тойғонан арыныу өсөн, шәп-шәп атлап, тәҙөлөп ятҡан объекты урап сыҡтым.

Коллегам, үҙенең һөйләүе буйынса, балалар баҡсаһына рус телен белмәй бара. "Башҡорт телендә һөйләшкән кухня хеҙмәткәре бар ине, шул апайҙың янынан китмәй, итәгенә тотоноп йөрөнөм", - тип иҫләне ул саҡтағы хәлен. Хәҙер бер ауыҙ башҡортса белмәй. Бәлки, шул мәлдә туған теленә ҡарата кире тойғо тыуғандыр?..

Тағы бер хәл. Бала балалар баҡсаһынан ҡайта ла, әсәһенән: "Нишләп миңә исем ҡушманығыҙ?" - тип һорай. Аптыраған әсә: "Бик матур исемең бар - Илшат - бөтә ил һиңә шат", - ти. "Улай исем булмай. Ниңә Саша, Коля, йә Сергей тип ҡушмағанһығыҙ?" - ти малай.

Башҡорт булып тыуғанға ғына бала ошондай һынауҙар аша үтергә тейешме? Түгел! Был аҙ һанлы милләт вәкилдәренең, лайыҡлы йәшәү өсөн, ҙурыраҡ халыҡтар ҡорған тәртипкә яраҡлашырға мәжбүр булыуы - кешелек донъяһы цивилизацияһы тыуҙырған ғәҙелһеҙлектәрҙең, һис шикһеҙ, иң ололарының береһе!

Бала был тетрәнеүҙәр аша үтмәһен, психикаһы зәғифләнмәһен өсөн беҙ уны биләүҙән үк урыҫ телендә тәрбиәләргә тейеш булып сығабыҙмы инде былай булғас? Башҡортлоғом, башҡорт телем миндә өҙәләп, артабанғы быуындарҙа уларҙың дауамы булмаҫҡа тейеш буламы? Ғәҙелһеҙлек был!

Демократик йәмғиәттә телгә ҡайһы ғәҙелһеҙлекте хәл итеүҙе дәүләт үҙ өҫтөнә ала. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарының башында был проблема, ысынлап та, дәүләт кимәлендә хәл ителә башланы. Балалар баҡсаларында башҡорт балалары өсөн айырым төркөмдәр, мәктәптәрҙә синыфтар асылды. Ләкин был башланғыс үҙенә юғары маҡсат - башҡорт балаларын дөйөм Рәсәй мөхитенә гармоник интеграциялау бурысын ҡуймаһа ни, әлбиттә, был йүнәлештә эш хәҙер ҙә һүлпән алып барыла. Юҡҡамы ни, атаәсәләр балаһын башлыса рус синыфына ултыртырға тырыша. Был интылышы һәҙәмтә бирмәгән осраҡта ғына балаһын башҡортсаға уҡырға бирә. Милли синыф уҡыусыларының социаль хәлен тикшереп ҡараһаҡ, унда, ғөмүмән, ябай ҡатлам кешеләренең балаларын ғына осратырбыҙ. Бындай күренеш бынан ҡырҡ биш йыл элек тә, беҙҙең заманда ла хөкөм һөрә.

Халыҡтың күпселеген башҡорттар тәшкил иткән беҙҙең бәләкәй ҡалала ла башҡорт синыфтарын балалар менән тултырыу үтә лә ауыр бара. Ҡайһы бер мәктәптәрҙә башҡорт синыфтары бөтөнләй йыйылмай.

Бөгөн глобаллаштереү тағы ла киңерәк ҡолас ала. Уның баҫымын күтәрергә хәлебеҙҙән килерме? Телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе имен килеш киләһе быуындарға тапшыра алырбыҙмы? Ошо һорауҙар бырaулай мейене...

**Айбулат ҒАФАРОВ.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЕР КЕНДЕГЕ БИТ УЛ ТОРАТАУ!



**Һуңғы йылдарҙа Стәрлетамаҡ "Сода" комбинатына сеймал, беҙҙең Торатауҙың ташы кәрәк, тигән имеш-мимештәр ауылыбыҙ халҡын борсоуға һала килде. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовҡа бөтә Урманбишҡаҙаҡ ауылы халҡы исеменән рәхмәт: Торатау тураһындағы шау-шыуҙарға нөктә ҡуйғандай итте. Миллион йылдар еребеҙ ҡото булып ултырған тауыбыҙ бынан һуң да тәбиғәт ҡомарткыһы булып йәшәһен, иншалла.**

Торатауҙы ватырға маташыуҙар бынан сирек быуат элек тә булғайны инде ул. 55 йыл элек, миңә ул ваҡытта 10 йәштәр тирәһе ине, тауыбыҙҙы шартлата башланылар. Шартлатканда тирә-яҡ ауылдарҙа йорттар һелкенеп, тәҙрәләр ҡойолоп төшә торғайны. Таштарын ҙур камаздар менән Стәрле яғына ташыйҙар ине. Шихан ауылы эргәһендә тәрән соҡорҙа был таштарҙы яндыра ла торғайнылар. Таштар ҡып-ҡыҙыл булып янып, эзбизгә әйләнә ине. Был эзбиз ап-аҡ, ҡаймаҡ кеүек йомшаҡ була торғайны. Ҡайҙарҙан ғына килмәнәләр ошо эзбизде алырға.

Торатау итәгендә төрмә бар ине бит инде, әле уның стенаһы ғына һерәйеп ултыра. Төрмә эргәһендәге бараҡтарҙа тауҙы шартлатыусы эшләгән кешеләр йәшәй торғайны. Бында ҙур ғына магазин да булды. Ауылыбыҙҙан 3 километр йыраҡлыҡтағы был урынға апайымдарға эйәреп, йәйәү барып, йәйәү ҡайтабыҙ. Магазиндан дәфтәр, ҡәләмдәр, уҡыу кәрәк-яраҡтары һатып алабыҙ.

Әсәйем әйтеүе буйынса, шартлауҙар башланғас, геологтар килеп, тикшереү үткәреп, Торатауҙың эсендә һыу тулҡыны бик ныҡ ҡаға, тип, шартлатыуҙы туктатҡандар. Торатау аҫтындағы һыу диңгеҙгә тоташҡан, тип тә, Торатау - ерҙең кендеге, тип тә һөйләй торғайны өләсәйҙәр. Тимәк, бынан 55 йыл элек геологтар был мәғлүмәтте раҫлағандыр, юҡһа, шартлатыуҙарҙы туктатып, Шахтауға күсмәҫтәр ине. Шул раҫлауҙар юҡҡа сыҡтымы икән ни хәҙер, тип аптырайбыҙ. Торатау аҫтындағы һыуҙың тулҡыны булып ҡағыуы юҡҡа түгел: туфан һыуы ошо тау аҫтынан ҡалҡыр, тиелгән дини сығанаҡтарҙа. Быныһын да ололар һөйләй торғайны. Халыҡтың быуындан-быуынға күсеп килгән ошондай раҫлауҙарына, һөйләүҙәренә ышанмаһалар ҙа, ниндәйҙер ныҡлы геологик тикшереүҙәр үткәрелергә тейештәр бит инде. Ул тикшереүҙәр мотлаҡ халыҡ әйткәнде иҫбат итәсәк, тип ышанабыҙ беҙ.

**Фәниә РӘШИТОВА.**
**Ишембай районы Урманбишҡаҙаҡ ауылы.**

✓ **"Башҡорттарҙың көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш тарафында йәшәгәндәре мөхтәриәт ҡаҙаныуҙы" ҡарар итә тигән һүҙҙәрем йыйылыш тарафынан, уй берлеге шартында, алҡышланып, аяҡ үрә баҫып ҡабул ителде.**



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# ХӘТИРӘЛӘР

## (әҫәрҙән өҙөк)



### Ырымбурҙа Беренсе Башҡорт ҡоролтайы

Июлдең егерме берендә (1917 йылда - **Ред.**) Беренсе Башҡорт ҡоролтайында ҡатнашыу өсөн Ырымбурға килдем. Мин килгәндә ҡоролтай асылғайны. Башҡорт Үҙәк шураһының ойоштороу бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнһәм дә, Ташкентта булғанлыҡтан, ҡоролтайҙы йыйыу эше менән үҙем етәкселек итмәнем. Әммә Төркөстан Милли шураһы менән Башҡорт Үҙәк шураһының эш регламенттарын мин яҙып, һәр ике шурала идара ағзалары яҡын арҡадаштарым булғанлыҡтан, үҙем булмаһам да, эштәр бик яҡшы ойошторолғайны. Ырымбурға килгәс, арҡадаштарым Сәғит Мираҫ һәм Аллабирҙе Йәғәфәр улы Башҡортостан ерҙәрендә алдан ҡарарлаштырған "төбәк шуралары"н ҡорғандар, милләттең ошо эшенә тотоноу өсөн аҡса йыйғандар, ҡоролтайға ағзаларҙың һәр тарафтан алдан билдәләнгән тәртип буйынса һайлап ебәрелеүен тәьмин иткәндәр. Быны күреп, бик һөйөндөм, дуҫтарымды ысын күңелдән маҡтаным. Ҡаҙаҡтарҙың ҡоролтайын да беҙҙеке менән бер үк көндәрҙә Ырымбурҙа саҡырырға ҡарар ителгәйне. Улар беҙҙеке менән бер үк көндәрҙә - 20-25 июлдә йыйылды. Ике ҡоролтай бер-береһен ҡара-ҡаршы тәбрикләне, ҡабул ителгән ҡарарҙар ҙа бер-береһенә тап килә ине. Төркөстан конгресында ла көн тәртибендәге "Дәүләт идараһы" һәм "Ер мәсьәләләре" буйынса докладсы мин булдым. Бында ла "башҡорттарҙың көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш тарафында йәшәгәндәре, мөхтәриәт юлына баҫҡан күп һанлы төрки ырыуҙар менән берләшеп, мөхтәриәт ҡаҙаныуҙы" ҡарар итә тигән һүҙҙәрем йыйылыш тарафынан, уй берлеге шартында, алҡышланып, аяҡ үрә баҫып ҡабул ителде.

Боронғо башҡорт ғәскәрен аяҡҡа баҫтырыу хаҡында ла ҡарар ҡабул ителде. Арғаяш яғы башҡорттары араһында Ҡорбанғәлиевтәр ғаиләһе бар ине. Күп ер биләүсе байҙар. Минең ер мәсьәләһе буйынса уҡыған докладымда социализм идеялары һәм ҙур ер биләмәләрен бүлешеү тезисы булғанлыҡтан, улар миңә ҡаршы сыҡты, әммә фекерҙәре ҡабул ителмәне. Электән консерватив һәм яңылыҡ дошманы сифатында танылған был ғаилә вәкиле Ғәбделхай Ҡорбанғәле, үҙенә бер төрлө хәбәр һөйләп, Үҙәк Комитет программаһына башҡа бөтә эштәрҙән бигерәк динде яҡлау бурысын ҡуйыу фекерен алға һөрҙө. Шәриф Манатов исемле бер университет студентын (үҙенең яҡташын) килтергән һәм уны яңынан һайланған Башҡорт Үҙәк шураһының Идара комитетына ағза итеп үткәрҙе. Мин Ташкентта мәшғүл булғанлыҡтан, Шура рәйеслеген үҙ өҫтәмә алмайынса, ойоштороу эштәре менән шөғөлләнергә булдым. Рәйеслеккә адвокат Юныс Бикбовты һайларға ниәтләнгәйнек, әммә шул айҙарҙа ул өйҙә булмағанлыҡтан, был урынға Шәриф Манатов һайланды. Ул бер милләтсе егет ине. Петербургта Психоневрология институты студенты булған саҡта, Балҡан һуғышы сығыу менән, Төркиәгә киткән, һуғыш бөткәс, Швейцарияға барған, унда Ленин менән танышҡан. Авантюрист тәбиғәтле, сәйәси эшмәкәрлегендә тотороҡло түгел, һул сәйәси ҡарашлы булып та, иң уң реакцион Ҡорбанғәлиевтарҙың вәкиле булып ҡыланыу кеүек ғәрип ҡылыҡтары бар ине. Ышанысһыҙ был егеттең ойоштороу һәләте лә булмағанлыҡтан, арабыҙға килеп инеүенә һис тә шатланманыҡ. Арҡадаштарым Сәғит менән Аллабирҙе лә шул фекерҙә ине. Ҡулынан бер эш килмәй. Руссаһы ла зәғиф. Бөтә проекттар һәм яуаплы яҙыуҙар миңә ҡалды.

Ҡаҙаҡтарҙың етәксеһе Ғәлихан Бүкәйхан Турғай виләйәтенең (ҡайһы бер дәүләттәрҙә административ-территориаль берәмек - **Ред.**) губернаторы ине. Кадет фирҡәһенән әле булһа айырылмаған. Шул йөҙҙән ҡаҙаҡ ҡоролтайы, мөхтәриәт хаҡында ҡәтғи бер ҡарар ҡабул итмәйенсә, ул саҡ был фекергә принципиаль тарафдарлыҡ ҡына күрһәтте. Әммә Ырымбур һәм Урал рус казактары, үҙ өлкәләренең мөхтәриәтен иғлан итеү фекерендә булғанлыҡтан, беҙҙең мөхтәриәт иғлан итеүебеҙҙе тәбрикләнеләр. Был иһә беҙгә бер яҡшы терәк булды. Сөнки улар ҙа, Башҡорт ҡоролтайы кеүек үк, үҙ ғәскәрен төҙөргә ҡарар итте. Башҡорт ҡоролтайы беҙгә Әзербайжан һәм Украина кеүек мөхтәриәт яҡлы милләттәр менән бәйләнеш урынлаштырыу хоҡуғы бирҙе. Мине, Усман Ҡыуатов исемле университет студентын һәм Илдархан Мутин тигән бер зыялыны башҡорттарҙың ер хоҡуғын һәм батша заманынан йыйылып килгән башҡорт капиталын, Ырымбурҙағы башҡорт ғәскәре биналарын, парк һәм баҡсаларын, мәсетен (Каруанһарай) кире алыу мәсьәләләре буйынса Керенский хөкүмәте менән осрашыу, быуындан-быуынға ҡалып килгән был дәғүәләрҙе хәл итеү өсөн Петроградҡа ебәрҙеләр. Мин үҙем, 10 майҙа Мәскәүҙә булған съезда Төркөстан вәкилдәре араһынан ИКОМУС-ҡа (Рәсәй Мосолман Шуралары Башҡарма Комитеты) ағза итеп һайланғанлыҡтан, Петроградҡа былай ҙа саҡырылған инем. Усман Ҡыуатов, йәш кенә медицина студенты булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт ер хоҡуғы мәсьәләләрен аңлай ине. Беҙ хөкүмәткә тапшыра торған документта 1906 йылдың 9 ноябрендә, 1910 йылдың 19 ноябрендә, 1911 йылдың 20 майында сығарылған һәм Башҡортостанға рус күскенселәре килеүҙе көсәйткән закондарҙы үҙгәртеү талабы ҡуйылды. Донъя һуғышы заманында Рәсәйҙең көнбайыш виләйәттәренән килгән күскенселәрҙең мәмләкәтебеҙҙән кире күсерелеп, уларҙың еренә эске Рәсәйҙә ҡалған татарҙарҙы килтереп ерләштереүҙең рөхсәт ителеүен дә талап иттек.

Китешләй Ҡаҙанда туҡтап, 31 июлдә тамамланасаҡ Ҡаҙан төрөктәре Конгресы етәкселәрен күреп, үҙ мөхтәриәте өсөн көрәшмәгән хәлдә лә, Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы сыҡмауҙарын һорап, риза иттек. Төньяҡ Кавказдың ҡаһарманы Шәйех Шамилдың ейәне Заһит бейҙең йортонда булған һөйләшеүҙәрҙә Ҡаҙан етәкселәре, шул иҫәптән Садри Мәҡсуди, ҡатнашманылар.

### Икенсе Башҡорт ҡоролтайы

28-29 августа Өфөлә Икенсе Башҡорт ҡоролтайы йыйылды. Петроградта, Мәскәүҙә йөрөп, беҙ ҡоролтайҙың һуңғы көнөнә килеп еттек. Был Ҡоролтайҙа 23 декабрҙә (1917) асыласаҡ "Рәсәй Ҡороусылар мәжлесе"нә һайланаһы ағзалар раҫланырға тейеш ине. Ҡоролтайҙа татарҙарҙан "ерле" (йәғни территориаль) мөхтәриәт яҡлылар һәм социалист булғандары беҙҙең менән бергә һайланыу өсөн берләште, ә унитарист Һаҙи Атласи, Закир Ҡадири һәм башҡалар, уларҙы фекерҙәренән ваз кистерергә тырышып, ҡулдарынан килгәндең бөтәһен эшләне. Мин Өфө, Ырымбур, Пермь виләйәттәренән кандидат итеп күрһәтелдем. Башҡорт Ҡоролтайынан һуң "Өфө виләйәте мосолмандары" съезы булды. Бында мин рәйеслек иткән бер ултырышта Садри Мәҡсуди бей, һүҙ алып, мөхтәриәтселәргә ҡаршы сығыш яһаны. Мин дә, рәйеслекте башҡа бер кешегә тапшырып, һүҙ алдым һәм Садри бей ғүмере буйы онотмаясаҡ нотоғомдо һөйләнем. (Хатта һуңынан Төркиәлә башҡаларҙың китабында, мәҫәлән, Хөсәйен Намыҡтың "Төрөк донъяһы"нда, был телмәрҙең мәғәнәһе боҙоп күрһәтелде). Башҡалар ҙа мине яҡланы. Был съезд Өфө виләйәтендә татар унитаристарының тамам еңелеүенә сәбәп булды. Өфө виләйәт съезы уларҙың фекерен ҡәбергә күмде, пропагандалары һөҙөмтәһеҙ ҡалды, үҙҙәре Ҡороусылар мәжлесенә лә һайланманылар.

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Бер ни тиклем ваҡыт Һабан тантанаһын тамаша ҡылғас, юлыбыҙҙы дауам иттек, ваҡ ағаслыҡ һәм һырттар буйлап алты саҡырым араны бик ҙур ауырлыҡтар менән үтеп, Йәләйәскән исемле яһаҡ түләүсе татар ауылына килеп еттек. Әле аталған ауылға тиклем юлыбыҙ нисек ауыр булһа, Егән исемле тиҙ ағымлы һәм ул саҡта уғата тәрән булған йылғаны кисеп сығыу ҙа шулай уҡ еңелдән булманы. Бында йәшәүселәр яҡын-тирәләге ауылдар менән бәйләнеш тотһа ла, шул тиклем моңһоҙҙар, күпер түгел, йылға аша сығыу өсөн һал да яһамай: юлға сығырға тура килгәндә менеп йөрөгән аттары менән йылға аша йөҙөп сығалар. Минеңсә, күмәкләшеп һал яһау урынына татар кешеһе яҙ көнө үҙенең ике атының да батып үлеүе менән тиҙерәк ризалашыр. Йылға аша сығыу өсөн һал ҡорорға мәжбүр ителгәндәрендә ошо бошмаҫ заттарҙы күҙәтеп тороу йән көйөүҙән бигерәк көлкөлө булып тойолдо: уларҙың ҡайһыһы ла нисек тә булһа һал төҙөүҙә ярҙамлашыуҙан ҡасып-боҫоп ҡалырға тырыша ине; һуңынан, һис шикһеҙ, ошо һал менән уларҙың барыһы ла ҡулланасаҡ.

Йылғаны кискәс, кискә табан Йәләйәскәндән ун һигеҙ саҡырым алыҫлыҡта булған башҡорт ауылы Ишәйгә барып еттек, унда йәшәүсе халыҡ Ағиҙелгә ҡойоусы Һәләүек һыуын эсә. Ошо ауыл эргәһендә Ырымбур топографияһына Аҡтау исеме менән индерелгән мөғжизәле тау бар. Әммә ауыл кешеләре уны Йөрәк Таш (гора Сердце) тип йөрөтә: ул тигеҙ ерҙә урынлашҡан, йоморо һәм үр яғы ослораҡ булғанға шулай атағандар. Беҙҙе ошо тауға барғанда Ишәй ауылынан оҙатып йөрөүселәр булһа ла, уның хаҡында бәйән ителгән бер генә мөғжизәне лә күрмәнек, ауыл кешеләре лә ошо хаҡта әллә ниндәй мәғлүмәт бирә алманы. Оло йәштәге башҡорт ҡарты һөйләүенсә, ул бында саф һыулы шишмә булыуын хәтерләй, әммә ул күп йылдар үтеүгә юҡ булған. Был тауҙың бейеклеге күҙ үлсәме менән етмеш сажин тирәһе; әммә унда менеүе ҡыйын түгел, һәм яҙ көндәрендә башҡорт малдары шунда йөрөй. Ағиҙел йылғаһы яғынан тау ҡаялы һәм уның урыны-урыны менән ниндәйҙер ҙур ғына ҡоролманы хәтерләткән, аҫылынып сығып торған таштары бар. Тау аҫтында Ағиҙел йылғаһынан бәләкәй генә боғаҙ менән айырымланған киң һәм тәрән күл бар. Был күл Яманкүл (Злое озеро) тип атала.Беҙ ошо күлдән әле иҫкә алынған ят һәм ғәжәп нәмәләрҙе эҙләргә уйлағайныҡ, тик юҡҡа ғына булып сыҡты: был күлдең атамаһы уның балыҡтарының ағыулы булыуынан түгел, ә уның төбөндә балыҡ тоторға ҡамасаулаған үҫемлектәрҙең күп булыуы менән аңлатыла.

Был күл Йөрәктауҙы икенсе бер Ҡош Тау (гора Стана) тип аталған тауҙан айырып ята: элекке замандарҙа был урын яҙ көндәрен ошонда йәйләргә килгән Кубань ханының станы йәки күсеп килеп ултырған төйәге (кошевье) булып торған (һүҙ Ҡуштау хаҡында бара. - **Ред.**). Ә ошо кубанлыларҙың кемдәр булыуы, ҡайһы заманда йәшәүе тураһында башҡорттар әйтә алмай, сөнки ошо хаҡта бер риүәйәттән генә беләләр. Бейеклеге буйынса был тау тәүгеһенән ҡалышмай, әммә күпкә оҙонораҡ булып, шулай уҡ ҡырағай таштарҙан хасил булған. Ҡош Тауҙан бер саҡырым тирәһеләй алыҫлыҡта ятҡан өсөнсө тау Шишәк Тау тип атала. Бейеклеге буйынса ул тәүгеләренән ҡалышмай. Тау итәгендә Ҡаҙъят исемле киң күл бар.

*✓ Миңә дөрөҫлөктө эҙләп йөрөүселәр менән йыш осрашырға тура килде. Беҙҙекеләр ҡапыл ярһый башлай ҙа, эште эҙмә-эҙлекле дауам итә белмәй, ялҡа, йөҙ төрлө фекергә эйәрә һәм, барына риза булып, "әй, ярай" тип ҡул һелтәй.*

# ҺӘР КЕМДЕҢ

## йәки Менталитет хаҡында

**Бер мәл себен менән бал ҡорто осрашҡан, ти.**
**- Һин ҡайҙа йәшәйһең? - тип һораған себен бал ҡортонан.**
**- Сәскәлектә, - тип яуап биргән бал ҡорто. - Ә һин?**
**- Ҡайҙа булһын, һаҙлыҡта инде, - тип яуаплаған себен.**
**Улар тағы бер аҙ һөйләшкәндән һуң, хушлашып, һәр ҡайһыһы үҙе йәшәгән төйәккә осҡан. Тик шуныһы: һөйләшкән саҡта себен үҙенең йәшәгән урынын һаҙлыҡ тип атаһа, ул, киреһенсә, сәскәлек менән ҡапланған болонға, ә бал ҡорто һаҙлыҡҡа йүнәлгән. Себен сәскәле болон уртаһында ат тояғы батҡан урында үҙенең бысраҡ донъяһын ҡорһа, бал ҡортоноң йәшәгән урыны - һаҙлыҡ уртаһындағы бәләкәй генә утрауҙағы өйкөм сәскәлек икән. Хикмәт шунда: бал ҡорто һаҙлыҡта - сәскәлекте, себен сәскәлектә һаҙлыҡты күргән... Ошо классик риүәйәттән сығып, менталитет хаҡында бик оҙон бәхәс ҡорорға мөмкин булыр ине. Менталитет, тигәндән, был төшөнсәне тик айырым милләттәрҙең холоҡ-фиғеленә, характер үҙенсәлегенә генә ҡайтарып ҡалдырыу ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Ғалимдар, мәҫәлән, көнсығыш менән көнбайыш, көньяҡ менән төньяҡ, Азия менән Европа, Рәсәй менән Америка менталитетын өйрәнә. Беҙ тағы ла үҙебеҙҙең милләттең милли һыҙаттары хаҡында әңгәмә ҡорорға йөрьәт иттек. Әңгәмәлә яҙыусылар Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ һәм философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ ҡатнаша.**

**▶ Башҡорт милләтен генетик башланғысынан алып өйрәнгән Рыбаков, Вәлиев, Никитина, Юлдашбаев, Юнысова, Рәхмәтуллина кеүек фән белгестәренең яҙмаларында уның менталитетын ҡылыҡһырлаған ун пункт бар. Бына улар: ирек һөйөү, дөрөҫлөктө асыҡларға теләү тойғоһо, фәлсәфәүи аң, ҡунаҡсыллыҡ, ҡыйыулыҡ, моңһоҙлоҡ, ябайлыҡ, тыйнаҡлыҡ, сабырлыҡ, ғорурлыҡ. Һеҙ ошолар менән килешәһегеҙме?**

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Был сифаттар тик башҡорт халҡына ғына хас, тип иҫәпләү бигүк дөрөҫ булмаҫ ине. Ни өсөн тигәндә, Ер йөҙөндә халыҡтар бихисап һәм уларҙың барыһы ла тиерлек юғарыла һанап үтелгән сифаттарҙың ҡайһыһыналыр ниндәйҙер кимәлдә эйә. Беҙ "кешелек" тип аталған бер үк йәшәү мөхитендә булғас, дөйөм кешелеккә хас сифаттарға ла эйәбеҙ. Менталитет - ул тарихи төшөнсә, шуға күрә ҡайһы бер сифаттарыбыҙҙың асылын, сәбәбен хәҙерге көн проблемаларынан сығып эҙләү, аңларға һәм аңлатырға тырышыу ҙур хата булыр ине. Был - бер, икенсенән, ҡайһы бер сифаттар башҡалар күҙлегенән бөтөнләй икенселәй булып күренеүе лә бар бит әле. Әйтәйек, сабыр кеше уның тарихын белмәгән башҡаларға моңһоҙ ҙа, тыйнаҡ та булып күренеүе бар.

**Зәкирйән Әминев:** Килешәм, менталитет тарихтан айырылғыһыҙ. Мәҫәлән, милләтебеҙҙең ирек һөйөүсән булыуын тарих биттәрендә утлы эҙ ҡалдырған һәм меңәрләгән батырҙарыбыҙҙың йәнен ҡыйған ихтилалдарҙан ғына ла белеп була. Тимәк, теге йәки был милләттең менталитетын белеү өсөн уның тарихын белеү фарыз. Дөрөҫлөктө асыҡларға теләү тойғоһо мәсьәләһенә туҡталғанда, мин милләттәштәремдә был тойғоноң яҡшы уҡ үҫешкәнлеге менән ризалашам. Әммә, шул уҡ ваҡытта, күп осраҡтарҙа шул дөрөҫлөктө асыҡлауҙы аҙағынаса алып барып еткерә белмәүҙәре күңелде ҡыра. Оҙаҡ йылдар закон һағы хеҙмәткәре булғас, миңә дөрөҫлөктө эҙләп йөрөүселәр менән йыш осрашырға тура килде. Беҙҙекеләр ҡапыл ярһый башлай ҙа, эште эҙмә-эҙлекле дауам итә белмәй, ялҡа, йөҙ төрлө фекергә эйәрә һәм, барына риза булып, "әй, ярай" тип ҡул һелтәй. Ә инде осона сыҡҡандар һирәк, бик һирәк.

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Ошо тәңгәлдә баштан уҡ халыҡ тигән төшөнсәнең мәғәнәһен асыҡлап китәйек. Халыҡ, тигәндә дөйөм кешелек массаһы күҙ алдына килә, уның иһә кеме юҡ. Ә башҡорт - беҙҙең милләт. Милләтебеҙҙең маҡтар һәм маҡтаныр яҡшы яҡтарын беҙ былай ҙа беләбеҙ, ә хаталарға илтер етешһеҙлектәрен, ғәҙәттә, асыҡларға ятратмайбыҙ. Был үҙенә күрә шул уҡ менталитет күрһәткесе. Тағы ла бер проблемаларға алып килә торған яғыбыҙ - ҡорбанлыҡ тойғоһо. Һин ҡорбан булып көн итеүеңде хөкүмәттән дә, етәкселәрҙән дә, ирең йә ҡатыныңдан да, эшеңдән дә, хатта һарайҙағы һыйыр менән тауығыңдан да күрәһең. Улар һине төрлө яҡлап сараһыҙландырған, бәйләгән. Һин бөтөн нәмә өсөн көс тә түгәһең кеүек, икенсе яҡтан, бер нәмә өсөн дә яуаплы түгелһең. Бары үҙеңде был йәшәйештең ҡорбаны тип кенә уйлап тик йөрөйһөң. Һәм был психология яйлап кешенән ҡол яһай. Өнһөҙ-тынһыҙ, ризаһыҙ, әммә тауышһыҙ ҡол. Үкенескә ҡаршы, бөгөн күптәребеҙ ошондай көрсөктә һымаҡ.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Ҡорбанлыҡ - тотош элекке Советтар Союзы халыҡтарына хас сифат. Ниндәйҙер аңлашылмаған абстракт киләсәк өсөн үҙеңде ҡорбан итергә әҙер тороу. Шул уҡ ваҡытта илебеҙ шул ҡорбанлыҡ иҫәбенә йәшәй ҙә. Урынлы һорау тыуа: Октябрь инҡилабына тиклем динле, Хоҙайлы булған кешеләр нисек итеп ике-өс йыл эсендә "ата большевик" булып китеп, күҙ алдарында яҡты киләсәкте һынландырып, ғүмерҙәрен бирә алды икән? Атҡа атланып, үлемдең күҙенә тура ҡарап, быуаттар һуҙымында яуға барған атай-олатайҙарыбыҙҙың да, күкрәге менән дошман дзотын ҡапларға ташланған Шакирйән, Миңлеғәле атлы башҡорт батырҙарының да, фанилыҡ менән баҡыйлыҡ һыҙығын үткәндә күҙ алдарында шулай уҡ абстракт яҡты киләсәк торҙомо икән? Юҡ, әлбиттә. Бындай осраҡта кеше Аллаһы Тәғәлә менән осраша, уның менән һаулыҡ һораша. Үҙе өсөн йәнен аямаған аҫыл заттарыбыҙ, батырҙарыбыҙ күп булған өсөн дә Ул бөгөн беҙҙе яҡлай һәм һаҡлай.

**▶ Үҙебеҙгә лайыҡлы йәшәргә ҡамасаулаған сифаттарыбыҙ хаҡында ла һүҙ алып бармай әмәлебеҙ юҡ. Сөнки үҙ-үҙебеҙҙән бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ. Әммә беҙгә лә башҡалар кеүек лайыҡлы тормош ҡорорға, балалар үҫтерергә кәрәк. Ошо күҙлектән ҡарағанда, холоҡтарҙағы баҙнатһыҙлыҡ, артыҡ тыйнаҡлыҡ аяҡ салалыр, бәлки, беҙгә, нисек уйлайһығыҙ? Моңһоҙлоҡ хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Беҙҙең быуынға, ғөмүмән, алданғанлыҡ тойғоһо хас. Ниндәйҙер системалы идеологияларға таянып, ышанып йәшәнек тә, улар ҡапыл юҡҡа сыҡты һәм беҙ алданғандар хәлендә ҡалдыҡ та ҡуйҙыҡ. Бына мин ауылға ҡайтып, пекарня астым. Үҙемсә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәм һәм ауылда күпмеләр булһа ла эш урыны булдырам, тигән ниәт менән был эшкә тотондом. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, икмәк бешереү цехының нигеҙенән башлап һуңғы нөктәһенә ҡәҙәр бөтәһен дә үҙ ҡулыбыҙ менән эшләргә тура килде. Сөнки ауылда беҙгә ялланып эшләргә теләгән кеше юҡ. Әле икмәк бешереүсенең алтынсыһын алмаштырҙыҡ: йә эсәләр, йә юғалалар, йә намыҫлы була белмәйҙәр. Өй-өй булып эшһеҙ яталар, балаларына кейем-һалымлыҡ та аҡса таба алмайҙар, әммә көс һалып хеҙмәт итеү уйҙарында ла юҡ. Әйтеүе лә оят, хәҙер миңә башҡорт ауылында икмәк бешереү өсөн үзбәкте ялларға һәм уның хәүефһеҙлеген ҡайғыртыуға чеченға мөрәжәғәт итергә тура киләсәкме? Үҙ елкәмдә татығандарҙан һуң мин инде әллә күпме баҫыуҙарҙың ташландыҡ хәлдә ятҡанына, күл-һыуҙарҙың ситтәр ҡулына күсеүенә аптырамайым.

**Зәкирйән Әминев:** Мәжит Ғафуриҙың башҡорт йәшәйеше хаҡындағы фекерҙәре араһында бик ҡыҙыҡлы ғына юлдар бар. Ул моңһоҙлоҡ башҡорттоң тик тышҡы күренеше генә, ти. Сөнки уның тәбиғәте шулай яй, тандыр. Ә үҙе экстремаль ситуацияларҙа берәүҙе лә алдына сығармай, ти. Был беҙҙең милләттең яугир халыҡ булыуын аңлата. Беҙҙе бит нисә йылдар, башҡорт күсмә халыҡ, ул дәүләт төҙөп йәшәмәгән, ерегеп донъя көтөүгә ҡулайлашмаған, тип уҡыттылар. Ә ысынында беҙҙең дәүләт булған. Дәүләт структуранан һәм ҡатламға бүленгән халыҡтан тора. Элитала батша, йәғни хандар, бейҙәр, унан яугир ҡатламы, ары руханиҙар һәм ябай халыҡ килә. Үҫәргәндәр - башҡорттоң бәшәнәк өлөшө, бөрйәндәр - яугир өлөшө һ.б. Бей тигән атама үҙе үк ғәскәр башлығын аңлатҡан. Йәғни, башҡорт яугир ҡанлы милләт булып, үҙен бик иркен тотҡан. Яу сабыу уның асылылыр ҙа әле, бәлки...

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Яңыраҡ Үҙәк телевидение аша Андрей Малахов алып барған "Пусть говорят" ток-шоуында Владикавказдан Сакинат тигән ҡыҙҙы күрһәттеләр. Ҡыҙҙың тыумыштан ике ҡулы юҡ һәм ул әҙәм балаһы ике ҡулы менән башҡарған барлыҡ ғәмәлдәрҙе аяҡтары ярҙамында эшләй. Хатта үҙенән ун йәшкә кесе һәм барлыҡ ағзалары ла теүәл, иҫән-һау булған ире Әмирхандың сәстәрен дә аяҡтары менән һыйпай. Шуныһы хәтерҙә ҡалды: Әмирхан да, ҡыҙҙың үҙе лә уның ҡулдары булмауы арҡаһында бер ниндәй ҙә уңайһыҙлыҡ кисермәй. Шулай булғас, Хоҙай Сакинатты ҡулһыҙ итеп яралтыуға ҡарамаҫтан, беҙ уны ғәрип кеше тип әйтә алмайбыҙ. Хоҙай был осраҡта ҡыҙҙың ҡул менән башҡара торған барлыҡ ғәмәлдәрен уның аяҡтарына йөкмәткән генә. Бынан сығып, минең әйтергә теләгән фекерем шул: әгәр ҙә теге йәки бер кеше йәки халыҡ тәбиғәттән ниндәйҙер сифаттарға эйә булып тыуа икән, был уның етешһеҙлеге түгел, ә тәбиғи асылы. Шуға күрә, теге йәки был халыҡтың милли сифатын, икенсе һүҙ менән әйткәндә, менталитетын уның кире сифаты тип атарға хаҡыбыҙ юҡтыр.

**▶ Совет осороноң "тигеҙләү" сәйәсәте лә беҙҙең аңға бай кешене күрә алмау хисен алып инде. Ауылдарҙа үҙ эшен асырға теләгән кешеләрҙе байырға тырышыу тип күреп, уларға ярҙам итергә ынтылып тороусыларҙың булмауы ошо сәйәсәттең һөҙөмтәһе тип әйтә алабыҙмы?**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Әйтә алабыҙ. Бөгөн ауылдарҙа эшҡыуарлыҡ менән булған, фермерлыҡты, ер эшкәртеүҙе һәм башҡа шөғөлдәрҙе алып барған кешеләрҙең һәр берeһенә һәйкәл ҡуйырлыҡ. Улар тик үҙҙәренең егәрлелеге, тырышлығы, рух ныҡлығы менән генә йәшәп килә. Ауылда уларҙы "бай" тип яратмайҙар. Ә ул "байҙың" төнгө икелә ятып, иртәнге алтыла торғанын, тәүлек әйләнәһенә ҡулынан эш төшмәүен, яҡшы эшсе табыуҙан башлап, ҡағыҙ-документ мәшәҡәттәренә тиклем әллә күпме нервы һәм ваҡыт сарыф иткәне менән ҡыҙыҡһынған әҙәм юҡ. Ниндәйҙер сит милләт вәкиленә барып ялланһа яллана ауыл халҡы, ә урындағы "байға" бил бөкмәй, йәнәһе.

**Зәкирйән Әминев:** Бик күптән, студент ваҡытымда атайым менән һөйләшеүҙе хәтерләйем. Ул саҡта йыл да ауылға ҡайтып, бесән эшләшә торғайным. Шулай бер саҡ бесәндә йөрөгән биш туған ҡыуышта һөйләшеп ятабыҙ. Һүҙҙән һүҙ сығып, атайымдың эш хаҡы тураһында: "Әллә, эшләһәң дә бер үк, эшләмәгәндәргә лә шул уҡ түләнә", - тип аптырап әйткәнен иҫләйем. Беҙ, йәштәр, быны үҙебеҙсә анализлайбыҙ, эшләгән кеше менән эшләмәгәндең бер тигеҙ булыуына риза түгелбеҙ. Бындай тигеҙләү халыҡты боҙа, уны ялҡауландыра. Халыҡ хатта эшләргә түгел, уйларға ла йыбана башлай. Бына, мәҫәлән, сәсеүгә төшөргә икәнде уларға райком әйтә, райком көтә Өфөнән, Өфө - Мәскәүҙән. Ә бит шунда йәшәгән крәҫтиән үҙ ереңең һулышын да, ҡасан сәсергә-урырға икәнлекте лә белә. Юҡ инде, улар өсөн барыһын да "башҡалар" хәл итә. Ирекле фекер йөрөтөү тигән нәмә бөтөнләй юҡ. Мин шунда уҡ "Бындай хөкүмәт күпкә бара алмай, бөтәсәк был", тигән һығымта яһағайным. Дөрөҫ булып сыҡты ла. Колхоз-совхоздар бөткәйне, берәү ҙә үҙаллы ура-сәсә, мал үрсетә, аҙыҡ-түлек етештерә белмәй булып сыҡты. Һәр ваҡыт кемдеңдер килеп фарман биререн, хәл итерен, эшләтерен көтөп яталар. Некрасовтың әҫәрендәге "Вот барин приедет - рассудит" тигән кеүек

*Ышанаһығыҙмы-юҡмы, икмәк бешереү цехының нигеҙенән башлап һуңғы нөктәһенә ҡәҙәр бөтәһен дә үҙ ҡулыбыҙ менән эшләргә тура килде. Сөнки ауылда беҙгә ялланып эшләргә теләгән кеше юҡ. Әле икмәк бешереүсенең алтынсыһын алмаштырҙыҡ: йә эсәләр, йә юғалалар, йә намыҫлы була белмәйҙәр. Өй-өй булып эшһеҙ яталар, балаларына кейем-һалымлыҡ та аҡса таба алмайҙар, әммә көс һалып хеҙмәт итеү уйҙарында ла юҡ. Әйтеүе лә оят, хәҙер миңә башҡорт ауылында икмәк бешереү өсөн үзбәкте ялларға һәм уның хәүефһеҙлеген ҡайғыртыуға чеченға мөрәжәғәт итергә тура киләсәкме? Үҙ елкәмдә татығандарҙан һуң мин инде әллә күпме баҫыуҙарҙың ташландыҡ хәлдә ятҡанына, күл-һыуҙарҙың ситтәр ҡулына күсеүенә аптырамайым.*

✓ ***Йәштәрҙә хужалыҡ тойғоһо юҡ, сөнки улар был ер өсөн, уны яулау һәм һаҡлау өсөн көс түкмәгән. Һуғышта ҡан ҡойған фронтовиктар быуыны китеп бөтөп бара, улар менән бергә ошо аҫабалыҡ тойғоһо ла китә, күрәһең.***





# ҮҘ СӘСКӘЛЕГЕ...

## бер нисә һүҙ

инде был. Хәҙер яйлап булһа ла үҙ-үҙен эше, хеҙмәте менән күтәрә торған быуын аяҡҡа баҫып килә.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** "Милләт тик азат булғанда ғына характерға эйә була ала", тигән Сталь. Мәрхүм Буранбай Искужиндың да "Азатлыҡты быуһаң, холоҡ үҙгәрә, быуат буйы ҡыҫһаң, халыҡ үҙгәрә..." тигән бик хәтәр шиғыр юлдары бар. Беҙ социализмдың кешеләрҙе, тотош халыҡтарҙы ялҡаулыҡҡа, башҡаларға һалынырға өйрәткән, үҙаллылығын юҡҡа сығарған сәйәсәт һөҙөмтәһен тағы ла байтаҡ ваҡыт татырбыҙ әле. Әлеге ваҡытта шуныһы һөйөнөслө: ауылдарҙа, бигерәк тә йәш быуын вәкилдәре элеккесә ҡушҡандарын, килеп әйткәндәрен көтөп ултырмайынса, үҙ аҙмышын үҙ ҡулына ала, үҙ эшен аса башланы.

▸ **"Ҡунаҡсыл" тигән данлыбыҙ ҙа бар. Әммә хәҙерге заманда был сифатыбыҙҙың ыңғай һөҙөмтәләренән бигерәк киреләрен күберәк татыйбыҙ бугай. Һеҙ башҡасараҡ фекерҙәме? Таш менән атҡанға аш менән яуап биреү ялҡытманымы икән?**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Әлбиттә, был беҙҙең иң күркәм ғәҙәттәребеҙҙең береһе. Сит илдәрҙә йәшәгәндә мин йыш ҡына дуҫтарҙың, туғандарҙың ошо сифаттарын һағындым. Тик уның да йыш ҡына үҙебеҙгә үк зыян яһап ҡуйыу осраҡтары ла етерлек. Бәләкәй генә миҫал: ейәнем Американан килгән ҡунаҡ малайын хөрмәтләп, балыҡҡа алып киткән. Ул балыҡтың күп булыуын, ҡунаҡтың мул уныш менән ҡайтыуын шул ҡәҙәр теләгән, хатта ҡунағын асыҡтырып, хәлдән тайҙырғансы йөрөткән. Ә уныһы, был яҡта халыҡ асығыуын белдермәй икән тип уйлап, түҙеп йөрөгән. Был иһә ҡунаҡсыллыҡта сама белмәүҙең бер күренеше, миненсә.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Ҡунаҡсыллыҡта сама булһа, иҫәп барлыҡҡа килә. Ә изгелек иҫәпкә ҡоролмай. Беҙҙең халыҡтың ҡунаҡсыллығы "Мин кемделер һыйлаһам, ҡунаҡ итһәм, ул да мине шулай итеп һыйлаясаҡ, был кеше миңә мотлаҡ кәрәк буласаҡ", тигән иҫәпкә ҡоролмай. Ҡунаҡсыллығыбыҙ, сама белмәүебеҙ ихласлыҡтан килә. Ғөмүмән, беҙҙең күп кенә ыңғай һәм кире сифаттарыбыҙҙың төбөндә шул ихласлыҡ ята. Мәсьәлә шунда ғына: яуызлыҡҡа ҡаршы ихлас ҡаршы тороуобоҙ - дыуамаллыҡ, изгелеккә яуап булған ихласлығыбыҙ бер ҡатлылыҡ булып күренә.

▸ **Яман-яҡшы төшөнсәһенән сығып фекер йөрөтөү ҙә беҙҙең халыҡҡа хас...**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Мин сит илдәрҙә булдым, Африкала, Голландияла студент булараҡ йәштәр менән тығыҙ аралаштым. Шунда мин башҡорт милләтенең дөйөм халыҡ араһында ярайһы уҡ үҙәк урындарҙың береһен биләүен аңланым. Донъяны яман-яҡшы тип кенә бүлеү дөрөҫ түгел. Донъяның, йәшәйештең, кешеләрҙең һәм уларҙың күңеленең сатҡылары бик күп төрлө. Минән Европала: "Ни өсөн һеҙ шундай байһығыҙ һәм бәхетһеҙһегеҙ?"- тип һоранылар. Улар күҙлегенән дөйөм Рәсәй үтә лә аяныслы кеүек. Һәм мин шул бәхетһеҙлекте ана шул эшкәртелмәй, ташландыҡ булып ятып ҡалған ерҙәрҙә күрҙем.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Мин үҙебеҙгә ҡәрҙәш милләт йәшәгән бер дәүләттә (билдәле сәбәптәр буйынса ул илде атамайым) уларҙың саҡырыуы буйынса ҡунаҡта булдым. Аэропортта мине гид ҡаршы алды. Ике аҙна буйына янымдан китмәне, һәр бер теләгем генә түгел, хатта яһаған ымышарам да уның тарафынан йөҙ процентҡа үтәлде. Ҡайтыр көндө аэропортҡа оҙатырға килде ул мине. Бына бер саҡ самолетҡа ултыртыу башланыр мәл килеп етте. Шул саҡ радио аша рейстың Өфөгә осоу ваҡыты ике сәғәтҡә кисектерелеүе хаҡында хәбәр иттеләр. Гидым сәғәтенә ҡарап-ҡарап торҙо ла, билетта күрһәтелгән осоу ваҡыты килеп еткәс, минең менән хушлашып та тормайынса, аэропорттан сыҡты ла китте. Мин ул саҡта уны аңлай алманым. Хәҙер генә аңлайым: уға мине оҙатып йөрөгән өсөн килгән ваҡытымдан алып Өфөгә осоп китер ваҡытҡа тиклем генә түләгәндәр. Ҡыҫҡаһы, был илдә, был дәүләттә ҡунаҡсыллыҡ тулыһынса иҫәпкә ҡорола. Мин, башҡорт кешеһе булараҡ, ҡунаҡсыллыҡтың бындай формаһын бер нисек тә ҡабул итә алмайым. Ике аҙна буйы был илгә һоҡланып йөрөгәндәге фекерҙәрем шундуҡ үҙгәрҙе. Әгәр ҙә беҙ ҙә улар һымаҡ ҡунаҡсыллыҡты, шул уҡ ваҡытта изгелекте, иҫәпкә ҡора башлаһаҡ, беҙҙе башҡа милләттәрҙән айырып торған сифаттарыбыҙ, шул иҫәптән үҙебеҙ ҙә юҡҡа сығасаҡбыҙ. Әйҙә, донъяны элеккесә аҡҡа-ҡараға бүлеп йәшәйек, уның ҡарауы, башҡорт булып ҡаласаҡбыҙ. Маҡсат ысулды аҡлаясаҡ.

▸ **Хужа булыу төшөнсәһен, йәғни аҫабалыҡ тойғоһон нисек һаҡлап ҡалырға йәки тәрбиәләргә бөгөн?**

**Зәкирйән Әминев:** Мунса күтәргән саҡта үҙебеҙҙең егеттәрҙе ялланым. Тәүге көн үк бер ярты һорап эстеләр ҙә, юҡҡа сыҡтылар. Миңә әлеге үзбәктәрҙе тәҡдим иттеләр. Башта шикләндем, беренсенән, ят халыҡ, икенсенән, агас эшен белә микән улар? Килделәр былар, эш башланылар, артыҡ һөйләшмәйҙәр, "перекур" тип туҡтамайҙар, сәй тәкдим итһәм дә әүрәмәйҙәр хатта. Бер-нисә көндә дөррәү тотоноп, эште ослап та ҡуйҙылар. Шул ваҡыт мин: "Дә-ә-ә, беҙҙә балаларҙы хеҙмәт менән тәрбиәләү тигән төшөнсә юғалып бара бит", - тип уйлап әсендем. Үҙ ерендә хеҙмәт итеп өйрәнгән кешенең уға хужалыҡ тойғоһо ла була. Ни өсөн бөгөн беҙ ер-һыуҙарыбыҙҙың таралып ятыуына битарафбыҙ, сөнки беҙҙә хужалыҡ тойғоһо түгел, ә Рәсәйлек тойғоһо. Әллә ҡайҙағы утрауҙы йәки тауҙы "беҙҙеке", йәғни Рәсәйҙеке тип ғорурланабыҙ, ә Торатауҙы һаҡлай алмайбыҙ. Хатта әлеге ваҡытта "Урал" тигән төшөнсә лә онотолоп бара бит.

Йәштәрҙә хужалыҡ тойғоһо юҡ, сөнки улар был ер өсөн, уны яулау һәм һаҡлау өсөн көс түкмәгән. Һуғышта ҡан ҡойған фронтовиктар быуыны китеп бөтөп бара, улар менән бергә ошо аҫабалыҡ тойғоһо ла китә, күрәһең. Хәтеремдә, фронтовиктар ҡатнашҡан йыйылыштарҙа улар ярып әйтә лә, нимәгәлер хужа булыуын белгертеп ҡуя ине. Аҫабалыҡ тойғоһон ҡайтарыу өсөн беҙҙә лә балаларҙы хеҙмәткә өйрәтергә, хатта мәжбүр итеп бил бөгөп өйрәтергә кәрәк. Беҙҙең быуында балалар 12-14 йәштән үҙаллы булыуға ынтыла ине. Әле йәштәрҙе ҡартайғансы бәпләп тоталар ҙа, уларҙың ялҡаулығына, бешмәгәнлегенә аптырайҙар...

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Күбебеҙ 1773-1775 йылдарҙағы Пугачев яуында баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғышҡан батша генералы Иван Михельсондың эстон милләтенән булыуын, крепостной ғаиләлә тыуып үҫеүен белмәйҙер ҙә. Ул крепостнойлыҡтың, хоҡуҡһыҙлыҡтың ни икәнен үҙ елкәһендә татып үҫкәнгә күрә, ата-әсәһенә азатлыҡ һатып алып биреү теләге менән янып, үҙ иленән Петербургҡа ҡаса. Рус батшалығы армияһында хеҙмәтен ябай һалдаттан башлап генералға тиклем үрләй. 1774 йылда Ҡыйғы ауылы янындағы яуҙа Салауат Юлаев менән йөҙгә-йөҙ осраша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн генерал Михельсон дворян дәрәжәһенә тиклем күтәрелә, тыуған яғы, ул ваҡыттағы Эстляндияла уға бер нисә йән крәҫтиән менән ер биләмәһе бирелә. Михельсон үҙенең биләмәһенә атаһы менән әсәһен дә йәшәргә ала. Ҡарт менән ҡарсыҡ көндөҙ шатланышып уларҙың биләмәһендә йөрөй ҙә, төнгөлөккә үҙҙәре өйрәнгән землянкаларына барып йоҡлай икән. Быға шаһит булған генерал Михельсон үҙенең ынтылышының, яуҙарҙа үткәргән ғүмеренең мәғәнәһеҙлеген аңлай. Бында бер үк ваҡытта менталитет хаҡында ла һүҙ алып барырға була. Һәр кешенең, милләттең менталитетын уның йәшәү шарттары билдәләй. Йәғни кеше йәки милләт ниндәйҙер бер сифаттарға эйә булһын өсөн ваҡыт талап ителә.

Беҙгә лә заманға яраҡлашыр өсөн ваҡыт талап ителә. Бының өсөн бер нисә быуын үтергә тейеш. Беҙ әлеге ваҡытта нисә быуатлыҡ динде инҡар иткән, аҡыллы-белемле кешеләрҙе ҡырған режимдың һөҙөмтәһен татыйбыҙ ғына. Мандып йәшәп китә алмауыбыҙ ҙа шунан килә. Ҡорбанлыҡ тойғоһо ла шунан. Тик артыҡ төшөнкөлөккә бирелмәйек әле. Иғтибар итегеҙ, яңыса йәшәргә теләгән ул быуын бар бит ул, тик әлегә улар йәшерәк. Бөгөнгө йәштәрҙең диндә булғандары ярайһы уҡ, улар аҡыллы, эшлекле, йәштәр үҙ милләте кешеһе менән ғаилә ҡора. Балаларыбыҙ ҙа, ана, ниндәй аңға эйә. Ошо быуын ныҡлап аяҡҡа баҫһа, миненсә, күп нәмә яйға һалынасаҡ.

▸ **Йыш ҡына, башҡорт бер-береһенә тартылмай, тигәнде ишетергә тура килә. Был дөрөҫмө?**

**Гөлсирә Ғиззәтуллина:** Мин ауылға барып эш башлағас, ундағы халыҡтың бер-береһе менән дуҫ булмағанына аптыраным башта. Һәр береһе кемделер һөйләп, тикшереп, соҡсоноп бер була ине. "Былар нисек итеп бер ауылда көн күрә икән?" тип әйтеп-әйтеп ала инем. Бер көн мине берәүҙең туйына саҡырҙылар. Ҡараһам, туйҙа бер-береһен яратмағандарҙың барыһы ла ултыра. Шундай матур ҡотлау һүҙҙәре әйтеп, ҡиммәтле бүләктәр бирештеләр. Ошонан сығып, йәшәй-йәшәй шуны аңланым. Бында халыҡтың барыһы ла бер-береһенә туған һәм зат, һәм улар нисек кенә һүҙ менән игәшһәләр ҙә, кәрәгендә ярҙамға ла, байрамға ла килә. "Ағай-эне талаша, атҡа менһә яраша" тиҙәр бит әле, хас шуның кеүек.

**Зәкирйән Әминев:** Бая әйтеп үткәйнем бит әле, башҡорт яу мәлендә уяулана, ҡырҡыу хәл итә белә, ойоша, тип. Бында бит "яу" тигәнем мотлаҡ һуғыш ҡына түгел. Ул шул уҡ бергәләшеп башҡара торған туй, байрам, өмә кеүек саралар.

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай:** Беҙҙәкеләр бер-береһен тартмай, тигән фекер дошман һүҙе ул. Быға ышанмағыҙ. Беҙ - туғанлыҡ менән көслө милләт. Мин бик күп милләт вәкилдәренең ғаиләләрендә булғаным, улар менән яҡындан аралашып йөрөгән кеше булараҡ әйтәм быны. Туғанлыҡты беҙҙән дә ныҡыраҡ ҡыуған халыҡты осратҡаным юҡ әле. Күптәрҙә хатта бер туғандар аралашмаған осраҡта беҙҙә "туған ҡыуалатыу" йолаһы һаҡланып ҡалған. Бер генә түгел, ике, өс, дүрт, биш, алты туғандар әле булһын, ҡатнашып-аралашып йәшәй. Гөлсирә апайҙың, Закирйән ағайҙың фекере менән тулыһынса килешәм: тыныс тормошта беҙ, нисектер, айырымланған һымаҡ тойолһаҡ та, кәрәк саҡта бер йоҙроҡҡа туплана ла алабыҙ. Бындай сифатыбыҙ менталитетыбыҙ кимәлендә ныҡынған.

***Беҙгә лә заманға яраҡлашыр өсөн ваҡыт талап ителә. Бының өсөн бер нисә быуын үтергә тейеш. Беҙ әлеге ваҡытта нисә быуатлыҡ динде инҡар иткән, аҡыллы-белемле кешеләрҙе ҡырған режимдың һөҙөмтәһен татыйбыҙ ғына. Мандып йәшәп китә алмауыбыҙ ҙа шунан килә. Ҡорбанлыҡ тойғоһо ла шунан. Тик артыҡ төшөнкөлөккә бирелмәйек әле. Иғтибар итегеҙ, яңыса йәшәргә теләгән ул быуын бар бит ул, тик әлегә улар йәшерәк. Бөгөнгө йәштәрҙең диндә булғандары ярайһы уҡ, улар аҡыллы, эшлекле, йәштәр үҙ милләте кешеһе менән ғаилә ҡора. Балаларыбыҙ ҙа, ана, ниндәй аңға эйә. Ошо быуын ныҡлап аяҡҡа баҫһа, миненсә, күп нәмә яйға һалынасаҡ.***

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мырҙакәрим Нурбәков көнсығыш менән көнбайыш менталитетын шулай айыра: "Көнсығыш - яңы фекер, көнбайыш цитаталар менән йәшәй..." Азия халыҡтарына ҡыҙыу темперамент, ярһыулыҡ хас булһа, Европа халыҡтарында һалҡын аҡыл өҫтөнлөк итә. Ә беҙ иһә, ошо ике ҡитға киҫешкән урында йәшәйбеҙ. Тимәк, был сифаттарҙың барыһы ла беҙҙә бар һәм улар беҙгә бөгөнгө һынауҙарҙы ла еңел генә үтеп сығырға ярҙам итәсәк. Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

АЙЫҠ ТУЙ СЦЕНАРИЙЫ

**Минең үҙемдең туйым бер ниндәй эскеһеҙ үтте. Урал аръяғы райондарында иң тәүге эскеһеҙ туйҙы атайыбыҙ башлап ебәрҙе, тиһәм дә хата булмаҫ, ул һәм атайымдың бер туған ҡустыһы балаларына айыҡ туйҙар ойошторҙо. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар тарафынан да ҡаршылыҡ булманы, бик теләп, ихлас ҡыуанып риза булдылар. Хәҙер, Аллаға шөкөр, күп йәштәребеҙ айыҡ туй үткәрергә тырыша, үҙ өлгөләрендә эскеһеҙ ҙә бынамын тигән итеп күңел асып була икәнен иҫбатлай. Туй күңелле үтһен өсөн шаян, көлкөлө уйындар, ҡыҙыҡлы һорауҙар, ярыштар үткәреү, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар менән таныштырыу, бейеү, йырҙар йырлау, таҡмаҡтар әйтеү, шиғырҙар уҡыу һәм башҡа төрлө саралар ойошторорға кәрәк.**

# БЕР ҺАРЫҠ САЛЫП БУЛҺА ЛА...

## туй мәжлесе үткәрегеҙ




* * *

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы, ҡунаҡтарҙы ҡала (ауыл) осонда (милли кейемдәрҙә мөмкин) ҡурай, гармун уйнап, бейеп-йырлап, ҡымыҙ, буҙа (һут һ.б.) менән ҡаршы алалар.

Кейәүгә кәләш йортона ингәндә төрлө һынауҙар әҙерләгеҙ:

- кәләш адресына матур, яғымлы һүҙҙәр әйттереү;
- кейәү һәр аҙым һайын ниндәй эштәр эшләй белеүен әйтеп баҫһын (бесән сабам, утын ярам һ.б.).
- кейәү "иҫтәлекле" даталар яҙылған плакаттағы һандар нимәне аңлатыуын әйтергә тейеш, мәҫәлән, 1991 - кәләшенең тыуған йылы, шулай уҡ телефон һандары, ҡәйнәһенең тыуған йылы, һ.б.

Туй башланыр алдынан лотереялар, гәзиттәр һатыла, ә аҡсалар матди ярҙам рәүешендә йәштәрҙең 3 литрлыҡ "банк"ыһына һалына.

Ике яҡтың ҡунаҡтарын аралаштырып ултыртыу бигерәк тә яҡшы булаcаҡ, сөнки туй барышында ҡунаҡтар бер-береһе менән яҡыныраҡ танышасаҡ һәм был артабан да татыу булып, ҡатнашып йәшәүгә йоғонто яһаясаҡ.

* * *

**Алып барыусы:** Әссәләмәғәләйкүм үә рахмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ, хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡоҙасалар, ҡунаҡтар! Беҙҙең барыбыҙға ла Аллаһү Тәғәләнең сәләме, рәхмәте, бәрәкәте булһын!

Бисмилләһир рахмәнир рахим!

Бәйғәмбәребеҙ хәҙисендә: "Бер һарыҡ салып булһа ла туй мәжлесе үткәрегеҙ",- тип әйтелгән. Һарыҡтар салынды, ҡунаҡтар, йәштәрҙең бар яҡындары ошо мәжлескә саҡырылды. Азат һәм Ләйсәндең ғүмерҙәрендә бер тапҡыр ғына була торған күркәм байрам - туй тантанаһын "Фатиха" сүрәһен уҡып асайыҡ.

**"Фатиха" сүрәһе уҡыла. Доға ҡылына.**

**Алып барыусы:** Ҡәҙерле Азат һәм Ләйсән! Никах - ул Аллаһы Тәғәлә ир менән ҡатынды бәйләгән килешеү. Никах - изге, яҡшы эш булып һанала, сөнки Аллаһы Тәғәлә донъяла бөтә нәмәне ишле итеп яратты. Бәйғәмбәребеҙ йәштәргә мөрәжәғәт итеп: "Әй йәштәр, өйләнә алғанығыҙ, өйләнһен, был һеҙҙе гонаһтан һаҡлар", - тине.

*Танышыуҙар, ҡауышыуҙар*
*Һеҙҙән генә ҡалмаған.*
*Был ғәҙәт бик боронғонан*
*Килә ата-бабанан.*
*Әҙәм менән Һауа ла бит*
*Ошо йәмле ерҙә*
*Бер-береһен табышҡандар*
*Ғүмер итергә бергә.*
*Егет менән ҡыҙ парлашалар*
*Шатлыҡ килтереү өсөн.*
*Нәҫел-ырыу шәжәрәһен*
*Дауам иттереү өсөн.*
*Йәшәгеҙ һеҙ пар ҡанаттар*
*Бер-берегеҙҙе аңлашып,*
*Бер-берегеҙҙе һанлашып,*
*Ғүмер буйы һайрашып.*
*Күңелегеҙҙә һис һүнмәһен*
*Изгелек, иман нуры.*
*Йортоғоҙҙа бәхет гөлө*
*Һулымаһын ғүмер буйы.*

**Йәштәр өсөн йыр яңғырай.**

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар! Азат менән Ләйсән яратышып ҡауышҡас, Аллаға шөкөр, яңы туғандар, ҡоҙа-ҡоҙасалар ҙа артты.

Әйҙәгеҙ, танышыуҙы төп ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙан башлайыҡ. Улар изге атаәсәләр, ҡәҙер-хөрмәткә лайыҡтар! Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әмер итеп шуны әйтә: "Аллаға ғына ғибәҙәт ҡылырға һәм ата-әсәгә изгелек итергә, уларға "уф" тигән һүҙҙе әйтмәгеҙ, һәр ваҡыт йомшаҡ, матур һүҙҙәр һөйләгеҙ".

Бәйғәмбәребеҙҙән бер кеше килеп, өс тапҡыр бер үк һорауҙы бирҙе: "Мин кемде артығыраҡ хөрмәтләргә тейеш?" Бәйғәмбәр өсөһөндә лә: "Әсәйеңде",- тине. Инде дүртенсе тапҡыр һорағас, Бәйғәмбәр: "Атайыңды", - тине. Был хәҙистән ата-әсәнең ниндәй хөрмәт һәм яратыуға лайыҡ икәнен күрәбеҙ. Уларға һүҙ бирәйек.

**Ҡыҙҙың һәм кейәүҙең ата-әсәләре һүҙ әйтә. Һуңынан ата-әсә хөрмәтенә йыр яңғырай.**

**Алып барыусы:** Инде ике яҡ туғандар менән танышып китәйек, сөнки Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Туғанлашығыҙ, туғанлыҡ ептәрен өҙмәгеҙ, был ғүмерҙе бәрәкәтле, хәйерле һәм оҙон итә".

**Ике яҡтың туғандары таныша. Һуңынан йыр янгырай. Музыка яңғырап тора. Йәштәр лотерея уйната (1-10 һандарын). Алдан лотереяға сыға торған һәр бүләккә тапҡыр, шаян һүҙҙәр уйлап ҡуйыла. Мәҫәлән:**

*1. Батырлыҡ өсөн миҙал (булавка).*
*2. Кер йыуыу машинаһы "Самсунг" (һабын).*
*3. Японияла етештерелгән ут тоҡандырғыс (шырпы).*
*4. Автомобиль (уйынсыҡ машина).*
*5. Шампунь "Пантин-прови" (бешкән йомортҡа).*
*6. Бушлай врач-стоматолог (һағыҙ).*
*7. Сәс киптергес-фен (таҫтамал).*
*8. Тегеү машинаһы (энә һәм еп).*
*9. Люстра (лампочка).*
*10. Саң һурҙырғыс (непертке, ҡанат).*

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡунаҡтар, Бәйғәмбәребеҙ хәҙисендә: "Бер-берегеҙгә бүләктәр бирешегеҙ, мөхәббәтегеҙ артыр", - тип әйтелә. Туйға барғанда ла йәштәргә бүләктәр биреү йолаһы бар, әле лә бер кем дә бүләкһеҙ килмәгән. Ҡотлау өсөн һүҙ кейәү менән кәләште ҡотларға килгән ҡунаҡтарға бирелә.

**Теләктәр, ҡотлауҙар, бүләктәр тапшырыу. Йыр яңғырай.**

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡоҙасалар, ҡунаҡтар, бүләктәрегеҙ бик матур, йәштәр уларҙан файҙа күрһен, ҡарап ҡыуанһын, донъя көтөү өсөн энәһе лә, ебе лә кәрәк. Ләкин донъя малына ҡыҙығып, араларындағы мөхәббәтте, ихтирамды юғалтмаһындар.

*Тормош итеү - диңгеҙ кисеү, тиҙәр,*
*Ә диңгеҙҙәр тормай тулҡынһыҙ.*
*Тормош тулҡындарын баҫыр өсөн*
*Йәшәп булмай һөйөү-ялҡынһыҙ.*
*Яратышыу еңел саҡта түгел,*
*Ауырлыҡтар менән һынала,*
*Яратышҡан татыу парҙар ғына*
*Ауырлыҡты еңеп сыға ала.*
*Ир урынында ир үҙе булһын,*
*Үрелмәһен ҡатын бүреккә.*
*Ҡатын була алыу - оло бәхет,*
*Уңған ҡатын - иргә бәхеткә.*
*Бәхеттәргә юлдар урау, тиҙәр,*
*Тормош итеү - түгел ҡыр кисеү.*
*Урау юлдың башы бына тигән -*
*Һеҙҙә уҙа торған туй кисе.*

Изге теләктәрегеҙҙе Аллаһу Тәғәлә ҡабул итһен, амин.

**Йыр яңғырай. Музыка яңғырап тора. Лотереяларҙың ҡалғаны уйнатыла.**

*11. Шәшке тиреһенән бүрек (чепчик).*
*12. Яңалма сәс (бумала).*
*13. Утын бысҡыс "Дружба" (кәләм осланғыс).*
*14. Ырымбур шәле (яулыҡ).*
*15. Киске күлдәк (эске күлдәк).*
*16. Һыу өсөн фильтр (иләк).*
*17. Крем "Нивея" (ҡыяр).*
*18. Рәсәй һаҡлыҡ банкы, филиал (3 л банка).*
*19. Музыкаль центр (борсаҡ консерваһы).*
*20. Автопортрет (көҙгө).*

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар бер аҙ ял итеп алһын, ә йәштәребеҙгә һынау үткәрәйек, донъя көтөргә әҙерме икән улар?

**Кейәү һәм кәләш өсөн уйын.**
**- Кәләштең кейәүгә һорауы - кейәүҙең кәләшкә яуабы.**
**- Ҡурсаҡ кейендереү - биләү. Кейәүҙең уң ҡулы менән кәләштең һул ҡулы бергә бәйләнгән.**
**- Кейәү төймә таға, кәләш сөй ҡаҡа.**

**Алып барыусы:** Һай, афарин! Кейәү менән кәләш бик иш килгәндәр, уңғандар, етеҙҙәр. Береһе ут булһа, икенсеһе һыу булһын. Уларҙы оло тормош юлына әҙер тип һанайбыҙ. Һәм уларға диплом һәм техник паспорттар, уставкәнәштәр, коляска йөрөтөү өсөн водитель танытмаһы тапшырып китәйек. Шулай уҡ, матур ғаилә ҡорған йәштәргә төрлө тарафтарҙан килгән телеграммаларҙы ла уҡып ишеттерәйек.

**Йәштәргә дипломдар бирелә.**

**Алып барыусы:**
*Оҙатабыҙ һеҙҙе оҙон юлға,*
*Оло юлға, тормош юлына.*
*Ҡулды - ҡулға, уйҙы - уйға бәйләп,*
*Йөрәк менән бергә булырға.*
*Ҡарамағыҙ дошман һүҙҙәренә,*
*Ғәйбәттәрҙән өҫтөн булығыҙ.*
*"Тел" алырға килгән дуҫтарҙы һеҙ,*
*Өйөгөҙҙән йыраҡ ҡыуығыҙ.*

**Йыр яңғырай.**

**Алып барыусы:** Әйҙәгеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар! Аҡыллы, батыр ул, уңған, матур ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға дипломдар тапшырайыҡ.

**Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға дипломдар бирелә.**

**Алып барыусы:** Беҙҙең бында кейәү ҡәйнәһенә миҙал һәм бүләк тә бар икән. Әйҙәгеҙ, Мөнирә апайға бүләкте тапшырайыҡ. Мөнирә апай "хәстәрле, ҡайғыртыусан ҡәйнә" миҙалы менән наградлана һәм кейәү бүләге - таба менән бүләкләнә. Мөнирә апай, кейәүең шундай уңған ҡәйнәһе булыуына бик шатлана һәм, ҡунаҡҡа килгән һайын ҡәйнәм тәмле ҡоймаҡтары менән һыйлар, тип ышана.

**Ҡәйнәгә миҙал һәм бүләк тапшырыла. Ҡәйнәгә һүҙ бирелә.**

**Алып барыусы:** Тағы ла килен ҡәйнәһенә миҙал менән бүләк бар. Әйҙәгеҙ, Таңһылыу апайға ла бүләкте тапшырайыҡ. Таңһылыу апай "Һоҡланғыс, иҫ киткес ҡәйнә" миҙалы менән наградлана һәм килен бүләге - йомғаҡ еп һәм энә менән бүләкләнә. Таңһылыу апай, киленең шундай шәп ҡәйнә насип булыуына бик ҡәнәғәт һәм үҙе лә, һеҙҙең кеүек уҡ, ейән-ейәнсәрҙәренә күнел йылыһын ҡушып, йөн ойоҡбаштар бәйләп кейҙерермен, тип хыял итә.

**Килен ҡәйнәһенә миҙал һәм бүләк тапшырыла һәм уға һүҙ бирелә.**

**Алып барыусы:** Шундай әсәй-ҡәйнәләр булғанда, ауыр тормош та еңел, күңелдәр ҙә күтәренке, йәшәү ҙә күңелле. Йәшәһен әсәйҙәр!

**Йыр яңғырай. Музыка яңғырап тора. Лотереяның ҡалғандары уйнатыла (21-30 һанлы билеттар).**

*21. Кухня комбайны (алъяпҡыс, косынка).*
*22. Уңайлы татар кроссовкиҙары (галоши).*
*23. Госдума ултырышы (горшок).*
*24. "Рәхәтлеккә" илткән оҙон юл (туалет ҡағыҙы).*
*25. Камин (утын).*
*26. Ласина (носки).*
*27. Элгес (сөй).*
*28. Шәшке тиреһенән тун (ирҙәр күлдәге).*
*29. Противогаз (кер ҡыҫтырғыс).*
*30. Кеҫә туалеты (памперс).*

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар, үҙебеҙ генә уйнап-бейеп ултырмайыҡ әле, кейәү менән кәләште лә бейетәйек.

**Кәләш батмус өҫтөндә бейей, ҡунаҡтар батмусҡа аҡса һала.**

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар! Изге теләктәр әйтелде, матур бүләктәр тапшырылды, барығыҙға ла рәхмәт. Йәштәребеҙҙең дә һеҙгә әйтер һүҙҙәре бар икән. Уларға һүҙ бирәйек. Рәхим итегеҙ, йәштәр.

**Кейәү менән кәләшкә ата-әсәһенә, ҡунаҡтарға рәхмәт әйтер өсөн һүҙ бирелә.**

**Алып барыусы:** Йәштәребеҙҙең изге теләктәренә беҙ ҙә ҡушылабыҙ һәм шиғырҙа әйтелгәнсә:

*Нисек түләп бөтөрөрбеҙ -*
*Ғүмер биргән өсөн беҙгә,*
*"Балам" тиеп, янып-көйөп*
*Йәшәгәнгә рәхмәт һеҙгә.*
*Күпме генә рәхмәт әйтһәк тә,*
*Бик аҙ булыр кеүек күңелгә.*
*Бәхет, шатлыҡ ҡына юлдаш булһын,*
*Әсәй, атай, һеҙгә ғүмергә.*

**Йыр яңғырай.**

**Алып барыусы:** Хөрмәтле йәштәр, Азат һәм Ләйсән! Тормош тигән оҙон, ауыр юлды бер-берегеҙгә таяныс булып, бер-берегеҙҙе хөрмәт итеп, бер-берегеҙҙе ғәфү итеп, бер-берегеҙгә юл ҡуйып үтергә Аллаһы Тәғәлә һеҙгә күркәм сабырлыҡтар бирһә ине, амин.

*Татлы булһын телдәрегеҙ,*
*Татлы һүҙ - йән аҙығы.*
*Татыулыҡта, тыныслыҡта*
*Йәшәйештең ҡыҙығы.*
*Тормош - бик йүгерек йылға,*
*Ағыр ҙа ағыр ғына.*
*Һеҙҙе һәр көн, сәғәт һайын*
*Һынар ҙа һынар ғына.*
*Ауырлыҡтар килгән саҡта*
*Иңде иңгә ҡуйығыҙ.*
*Ергә хәләл көстәр менән*
*Матур эҙҙәр уйығыҙ.*

**Йыр яңғырай.**

**Бейеү, уйын-көлкө дауам итә. Әгәр ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар араһында йырлаусылар булһа, бигерәк тә яҡшы. Шулай уҡ ҡунаҡтарға өҫтәл артында ултырғанда күңелле һорауҙар бирергә була. Дөрөҫ яуап биргәндәргә ҡыҙыл ҡағыҙҙан эшләнгән "йөрәктәр" бирергә, һуңынан кем "йөрәктәрҙе" күберәк йыйған, шуға бүләк һәм миҙал бирергә мөмкин: "Иң аҡыллы", "Иң күп һөйләүсе", "Иң әүҙем", "Иң күп ҡысҡырыусы", "Бөтә ергә лә танауын "тығыусы", "Иң шәп бейеүсе", "Иң шәп тел бисҭәһе" һ.б. миҙалдар әҙерләргә мөмкин. Ҡайһы бер һорауҙар:**

- Аш янында иң кәрәк ер нимә? (Урын).
- Аш килтергәс, уға иң башта нимә һалабыҙ? (Күҙ).
- Кеше башына нимә ҡуна? (Кәпәс.)
- Кемдәр беҙҙең өҫтә баштүбән йөрөй? (Себен).
- Ер йөҙөндә беренсе булып осоу аппаратын үҙләштергән ҡатын-ҡыҙ исеме? (Мәскәй әбей).
- Ашап ултырғанда кем килә? (Саҡырылмаған ҡунаҡтар.)
- Ир кеше өсөн йортта ярҙам итеү нисек аңлатыла? (Ҡатын иҙән һепергәндә, аяҡтарын күтәреп ултырыу).
- Сәйҙе ҡайһы ҡул менән болғатыуы унайлыраҡ? (Сәйҙе ҡалаҡ менән болғатыу унайлыраҡ).
- Йәшел кешене күргәс, ни эшләргә? (Юлдың икенсе яғына сығырға, сөнки был светофорҙың йәшел сигналы)
- Аш тәмле булһын өсөн нимә кәрәк? (Ас ир).
- Йорттағы дүрт аяҡлы дуҫ нимә була? (Диван).
- Уның биш бармағы бар, ләкин һөйәге лә, ите лә юҡ. Был нимә? (Бирсәткә).
- Һыу, ләкин күктән дә, ерҙән дә түгел? (Күҙ йәштәре).

**Ошондайыраҡ плакаттар яҙып элергә:**

- Йылы мөнәсәбәт көтһәң,
Йылы һүҙеңде йәлләмә.
- Бармаҡҡа - балдаҡ, елкәгә - ҡамыт.
- Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын.
- 1+1=3
- Ҡатынды йөҙөк ҡашы иткән дә, мунса ташы иткән дә - ир.

**Әминә НОҒОМАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ӘЙҘӘ, ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!*

# БЕЛЕМ ГЕНӘ ТАЛМАҪ ИТӘ БЕҘҘЕ

**"Алған ғилем бер ҡасан да ҡамасауламай, ашарға һорамай, иҫкермәй..." Был цитата - Рәйлә Сабитованың "Артыҡбикә" повесть-монологынан. Уны Мәләүез ҡалаһының механика-технология техникумы уҡытыусыһы Регина Факил ҡыҙы Аҡкөбәкова үҙенең ҡуйын дәфтәренә яҙып ҡуйған. Ғөмүмән, ҡыҙ был әҫәрҙә үҙенең күңеленә, холоҡфиғеленә тап килгән, ауаздаш йәки ҡыҙыҡ булған байтаҡ фекергә юлыҡҡан.**



*Китап уҡырға яратыусы Регина Аҡкөбәкова.*

"Кешенең ғүмер юлы һис тә һыҙыҡтарға бүлгеләнеп, юл билдәләре, светофорҙар ҡуйылған, шыма асфальт юлға оҡшамаған. Киреһенсә, ул йә һикәлтәле ҡараңғы урман аша үткән һуҡмаҡтарға, йә бер көнө ҡояшлы, икенсеһе ел-ямғырлы, ҡайһы саҡ туңдырып, хафаландырған, икенсе осор йылытып ҡыуандырған һауа торошона тиң", - был һүҙҙәрҙе Регина "Ағиҙел" журналындағы ғалим, философия фәндәре докторы Хәлил Барлыбаевтың "Яҙмыш - һикәлтәле юл" тип аталған фәлсәфәүи мәҡәләһенән алған. Ҡыҙҙың дәфтәрендә башҡорт, урыҫ һәм сит ил классиктарының әҫәрҙәренән дә өҙөмтәләр бар. Яраткан әҙәби геройҙарының цитаталарын әленән-әле иҫкә төшөрөп, студенттарға дәрес биргәндә ҡулланырға ярата ул.

Регинаны 4-се китапхана хеҙмәткәрҙәре, йәштәр араһында иң күп китап уҡыусы, тип иҫәпләп, бер ҙә яңылышмай. Быйыл туғыҙ айҙа ул 17 китап, "Ағиҙел", "Шоңҡар", "Башҡортостан ҡыҙы" кеүек әҙәби, ижтимағи-сәйәси 297 журнал алып уҡыған. Былтыр иһә 29 китап һәм 673 журналды уҡып сыҡҡан. Бынан тыш, Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге 1-се, 31-се биҫтәләге 3-сө һәм үҙәк китапханаларҙа ла йыш ҡунаҡ ул.

Китап уҡыуға әүәслеге бәләкәй саҡтан килә. "Әсәйем ҡайҙа барһа ла китап алып ҡайта ине, бала саҡта уҡыған китаптарымды әле булһа ҡәҙерләп һаҡлайым, ваҡытываҡыты менән ҡулыма алам. Мәктәптә китапханаға уҡытыусы ҡушыуы буйынса ғына түгел, үҙем теләп тә йыш йөрөй торғайным. Ниндәй әҫәрҙәргә өҫтөнлөк биреүемде йәшемә ҡарап үҙгәрә бара. Үҫмер сағымда Австралия яҙыусыһы Колин Маккалоуҙың "Поющие в терновнике" роман-бестселлерын, инглиз яҙыусыһы Шарлотта Бронтеның "Джейн Эйр", Маргарет Митчелдың "Унесенные ветром" кеүек әҫәрҙәрен уҡырға яратһам, бер осор төрлө илдәрҙең урта быуат тарихы менән ҡыҙыҡһынып алдым. Ә инде Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим кеүек халҡыбыҙҙың мәшһүр классиктарының әҫәрҙәрен уҡыған һайын уларҙан үҙем өсөн яңылыҡ алам", - ти Регина.

Һуңғы ваҡытта билдәле шәхестәрҙең, яҙыусыларҙың көндәлектәре, хәтирә-мемуарҙары, фәлсәфәүи һәм дини әҙәбиәт менән мауыға Регина. Дауалаусы психологик алымдар авторы доктор Синельниковтың, педагог-психолог Дейл Карнегиҙың китаптарын уҡыған. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы хаҡында әҫәрҙәрҙе уҡырға ярата. Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар" трилогияһын, Рәйлә Сабитованың "Артыҡбикә" повесын уҡып, үҙе өсөн күп нәмә алған.

- Әҙәбиәт - ул, ысын мәғәнәһендә, тормош дәреслеге. Унан күпме аҡыл, фәһем, рухи байлыҡ алырға мөмкин. Күптәр китап уҡыуҙы эшһеҙҙәр шөғөлө, тип иҫәпләп бик яңылыша. Ә мин китап уҡыуҙы, хатта әҙәби әҫәрҙәрҙе, әкиәтте лә, белем алыу, тип иҫәпләйем. Белем алыуҙы иһә юҡҡа ғына борондан энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиңләмәйҙәр. Уҡығанда бөтә булмышым менән әҫәрҙең геройҙары араһында йөрөйөм. Улар урынында булһам, ни эшләр инем икән, тип үҙемә һорау ҡуям. Яраткан образдарымды хәүеф-хәтәрҙән һаҡлау өсөн әллә ниҙәр эшләрҙәй булам, - ти Регина. Ҡыҙҙың китапты күҙ йүгертеп кенә сыҡмағанын оҡшаған цитаталарҙы ҡуйын дәфтәренә яҙып барыуы уҡ иҫбатлай.

"Үҙеңде ниндәй әҙәби геройға оҡшатаһың йәки оҡшарға теләр инең?" тигән һорауға Регина Маргарет Митчелдың ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, ауырлыҡтарҙы еңә белеү һәләте булған матур һәм ғорур Скарлеты менән оҡшашлығы барлығы тураһында белдерҙе. Әҙәби герой һымаҡ ул да, тик алға ҡарап, аныҡ маҡсаттар ҡуйып, яҡты хыялдар менән йәшәй. Ә беҙгә, ниәттәре бойомға ашһын, тип теләргә генә ҡала йәш ҡыҙға.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ӘҘИП ҺҮҘЕ*

# БАШҠОРТ КИТАПТАРЫ...

## йәме булһын һәр өйҙөң



**Был һанда яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлнур Яҡуповаға үҙ һорауҙарыбыҙҙы төбәнек һәм, беҙҙеңсә, бик ихлас, матур яуаптар алдыҡ.**

**➔ Әҙәбиәт йылында ижад итеү мөмкинлеге, ижади аралашыуҙар арттымы?**

- Әҙәбиәт йылымы, түгелме, һөнәре шул булғас, яҙыусы даими эш өҫтөндә инде ул. Әлбиттә, дәүләт тарафынан иғтибар өмөт уята, күнелде ҡанатландыра һәм ижад утын дөрләтеп ебәрә. Мөмкинлек, тигәнде мин ниндәйҙер унайлы шарттар, мәсәлән, торлаҡ, ижади командировка, өҫтәмә отпуск һ.б. тип аңлайым. Яҙыусылыҡты эш тип танып, айырым статус биреү, хеҙмәт хаҡы түләү тураһында ла һүҙ сығып алғылай. Был осраҡта, моғайын, эш планы, күләм, сифат мәсьәләләре лә ҡалҡып сығыр. Ижад ул ҡыҫаларға һыймай шул...

Ә бына ижади аралашыуға килгәндә, эйе, был йәһәттән Әҙәбиәт йылының йоғонтоһо күҙгә күренеп тора. "Әҙәби нағыш" маршруттары менән яҙыусылар, төркөмдәргә бүленеп, республиканың һәр районын гиҙеп сығып бара. Сәфәрҙең маҡсаты - әҙәбиәтте пропагандалау, халыҡ фекерен ишетеү һәм йәш таланттар эҙләү. Миңә лә ҡәләмдәштәрем менән байтаҡ ҡына төбәктәрҙә булырға тура килде, һәр ҡайҙа хөрмәт менән, ҡыҙыҡһынып ҡаршы алдылар, осрашыуҙарҙа ихлас һөйләшеү барҙы, ҡулъяҙмалар тикшерелде. Баймаҡ, Бүҙәк, Хәйбулла райондарында башлап яҙыусыларҙың күплеге, халыҡ шағирҙары Абдулхаҡ Игебаев, Факиһа Туғыҙбаева, Ҡәҙим Аралбаев вариҫтары үҫеүе ҡыуандырҙы.

Быларҙың барыһы ла бер йыллыҡ кампания, ваҡытлыса акция булмаһын ине, тип әйтеүҙән генә фәтүә юҡ, беҙ үҙебеҙ -яҙыусылар, йәмәғәтселек, тотош халыҡ әлеге әүҙемлекте артабан да юғалтмаҫҡа, ижади бәйләнеште өҙмәҫкә тырышһаҡ ине.

**➔ Уҡыусылар менән бәйләнеш ептәре лә төҫмөрләнгәндәй булғандыр?**

- Әҙәбиәт менән уҡыусы араһында күпер һуҙылды, йәш ижадсылар байҡалды. Башҡорт әҙәбиәте тигән тиңһеҙ рухи, мәҙәни байлығыбыҙ, остаздарыбыҙҙың юғары мәктәбе бар - дәртебеҙгә дарман, ошо йылдың үрнәктәрен традицияға әйләндерәһе ҡала. Ошоғаса тупланған тәжрибәне лә ҡушып, әлбиттә.

Китап уҡыуға килгәндә, халыҡ телевизорға, интернетҡа һалышып китте, унығы бар. Ләкин уҡымлы әҫәрҙәр барыбер кешеләрҙең зиһенен ялай, китапханаға әйҙәй. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаев әйткәнсә: "Йәме булһын башҡорт китаптары, башҡорт бишек элгән һәр өйҙөң!"

✓ ***Тик буш һауытҡа ғына нимәлер ҡойорға була. Буш күңел дә буш һауытҡа бәрәбәр. Әммә Иблис хискә, тойғоға, шатлыҡҡа тулы күңелгә лә үҙенең һыуын ҡойорға һәләтле. Был - артыҡ шатланыу, елкенеү бәләһе.***



ИНТЕРНЕТТАН



# С ВИТАМИНЫ...
## спортты алыштырамы?

■ Ике телдә иркен һөйләшеүселәр инсульт эҙемтәләрен еңелерәк кисерә, ти ғалимдар. Шотландияның Эдинбург университеты ғалимдары белдереүенсә, ике телдә аралашыусылар инсульттан һуң ике тапҡырға тиҙерәк һауыға. 608 пациентты күҙәтеп, улар ошондай һығымтаға килгән. Сирлеләргә иғтибар һәм мәғлүмәтте ҡабул итә алыу сифаттарының кире ҡайтыуы айырыуса ҡыҙыҡһындырған табиптарҙы. Кем ике йәки унан күберәк телдә иркен һөйләшә, инсульттан һуң уларҙың баш мейеһе эшмәкәрлеге 40 процент осраҡта тулыһынса тергеҙелгән, ә бер тел белеүселәрҙең 20 проценты ғына быға өлгәшә алған. "Ике телдә һөйләшеүсе сит телдә һөйләшеүгә күскәндә туған телен "баҫып" тора, юғиһә ул икенсеһен әүҙемләштерә алмай. Баш мейеһе ошо рәүешле даими күнегеү эшләгәс, инсульттан һуң уларға өйрәнелгән тормошона ҡайтыуы еңелерәк була", ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Томас Бек.

■ Голландия ғалимдары күп балалы әсәй булыу өсөн нисә йәштә бала таба башларға кәрәклеген иҫәпләп сығарған. Һуңғы 300 йыллыҡ статистикаға таянып, бала табыу өсөн иң идеаль йәш аталған. Әммә был һан ҡатын-ҡыҙҙың психологик торошонан һәм ул йәшәгән илдең экологияһына бәйле үҙгәрә ала. Шулай ҙа бер бала менән сикләнергә теләгән ҡатын-ҡыҙ 32 йәшкә тиклем бала табырға тейеш. Был ваҡиғаны һуңғараҡ ҡалдырыу баланың сәләмәтлегендә сағылыуы ихтимал. Әгәр ҙә ғаиләлә ике бала булһын, тигәндәр тәүге сабыйын 27 йәшкә тиклем ҡулына алырға тейеш. Күп балалы ҡатындар иһә 23 йәштән үк хыялын тормошҡа ашыра башларға бурыслы. Әле биш йыл элек кенә хәбәр итеүҙәренсә, күп Европа илдәре өсөн 30 йәштә тәүгә әсәй булыу ғәҙәти хәл иҫәпләнә ине. Бизнес өлкәһендә уңыштарға өлгәшкән ҡайһы бер ханымдар 35 йәштә лә һуң түгел тип раҫлай. Тағы бер тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе ҡыҙыҡ булыр моғайын - 27 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙарҙың балаһы даһи булып тыуа. Ә бына 16-22 йәшлектәрҙең балаһы интеллект кимәле менән артыҡ айырылып тормай. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, 15 йәштә әсәй булыу күпкә яҡшыраҡ.

■ "Совет спорты" баҫмаһы Zee News сайтына һылтанма яһап, һимеҙ кешеләргә фитнесты С витамины ҡушылған аҙыҡ өҫтәмәләре алыштыра ала, тип яҙа. Колорадо университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Был файҙалы витаминды даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнегеүҙәр һымаҡ кеүек тәьҫир итә икән. Тулы кәүҙәле кешеләрҙә эндотелин аҡһымы әүҙемлеге һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә боҙола, был иһә йөрәк менән бәйле проблемаларға алып килә. Был аҡһымдың әүҙемлеген даими спорт менән шөғөлләнеү генә түбәнәйтә ала. Шуға ла ғалимдарҙың яңы асышы бындай категория кешеләр өсөн еңеллек килтерәсәк. С витамины ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яҡшырта. Һис юғында, С витамины ҡабул иткәндән һуң организмға дәрт өҫтәлеп, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән күнегеүҙәр эшләй башлауы ла бар. Шулай ҙа Швейцария ғалимдары ла был витамин спортсылар өсөн кәрәкле, тип иҫәпләй.

■ Ҡытай ғалимдары, шәхси гигиена әйберҙәре сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә, тип белдерә. Пекин университеты белгестәре уларҙың хатта бала төшөү хәүефенә килтереүе тураһында әйтә. Тикшеренеүҙәрҙә 300 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан, 132-һе бындай проблема менән осрашҡан. Уларҙың анализдарында табиптар ҡайһы бер фталаттарҙың күләме ҙур булыуын асыҡлаған. Бындай фталаттар шампунда, һабында, шулай уҡ аҙыҡ-түлектең ҡаптары составында бар. Фталаттар артыҡ ауырлыҡ йыйыуға ла булышлыҡ итә, ти ғалимдар.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ
## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 11-се һабаҡ: "Иблис мутлыҡтары"

Араҡы эскән кешенең эсенә Иблис инеп урынлаша, тинек. Урынлаша ла, үҙенең ҡыйраткыс гәмәлдәрен башҡарырға, уны эске яҡтан тарҡатырға тотона. Бер аҙҙан ул күңелде яулай, рухты үлтерә, йәйлап ҡанды ағыулай барып, бауырҙы, бөйөрҙө, ашҡаҙанды эшләктән сығара, кешене юҡ итә. Эскелеккә бирелгән кешенең физик үлемгә дусар булғанға тиклем, тәүҙә күңеле үлә, рухы һына. Күңеле үлеп тә оҙаҡ йәшәгән кешеләр бар. Ниндәйләр уларҙы "зомби" тиҙәр. Үйлаһаң, уйылып китерлек: кеше кәҙимге тормош менән йәшәй, һулыш ала, туклана, йөкләй, ер өҫтөнән атлап йөрөй, әммә үҙе юҡ, сөнки күңеле үле. Ундайҙарҙың күҙ ҡараштарында өмөт осҡондары юҡҡа сыға, бары тик "мәғәнәһеҙлек" кенә сағыла. Хахылдап көлөүҙәре лә үҙенеке түгел, Иблистеке...

Хәмер кешелеккә Иблис тарафынан ебәрелгән афәт, ағыу. Ҡаршы тора алғандар, йәғни эсеүҙән ваз кискәндәр уның менән ғүмер буйы көрәшеп йәшәргә тейеш. Беренсенән, был көрәш үҙеңдең артыңдан башҡаларҙы әйәртер өсөн кәрәк булһа, икенсенән, Иблис һине бер ҡасан да онотмай. Аҙымың һайын һәр саҡ һағалап ҡына тора: холҡондоң йомшаҡ яҡтарын барлай, көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙа албырғатып, ауыҙыңа араҡы ҡойорға самалай. Хатта үҙ-үҙеңде белмәй, яңылыштан ғына йотоп ҡуйҙыңмы, бойороҡтарын бирергә тотона. Иң тәүҙә, әлбиттә, өҫтәп эсеүеңде талап итә. Оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөп, ҡабат "ысҡынып" киткәндәрҙән Иблис үткән көндәргә өсөн үсен ала. Күптәр был саҡта бер туҡтауһыҙ эсә.

Араҡыға ҡаршы көрәште, айыҡ тормошҡа ынтылыуҙы Иблискә ҡаршы көрәш тип аңлағанда ғына ниәтеңдең бойомға ашырыла тулы ышаныс бар. Был йәһәттән хәмер - хәрәм ризыҡ, ул градуслы шыйыҡса ғына түгел, Иблис тәғлимәтен бойомға ашырыусы ҡорал, кешене әхләҡи яҡтан тарҡатыусы идея. Шәхесте бер ниндәй идеология ла араҡы кеүек эстән ҡыйрата алырлыҡ көскә эйә түгел. Беҙ көн дә ашаған бойҙайҙан яһалған ризыҡты, икмәкте алайыҡ. Икмәк кешене күпме аслыҡ һәләкәттәренән ҡотҡарған, шул уҡ ваҡытта уның "бер туғаны" булған хәмер кешелекте һәләкәткә алып килә. Әйтерһең дә, әҙәм балаһы был ризыҡ аша һынау үтә. Улай ғына ла түгел, уға бер үк бойҙайҙан яһалған ике ризыҡты һайлау хоҡуғы бирелгән. Айырма шунда ғына: икмәк - Аллаһы Тәғәләнеке, хәмер - Иблистеке.

Иблис миңә үҙенең илселәрен бер туҡтауһыҙ ебәреп торҙо. Ниндәй генә сүрәткә инеп килмәне улар? Күңелемдә сәбәпһеҙ күккә күтәргән ҡыҫыр шатлыҡ, әрһеҙ ҡупайыу, урынһыҙға сығырымдан-сығарған көтөлмәгән сәбәләнеү, йөрәгемдең һәм йәнемдең барлығын иҫәмә төшөргән тәнемдәге ауыртыныу тойғоһо, эшемдәге бер-бер артлы килгән уңышһыҙлыҡтар, һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Эй ныҡышты Иблис, эй тырышты. Уның маҡсатын башта уҡ төшөнөп алдым: нисек булһа ла сығырымдан-сығарып, күңелемдең бушап ҡалған мәлен ҡарауыллап, ауыҙыма үҙенең ризыҡын ҡоймаҡсы ниәте. Шул саҡта: "Ни өсөн кеше тиктән-тиккә эсә?"- тигән һорауға ла яуап таптым, буғай. Иблис ике осраҡта кешегә араҡы эсерә ала. Беренсеһе, әйткәнемсә, күңел бушап ҡалғанда. Күңел был саҡта ҡорғаҡһыған мискәгә оҡшаш була. Кеше Иблис һыуынан күңеллелек ала ла, иртәгәһен кисә ҡорғаҡһып ҡына торған күңеленең инде ҡорой барыуын тойоп, тағы ла йота, өсөнсө көндә кибә башлағанынан һиҫкәнеп, ҡурҡышынан мәжбүри рәүештә эсеп, Иблистең ҡармағына бөтөнләйгә ҡаба.

Тик буш һауытҡа ғына нимәлер ҡойорға була. Был, ысынлап та, шулай. Буш күңел дә буш һауытҡа бәрәбәр. Әммә Иблис хискә, тойғоға, шатлыҡҡа тулы күңелгә лә үҙенең һыуын ҡойорға һәләтле. Был - артыҡ шатланыу, елкенеү бәләһе. Ни өсөн тиһегеҙме? Кеше күңеле ашып-ташып торғанда, уның сиктәренән артылып түгелгән тойғо аҡылды, зиһенде томалап ҡуя. Иблис был осраҡта әҙер генә тора. Артығыраҡ түгелеп, күңелдең бушанҡырап ҡалған өлөшөнә үҙенең эсемлеген ҡойоп та өлгөрә. Аҙаҡ былай ҙа хискә тулы күңелде осондорорға тотонмаһынмы...

Шулай итеп, уларҙы ҡуҙғытып ебәрә лә, бушай барған урынға тағы ла шул эсемлекте тултырырға тотона.

Күңелемдең бушап ҡалған саҡтары булманы түгел, булды. Тормош бит, беҙ уның көтөлмәгәнлектәренән бөтөнләйгә азат түгелбеҙ. Әммә ул мәлдәр ҡыҫҡа ғына тойолдо, ни өсөн тигәндә, мине Мөхәббәт тойғоһо ялмап алғайны. Донъяла яҡын кешем барлығын иҫемә төшөрөүем була, йәһәт кенә мөлдөрәмә тулыша инем һәм Иблис үҙенең эттектәрен ҡылырға ла өлгөрмәй ҡала ине.

Бер нисек тә мине алдыра алмаған Иблис күңелемдән ошо оло тойғомдо алып ташлар өсөн үҙенең артабанғы уй-мәкерен ҡорҙо. Әйтергә кәрәк, маҡсатына ирешә ул, кәһәр һуҡҡыры! Бер көн яныма шундайын йәш һәм сибәр һылыу килде. Күҙҙәремә ҡараны ла, яғымлы йылмайҙы. Беҙ ират бигерәк бер ҡатлы шул, һәр ҡыҙҙың үҙебеҙгә ҡарап йылмайыуын, күҙ ҡыҫыуын айырым иғтибар тип ҡабул итергә әҙер генә торабыҙ. Бер секунд эсендә күҙ алдыбыҙға уның менән буласаҡ яҡынлыкты күҙ алдына килтереп, тамшанабыҙ. Мин, барыһын да онотоп, ҡапыл үҙгәрҙем кеүек.

Ысынында иһә, был күңелемдәге оло тойғоға һынау ғына булған икән. Уның шулай икәнлеген мин теүәл бер йыл үткәс кенә аңланым. Иблистең был ғәләмәтенең мәғәнәһенә лә төшөндөм. Тимәк, мине бер нисек тә алдыра алмағас, ул иң тәүҙә күңелемдәге тойғоно үлтерергә, аҙаҡ инде бушап ҡалған "һауытҡа" шарап ҡойорға ниәтләнгән. Иблискә "кукиш" күрһәттем һунынан. Хәҙер инде шуны беләм: әгәр ҙә күңелдәге Мөхәббәт ысын тойғо икән, Иблис көсһөҙ. Сөнки ул тойғоно кешегә Аллаһы Тәғәлә бүләк итә, уны үҙе генә тартып ала. Ә Иблис иһә, һөйөү шарабы менән минең башты ҡатырып, ҡаңғырғанымда кәсәләрҙе алмаштырырға самалаған.

Оҙаҡ эсеүҙән күңелдәре үлеп, рухтары ҡыйралған кешеләрҙе осратһам, уларҙың йөҙөндә, күҙ ҡараштарында күрәм мин Иблисте. Улар миңә эсергә тәҡдим итһә, быны тик бер төрлө генә баһалайым: Иблис миңә нисек тә яҡынларға итә. Берсә инәлә, ялбара, хатта йоҙроҡ төйнәп ҡурҡытырға, өҫтөмә ташланырға ла яҫҡына уларҙың булмышындағы дошманым. Эсергә аҡса һораттыра, нисек булһа ла үҙенә хеҙмәт иттерергә тырыша. Тәүге осорҙа мин ундайҙарҙы йәлләп, "баш төҙәтерлек" бирә торғайным, аҙаҡ Иблискә мөнәсәбәтле булыуҙан бөтөнләйгә тыйылдым.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# БАШҠОРТОСТАН...
## айыҡ төбәктәр исемлегендә



**"Рейтинг" мәғлүмәти коммуникациялар үҙәге Рәсәй төбәктәре араһында айыҡлыҡ буйынса уҙғарылған тикшереүҙәр һөҙөмтәһе менән таныштырҙы. Беҙҙең республика "иң эсмәгән төбәктәр"ҙең тәүге 20-һе исемлегенә ингән.**

Айыҡлыҡты асыҡлау критерийҙары ябай: эксперттар "йәшел йылан"дан үлеүселәр һәм ауырыусылар, эскән килеш башҡарылған енәйәттәр һаны, алкоголь буйынса ҡабул ителгән закондарҙың эшләүен һәм араҡы менән һыраның һатылыу күләмен тикшергән. Ошо күрһәткестәр буйынса Башҡортостан исемлектең 19-сы урынын биләй. Беҙҙән һуң Свердловск өлкәһе килә. Ә тәүге өс урынды Чечен, Ингушетия һәм Дағстан республикалары биләй. Дүртенсе һәм бишенсе урындарҙы Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары яулаған.

Эскелек менән иң киҫкен хәл Рәсәйҙең көнсығыш төбәктәрендә тора. Был исемлектең беренсе өс урынын Мағадан өлкәһе, Ненец һәм Еврей автономия өлкәләре бүлешә.

Статистикаға ярашлы, һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә эскелек 15 процент тирәһенә кәмеһә лә, халыҡтың 76 проценты иҫерткес эсемлектәр тотконондо ҡала килә.

✓ *Үҙлекле кеше хужаға мохтаж түгел. Ул үҙе тормош ауырлыҡтарын ышаныслы, тыныс, һәр ситуацияны ғәмәлдәге ысынбарлыҡ күҙлегенән сығып ҡаршылау һәләтенә эйә.*



УЙЛЫҒА -УЙ

# БЕҘ ЭСЕРГӘ АТАЙҘАРҘАН ӨЙРӘНДЕК,

## ә атайҙар ул ғәҙәтте һуғыштан алып ҡайтты

**Сәләмәт сабыйҙарҙың барыһы ла һөйкөмлө, талантлы, зирәк һәм гениаль. Ни өсөн һуң уларҙың бик күптәре ҙурайғас, насар яҡҡа үҙгәрә, тормошто йөмләр урынға, боҙоҡлоҡҡа бара, хатта ҡот осҡос енәйәттәр ҡыла? Әгәр буй еткереп тә улар шулай уҡ эскерһеҙ булып ҡалһа, уйҙарында һәм ҡылған ғәмәлдәрендә ихласлыҡ һәм яуаплылыҡ ятһа, беҙ ожмахтың үҙендә фәрештәләр кеүек йәшәр инек тә баһа. Үкенескә ҡаршы, кешелек донъяһы (ололар донъяһы) үтәнән-үтә ялғанға, хөсөткә, ҡомһоҙлоҡҡа, көнсөллөккә ҡоролған. Был исемлекте байтаҡ дауам итергә мөмкин булыр ине.**



Донъяға саф һәм эскерһеҙ килгән баланы артабанғы тормошта ата-әсәләре үҙҙәре, насип иткән мөхит, йәмғиәт боҙа! Ында бер ниндәй ҙә арттырыу ҙа, ялғанлау ҙа юҡ. Әлбиттә, тыумыштан боҙоҡ кешенең дә булыуы ихтимал. Ғалимдәр, енәйәтсе гены бар, тип тә иҫбатлай бит. Булған хәлдә лә, сабыйҙың бер сәбәпһеҙ енәйәтсе булып китеүенә ышаныуы бик ауыр.

Йәмғиәттең, уратып алған мөхиттең ни рәүешле баланы "әүәләүен" киң таралған эскелек миҫалында айырым-асыҡ күрергә мөмкин. Бихисап бәләләр, ҡайғы-хәсрәт алып килгән эскенән беҙ баланы ҡурсаларлыҡ хәлдә түгелбеҙ. Уны өйҙә бикләп тотоп булмай. Ә мөхитебеҙ араҡыға манма батҡан. Ҙурая бара, ҡайһылыр бер мәлдә, шарап тәмен барыбер татый бала. Артабан, кемеһелер күңел өсөн генә рюмка күтәрә, байтаҡтар эскеһеҙ бер генә ваҡиғаны ла үткәрә алмай, ҡайһыларҙың эскелек йәшәү мәғәнәһенә әүерелә - эскегә һабыша улар. Иллә мәгәр, араҡы эсеп ҡарамаған бер генә кеше лә юҡ арабыҙҙа. Йәмғиәтебеҙҙе тотошлайы менән ялмап алған эскенән ҡасып та, башҡаса ла ҡотолормон тимә. Малайҙар тәрбиәләгәнлектән, иң ҙур теләктәремдең береһе - ҙурайғас, уларҙың хәмергә битараф ҡалыуҙары ине.

* * *

Эскелек проблемаһының асылын, беҙҙең быуындың - үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында тыуғандарҙың - нисек араҡы эсә башлауы һәм уның ҡолона әүерелеүе миҫалында айырым-асыҡ күрергә мөмкин. Көнкүрештә ҡыуаныу, ҡайғырыу, байрам итеү, ял ойоштороу, буш ваҡытты үткәреү, һыныҡты яҙыу фәҡәт эскелек ойоштороуға ҡайтып ҡалған совет йәмғиәтендә тәрбиә эше лә шаҡтай ҡаты ҡуйылғайны. Мәктәптең башланғыс синыфтарында - октябрят, унан - пионер, аҙаҡ комсомол ойошмаларында тәрбиә коммунизм төҙөүсе кодексы принциптарына таянып алып барылды. Беҙҙе тоғро булырға, ялғанламаҫҡа, интәшенә һәм мохтаждарға һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер торорға өйрәттеләр. Араҡы эсеү, тәмәке тартыу, алдашыу, үҙ мәнфәғәтендә өҫтөн ҡуйыу иң алама ғәҙәттәр, тип баһаланды һәм ләғнәтләнде.

Мин үҙем хөкүмәт тәрбиәһе көнөтөнө алып барылған интернат-мәктәптә бишенсе синыфтан алып алты йыл дауамында уҡыным. Беҙҙең анға коммунистик, йәғни дөрөҫ йәшәү принциптары уғата ныҡ һеңдерелгәйне. Шуға ҡарамаҫтан, һабаҡташ ун бишләп ир-егет араһында араҡыға бирелмәгән дүрт-биш кенә кеше бар. Ә ауылда ҡорҙаштарым араһында ундайҙар берәү-икәү генә.

Эскелеккә минең быуын атайҙарҙан өйрәнде. Беҙҙең атайҙар - һуғыш йылы балалары - башҡорттарға хас булмаған эскелекте фронтовиктарҙан эләктереп алған тәүге быуын булғандыр. Ә "наркомовский сто грамм" ҡорбандары хәмерҙең тәмен ғәрәсәтле ут эсендә татып, эскелек мәҙәниәтен (йолаларын) тыуған төйәккә алып ҡайтырға мәжбүр ителгәйне. Бының өсөн яугир атай-олатайҙарыбыҙға бер ҙә ғәйеп ташлап булмай, әлбиттә. Һуғыш асҡан фашистарҙы ғына ҡарғарға ҡала. Беҙҙең атайҙар самаһыҙ эсте һәм эстафетаны "унышлы" ғына улдарына тапшырып ҡуйҙы.

* * *

Мин үҙем һәм ҡорҙаштарым шарап тәмен тәүге тапҡыр төрлө халәттә һәм төрлө шарттарҙа татып ҡараныҡ. Хатта көнө-төнө ҡарау (ҡараул) аҫтында булған интернат балалары ла хәмер эсеп маташты. Әлбиттә, улар иҫергәнсе эсмәне. "Отбой" булғас, ҡараңғы булмәлә, берәр йотом ғына. Бер шешә шарапты (бормотуха, тип йөрөтә торғайнылар уны) ун-ун биш башҡа бүлешеп. Был уларға нимә бирҙе икән? Ололар тормошон башларға торғанда сирҡаныс алыу булдымы? Тыйылғанға ороноп, ләззәт кисереүме? Үҙенде оло итеп тойорға маташыумы? Әллә, бөгөнгөсә әйткәндә, адреналин көҫәүме? Был һорауҙарҙың барыһына ла "эйе" тип яуап бирергә мөмкиндер. Һәм ошо урында тағы бер һорау тыуа: үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫырға торған, донъялыҡты бар бөтөнлөгө менән белеп-тойомларға ынтылған йәш кеше тормошто йәмле итә, ләззәтләндерә торған башҡа ысулды (юлды) белмәнеме икән ни? Күрәһең, юҡтыр!

Беҙҙең һәр беребеҙ эскелек "мәҙәниәтен" (кешенең мәҙәниһеҙлеген) сабый саҡтан күреп үҫтек. Күптәрҙең аңында (төпкө аңында) урын алған, тормош шулай була икән, тигән төшөнсәне дәүләт тәрбиәһе төҙәтә алырлыҡ хәлдә булмағандыр, моғайын. Беҙҙең анға һалынған программаны юйыр өсөн уҡытыусы һәм тәрбиәселәребеҙ Макаренконан бер ҙә ҡалышмаҫҡа тейеш булғандарҙыр. Ундай педагогтар иһә меңгә берәү генә. Үкенескә ҡаршы.

* * *

Ете-һигеҙ йәшемдә мин һыра эсергә әүәҫләнеп алдым. Ялға ҡарай әсәйем, атайыма тип, өс литрлыҡ банка менән һыра алып ҡайтып ултырта. Тәүге тапҡыр, күрәһең, ололар күрмәгәндә, ҡыҙыҡ өсөн генә йотоп ҡарағанмындыр уны. Атай бушҡа эсмәйҙер, тәмлелер, тип уйлағанмындыр инде. Иҫләмәйем, был аҙымға нимә этәргәнен.

Артабан, банка ҡайтып ултырған һайын бер-ике йотом уртлауҙы ғәҙәт итеп алдым. Артығын эсмәйем, сөнки бүҫкәргәнен шәйләп ҡалыуҙары ихтимал. Шулай бер ваҡыт һыраның ҡайтып ултырғанын көтөп йөрөй башланым. Үҙемдә был спиртлы эсемлеккә тартылыу тойҙом һәм... ҡурҡтым. Эскелектең иң алама ғәҙәт икәнен мәктәптә аңыма һалып өлгөргән булғандарҙыр инде. Үҙемә, ярамай, тинем, һәм башҡаса һырағa оронманым.

Абайһыҙҙан шарапты (бормотуханы) мин ун ике - ун өс йәштәр тирәһендә тәмләп ҡараным. Абайһыҙҙан, тим, сөнки мин уны компот икән, тип йоттом. Ул шулай булды. Эскелек менән нык мауыҡҡан атайҙарыбыҙ баҡыйлыҡҡа иртә китеп бөттөләр. Ауылыбыҙ урамының беҙ йәшәгән осонда һуғыштан алда тыуған ирҙәр үткән быуаттың етмешенсе йылдары уртаһына, ғәмәлдә, ҡалмағайны. Төрлөсә китте улар был донъянан. Үҙҙәренә ҡул һалдылар, фажиғәле үлделәр, сир ҙә гүмерҙәрен ҡыйҙы.

Әле ҡырҡ йәше лә тулмаған, яңы бишенсе тиҫтәне ваҡлаған яңғыҙаҡ ҡатындар эске табындарын үҙҙәре ҡора башланы. Сәбәбе булғанда ла, сәбәпһеҙ ҙә өҫтәлгә "аҡбаш" ҡуйылды. Дуҫымдың әсәһе төнгә ҡараулыл-да эшләй торғайны. Йыш ҡына уның урынына дежурға беҙ барабыҙ. Әле бәйән иткән осраҡ, ялға тап килгән булғандыр, күрәһең. Кискелеккә, дуҫымдың әсәһен алмаштырырға беҙ барҙыҡ. Туйғансы уйнаныҡ та, ҡарауылсы булмәһенә индек. Унда эске табынынан ҡалған өҫтәл ҡаршылаңы беҙҙе. Өс литрлыҡ банканың төбөндә ҡыҙғылт шыйыҡса ҡалған (мискәнән ҡойоп һатылған шарап - разливное вино). Тыштан сарсап ингән мин, уны-быны уйлап тормай, банканы күтәреп эсеп тә ҡуйҙым. Тәме татлы күренһә лә, компот булмауына төшөнөүентөшөндөм дә ул, тик һуң ине инде. Ҡаҡ эскәмйәлә ҡаты йоҡлағаным иҫемдә ҡалған. Иртәнсәк ауыҙым ҡороп, нык тәмһеҙләнгәйне. Ошо хәл һәм урлап һыра уртлауым, теләйме-юҡмы, беҙҙең йәмғиәттә бала араҡыҡ барыбер урап үтә алмаясаҡ, тигән фекергә тағы ла бер дәлил.

**Сәғиҙулла РӘСҮЛЕВ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

### Икенсе сер

Кәңәштәр беҙҙе һәр ерҙә һағалай. Уларҙың күпселеге бушлай һәм файҙаһыҙ. Һеҙ кәңәш һорамаған кешеләрҙең күпселеге ҙур теләк менән үҙенең фекерен белдерер. Әммә улар нигеҙҙә үҙҙәренең проблемалары, мәшәҡәттәре менән мәшғүл булғанлыҡтан, һеҙҙең мөмкинлектәрҙе лә, ғәмәлдә нимәгә һәләтле икәнлегегеҙҙе лә белмәй һәм хаталы кәңәш бирә.

Ғәмәлдә, кәңәш бирергә хоҡуғы булмаған кешенең кәңәшен ҡабул итеү - сантехниктан пломба ҡуйыуын һорау кеүек. Күпселек үҙенең проблемаларын да хәл итә алмай. Ниндәйҙер өлкәлә билдәле һөҙөмтәләргә өлгәшмәгән кешеләр нисек итеп һеҙгә хаҡ кәңәш бирһен?

Бәйлелектән ҡотолоу еңел түгел. Бала саҡтан уҡ беҙҙе кемдеңдер аҡылына иҫәп тоторға өйрәтәләр. Эйе, бәйлелек тәрбиә һәм мәғариф процесында билдәле бер роль уйнай, әммә ул бер ваҡытта ла беҙҙең үҙенсәлегебеҙҙе бөтөрөүгә йүнәлтелмәгән. Һәр кешегә тыуғандан уҡ юлында торған теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы хәл итә алыу һәләте бирелгән.

Яҡшылап уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ: әгәр бер кемгә лә буйһонмаһағыҙ, һеҙҙе берәү ҙә юлығыҙҙан яҙҙыра алмай. Әгәр үҙегеҙҙең имендегегеҙ, илһамығыҙ, мөхәббәтегеҙ һәм дәртегеҙ хаҡына бер кемдән дә бәйле булмаһағыҙ, һеҙҙең зитығыҙға тейә, рәнйетә, бәхетһеҙ, яңғыҙ итә, асыуландыра йәки күңелһеҙләндерә алмаясаҡтар. Үҙлекле кеше хужаға мохтаж түгел. Ул үҙе тормош ауырлыҡтарын ышаныслы, тыныс, һәр ситуацияны ғәмәлдәге ысынбарлыҡ күҙлегенән сығып ҡаршылау һәләтенә эйә. Ул һәр нәмәне үҙе күрергә теләгәнсә түгел, ә нисек бар - шулай ҡабул итә һәм ысынбарлыҡ менән ҡаршылашырға теләмәй.

Үҙегеҙҙә үҙлелекте үҫтерһәгеҙ, нимәнелер иртәгәгә ҡалдырыу, урап үтеү йәки төрлө хәл-тороштан ситләшеү кәрәк тә булмаясаҡ, сөнки тормоштоң һәр боролошон ышаныслы, тыныс ҡабул итәсәкһегеҙ. Ҡурҡыуҙан азат, тормошоғоҙға үҙегеҙ хужа буласаҡһығыҙ. Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ - үҙегеҙҙең көс сығанағы менән тығыҙ бәйләнештә торағыҙ. Һеҙгә тирә-яҡтағыларҙың даими илһамландырып, дәртләндереп тороуы кәрәкмәй. Һеҙ тормош юлынан эске ҡеүәтегеҙ теләһә ниндәй проблеманан да көслөрәк икәнлеген белеп атлаясаҡһығыҙ.

### Үҙегеҙ менән идара итеү зарурлығын еңеү

Бала саҡта кеше тирә-яҡта нимә барғанын да уйламай, бары тик үҙенең имендеге генә борсой. Ярҙамһыҙ булыуығыҙ һеҙҙе тирә-яҡтағыларҙан бойондороҡло итә. Тамағығыҙ туйһа - ҡыуанаһығыҙ, иркәләнәһегеҙ, яҡлаулыһығыҙ. Тәү сираттағы бурыс булып үҙенә күберәк иғтибар йәлеп итеү тора. Әгәр ҡыҫҡырһағыҙ, ололарҙың шунда уҡ иғтибар биргәнен йәки йүгереп килеп еткәнен аңлайһығыҙ. Хатта саҡ ҡына күңелһеҙ булғанда ла илап ебәрәһең икән, кемдер йүгереп килеп етә, тынысландыра. Йылмайыу ҙа иҫ киткес һөҙөмтә бирә. Шуға күрә күтәрһәләр - йылмаяһығыҙ, кире урындыҡҡа ултыртһалар - илайһығыҙ. Ошо манипуляция буйынса ябай ғына күнегеү ҙә артабанғы тормош ағышын билдәләй. Баласаҡ йылдарында тирә-яҡтағыларға ыңғай тәьҫир ҡалдырған һәм үҙегеҙгә иғтибар йәлеп иттергән һәләттәрегеҙҙе камиллаштырыу өҫтөндә эшләйһегеҙ. Шулай итеп, бәләкәй генә ваҡытығыҙҙан уҡ үҙегеҙҙе хуплау бәйлелегенә программалайһығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**



### 30 НОЯБРЬ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". Мелодраматический сериал. 5-я и 6-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.10 Ночные новости.
01.25, 03.05 "Кабинетный гарнитур". Худ. фильм.
03.00 Новости.
03.30 "Измена". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Велосипедист на том свете". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.25 "Тихий Дон". 1-3 серии. Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тихий Дон". 4-6 серии (12+).
23.55 "Честный детектив" (16+).
00.55 "Россия без террора. Татарстан. Испытание на прочность", "Прототипы. Гоцман" (16+).
02.25 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Мелкие мошенники". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Операция" (12+).**

### 1 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". Сериал
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 7-я и 8-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
01.35, 03.05 "Капоне". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.35 "Измена". Сериал (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Лишний". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тихий Дон". 7-9-я серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
01.35 "Другой атом", "Смертельные опыты. Электричество" (12+).
03.10 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы" (12+).**
**18.00 "Биш дауа" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Автограф" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Прогулка". Худ. фильм (6+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Райса + Файзи" (12+).**

### 2 ДЕКАБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 9-я и 10-я серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика".
01.35, 03.05 "История Антуана Фишера". Худ. фильм.
03.00 Новости.
04.00 "Измена". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Нелюдь". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тихий Дон". 10-12-я серии (12+).
23.55 "Специальный корреспондент" (16+).
01.35 "Судьба. Закон сопротивления". Док. фильм (12+).
03.40 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск).**
**22.00 "Историческая среда" (6+).**
**23.00 "Дом грез". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 3 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". (16+).
13.10 "Время покажет" (16+).
14.00 Ежегодное послание Президента РФ В.В.Путина Федеральному Собранию (16+).
15.10 "Время покажет" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 11-я и 12-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Хороший год" (18+).
02.35, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.40 "Мужское/Женское" (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Вести. Дежурная часть".
12.05 "Наш человек" (12+).
13.00 "Ангелы с моря" (12+).
14.00 Ежегодное послание Президента РФ В.В.Путина Федеральному Собранию (16+).
15.00 "Вести".
16.30 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тихий Дон". 13-я и 14-я, заключительная, серии (12+).
23.00 "Поединок" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.40 "Дмитрий Донской. Спасти мир", "Тамерлан. Архитектор степей" (12+).
02.40 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.40 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Историческая среда" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Питер FM". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Оставайтесь солнцем" (12+).**

### 4 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
23.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
02.00 "Фарго". Детективный сериал (16+).
03.10 "Мелинда и Мелинда". Худ. фильм (16+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Четыре женщины". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Фестиваль юмора и сатиры (12+).
23.00 "Ради тебя". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
03.00 "Горячая десятка" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бахетнэмэ".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Истории в табличках" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (0+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Париж". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Гильмияза" (12+).**

### 5 ДЕКАБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Обмани, если любишь" (16+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
10.55 "Нина Русланова. Гвоздь программы" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.05 "На 10 лет моложе" (16+).
13.55 "Теория заговора" (16+).
14.45 "Обет молчания" (16+).
16.20 "Тамара Семина. Соблазны и поклонники" (12+).
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "Большой праздничный концерт в Кремле".
21.05 "Время".
21.20 "Голос" (12+).
23.40 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр.
00.55 "Август". Драма (12+).
03.10 "Мальчишник" (16+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Трактир на Пятницкой". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Тренды" (12+).
09.30 "Правила движения" (12+).
10.25 "Личное. Александр Михайлов"
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Две жены" (12+).
12.20 "Я буду ждать тебя всегда". Сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Я буду ждать тебя всегда". Продолжение сериала (12+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Музыкальный конкурс.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Мезальянс". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
00.50 "Любовь и роман" (12+).
02.50 "Сумасшедшая любовь". Худ. фильм (16+).
04.45 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Легенда викингов" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (6+).**
**17.00 "Москва - Васютки". Спектакль Стерлитамакского государственного башкирского драматического театра (12+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Сочи" (Сочи) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Четвертый период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Охотник на лис". Худ. фильм (18+)**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "И судьба - не судьба". Спектакль (12+).**

### 6 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Обмани, если любишь" (16+).
06.00 Новости.
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Барахолка" (12+).
13.10 "Гости по воскресеньям".
14.10 "Бенефис Геннадия Хазанова" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Бенефис Геннадия Хазанова". Продолжение (16+).
16.45 "Геннадий Хазанов. Без антракта" (12+).
17.50 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод". Детективный сериал (18+).
24.00 "Босиком по мостовой". Романтическая комедия (16+).
02.10 "Модный приговор".
03.10 "Мужское/женское" (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.30 "Все, что ты любишь..." (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.10 "Право на любовь". Сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Право на любовь". Продолжение сериала (12+).
16.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов.
18.00 "Жена по совместительству". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий.
00.55 "Поцелуй бабочки". Мелодрама (16+).
03.00 "Русская Аляска. Продано! Тайна сделки" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**09.00 "Четвертый период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Позывной "Барс" (12+).**
**16.45 "Наша Великая Победа" (0+).**
**18.00 "Тайное путешествие Эмира" (0+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Танцуют все!" (12+).**
**20.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**20.30 "Любимое дело" (0+).**
**21.00 "Это мы!" (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2015" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Водопад ангела". Худ. фильм (16+).**
**02.00 "Свидание с джазом" (12+).**

✓ *Унның маҡсаты телдәрҙе һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә алтаҡталарҙы, атамаларҙы, ойошма, учреждениеларҙың эш режимын эстетик һәм матур итеп яҙыу һәм дөрөҫ урынлаштырыуҙы ла күҙҙә тота.*



*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

## ҠАЛАБЫҘ ҮҪЕШЕН КҮҘАЛЛАУ

**19-21 ноябрҙә ВДНХ-ЭКСПО майҙансығында "Стратегия хәрәкәттә" тигән девиз аҫтында UrbanБайрам III Халыҡ-ара ҡала төҙөлөшө форумы үтте. Уның эшендә Ҡытайҙың, Италияның, Бөйөк Британияның ҡаланы үҫтереү өлкәһе белгестәре лә ҡатнашты.**

Сарала төп урында Өфөнө 2030 йылға тиклем үҫтереү стратегияһы концепцияһы буйынса фекер алышыу торҙо. Унда төбәк властары, фәнни йәмәғәтселек, урындағы эре, урта һәм бәләкәй бизнес вәкилдәре ҡатнашты. Был документты әҙерләү идеяһы Беренсе UrbanБайрам форумында ҡабул ителә. Бөгөнгә әҙерләнгән документ Өфөнөң үҫеш программаһы булып тора. Ундағы идеялар ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалырға түгел, ә ғәмәлдә тормошҡа ашырылырға тейеш. Стратегияны әҙерләү барышында ҡала төҙөлөшө өлкәһендә Рәсәй генә түгел, ә халыҡ-ара кимәлдәге белгестәр саҡырылып, төрлө тикшеренеүҙәр уҙғарылған. Шуға ла был документ - ябай ҡағыҙ, уның нигеҙендә эшләнгән графика, макеттар ғына түгел, ҡаланың эҙмә-эҙлекле үҫеш баҫҡысы ул.

Икенсе көндә Рәсәй ҡалалары мэрҙары һәм БДБ илдәренән - Ҡаҙағстандан һәм Әзербайжандан саҡырылған Халыҡ-ара мэрҙар саммиты форматында транспорт системаларын үҫтереү һәм йәмәғәт транспортын реформалау проблемалары мәсьәләләре ҡаралды. Европа тәжрибәһе менән Италия һәм Бөйөк Британия белгестәре таныштырҙы.

Өсөнсө көндә Өфө райондары фестивале уҙғарылды. Һәр район өсөн йәш архитекторҙар павильондар булдырып, унда архитекторҙар халыҡ һәм властар ҡатнашлығында һәр район өсөн әлегә хыял ғына булған проекттар буйынса фекер алышты. Сөнки "UrbanБайрам"дың төп маҡсаты - ҡала халҡы һәм ҡала хакимиәте араһында диалог булдырыу, проблемалы һәм мөһим мәлдәр хаҡында һөйләшеү, баш ҡала райондарының үҙенсәлеген һәм мәҙәниәтен күрһәтеү ине бит.

## МӘКТӘПТӘР - ЯҢЫСА



**Баш ҡалала дөйөм белем биреү учреждениелары араһында уҡытыу процесына инновацион технологияларҙы индереү буйынса 159-сы мәктәп лидер булып тора. Муниципалитеттағы сираттағы кәңәшмәлә белем усағы директоры Наталья Иванцова был хаҡта ентекләберәк һөйләне.**

Белем биреү эшмәкәрлегенең яңы форматын булдырыу был мәктәптә берҙәм белем биреү мәғлүмәти мөхитен ойоштороуҙан башланған. Уға электрон именлек системаһы, электрон журнал һәм көндәлек, белем алыу менән электрон идара итеү (MOODLE), мәктәп телевидениеһы һәм кинофестивале, хәҙерге башҡорт һынлы сәнғәтенең һәм белем биреү учреждениеһының виртуаль музейҙары, виртуаль китапхана, виртуаль уҡытыусылар бүлмәһе инә.

Электрон именлек системаһы бинаға сит кешеләрҙең инеүенә юл ҡуймай. Ул "Электрон көндәлек" һәм "Электрон журнал" программалары менән бәйле. 1234 уҡыусының ата-әсәләре барыһы ла балаларының мәктәпкә инеүен һәм сығыуын күҙәтеү мөмкинлегенә эйә. Шулай уҡ был программаларға ярашлы, дәрес ҡалдырыуҙар, өлгәшеү һәм сифат, дәрестәр, темалар, өйгә бирелгән эштәр һ.б. тураһында ла хәбәрҙар булып була. Мәктәп телевидениеһы - мәктәптә барған аҙналыҡ ваҡиғалар сығарылышы аша уҡыусыларҙа технологик оҫталыҡ ҡына түгел, һәр ваҡиғаға үҙ фекерендә белдереү мөмкинлеген дә бирә. Башҡорт сәнғәтенә арналған виртуаль музей дүртенсе йыл эшләй. Уҡыусылар башҡорт рәссамдары тураһында материалдар туплап, уларҙы башҡорт һәм инглиз телдәренә тәржемә иткән.

- Ҡаланың алдынғы мәктәптәре тәжрибәһе менән барлыҡ мәктәптәрҙең дә етәксе составы - директорҙар, завучтар, алдынғы уҡытыусылар танышырға тейеш. Киләһе уҡыу йылы инновацион технологияларҙы таратыу флагы аҫтында үтергә тейеш. Сөнки мәктәп - итисадтың аныҡ секторы өсөн кадрҙар әҙерләүҙең мөһим баҫҡысы, - тип билдәләне Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Бөрйән районы** Ҡотан ауылынан Шәүрә Манапова, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Рая Йәнбәтова, **Баймаҡ районы** Иҫке Сибай ауылынан Фәнисә Байбулатова, Ярат ауылынан Әхәт Ҡарамырҙин, Шәүрә Дәүләтбирҙина, Салауат Мырҙаҡаев, Урғаҙа ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтов, **Хәйбулла районы** Мырҙа ауылынан Ғәрифә Кинйәбаева, **Стәрлетамаҡ районы** Айыусы ауылынан Гөлнур Рысаева, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Кәримә Төхфәтуллина, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Рәхилә Абдрахимова, Тал Ҡусҡары ауылынан Гөлнур Мәмләева, Иҙәш Ҡусҡары ауылынан Зәйтүнә Шәрипова, **Асҡын районы** Арбаш ауылынан Диләрә Ғиндуллина, **Йылайыр районы** Һабыр ауылынан Әминә Түләшева, Юлдыбай ауылынан Шәмсинур Нәҙерғолова, Ҡашҡар ауылынан Рәсимә Юламанова, Римма Рәхмәтуллина, **Ейәнсура районы** Исәнғол ауылынан Самат Даутов, **Өфө ҡалаһынан** Людмила Латипова, Лилиә Хәмзина, **Ғафури районы** Красноусол ҡасабаһынан Әлфиә Шаһиева, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Гөлмаһира Кирәева һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ һәм ихлас теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ! Сәләмәтлегегеҙ ныҡлы, күңелегеҙ бөтөн, киләсәк көндәрегеҙ яҡты булһын.

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## ХАТАЛАР КҮҘГӘ ТӨРТМӘҺЕН

**Өфөлә сираттағы тапҡыр "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыуҙы иң яҡшы үтәүсе ойошмалар араһында "Хатаһыҙ ҡала" дөйөм ҡала конкурсы иғлан ителә.**

Уның маҡсаты телдәрҙе һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә алтаҡталарҙы, атамаларҙы, предприятие, ойошма, учреждениеларҙың эш режимын эстетик һәм матур итеп яҙыу һәм дөрөҫ урынлаштырыуҙы ла күҙҙә тота. Сара сиктәрендә ҡаланың ойошма, предприятие, учреждениеларына методик һәм ғәмәли ярҙам күрһәтелә, жюри Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары етәкселегендәге лингвистика дисциплинаһы белгестәре, филологтар, РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәренән тора.

2016 йылдың ғинуарында район конкурстарына йомғаҡ яһаласаҡ, икенсе - ҡала этабына сығыусыларға еңеүселәр исемлеген июнгә тиклем көтөргә тура киләсәк. Ә был ваҡытта комисия урындарға сығып, эш һөҙөмтәләрен тикшерәсәк. Еңеүселәр дипломдар һәм ҡиммәтле бүләктәр менән наградланасаҡ.

## СҮПЛӘМӘГӘН ЕРҘӘ ТАҘА...



**Баш ҡалала ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу һәм уларҙы ҡаланан ситкә сығарыу системаһы камиллаштырыла. Был йәһәттән "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" МУП-ы ҙур эшмәкәрлек алып бара, үҙ эшендә инновацион технологиялар ҡулланып, Өфөнөң экологик торошон юғары кимәлдә тоторға ярҙам итә.**

Бигерәк тә сифат һәм хәүефһеҙлек стандарттарына тап килгән заманса евроконтейнерҙар ҡулланыу үҙен аҡлай. Баш ҡалала улар 2007 йылдан алып ҡулланылышҡа индерелә. Бөгөнгә 1635 евроконтейнер урынлаштырылған. Ҙур күләмле ҡалдыҡтарҙы йыйыу өсөн 250 бункер ҡуйылған. Ҡаты көнкүреш һәм токсик булмаған сәнәғәт ҡалдыҡтары полигоны 1969 йылда ойошторолоп, әлеге ваҡытта тирә-яҡ мөхитте һаҡлау талаптарына тап килмәй. Шуны иҫтә тотоп, быйыл июндә полигондың икенсе сиратын проектлау буйынса асыҡ конкурс иғлан ителә.

## САНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 ноябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**29 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**1 декабрь "Һүрелмәҫ мөхәббәтем"** Рәғиҙә Янбулатованың хәтер кисәһе

**2 декабрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

**3 декабрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим)

**4 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инсц.)

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 ноябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00

**1 декабрь "Ҡарт кейәүҙәр йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия

**2 декабрь "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 декабрь** филармония тамашасыларын моңло мөғжизә көтә. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Лилиә Ишемйәрова "Ҡышҡы мөғжизә"** тип аталған концертҡа саҡыра. БР Халыҡ ҡоралдары оркестры һәм Эстрада-джаз оркестры ҡатнашлығында, яңы дуэттар, йырҙар, дәртле бейеүҙәрҙән торасаҡ ул. Театрлаштырылған шоу-концертта Азат Биксурин, Марсель Ҡотоев, Тимур Рамазанов һәм башҡа йырсылар ҡатнашасаҡ.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 декабрь "Волшебный мир "Сарби"** "Сарби" эстрада-фольклор ансамбленең концерты

**5 декабрь "Аҫылйәр"** (М. Фәйзи), музыкаль комедия

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**2 декабрь "Гөлкәйҙең бәхете"** (Ш. Шәкүрова), мелодрама

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ноябрь - Декабрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (18) дүшәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 1 (19) шишәмбе | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 2 (20) шаршамбы | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 3 (21) кесе йома | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 4 (22) йома | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 5 (23) шәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 6 (24) йәкшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ ЙОЛАЛАРЫ

Диндәр һәм дини йолалар ингәнгә тиклем үк һәр халыҡтың үҙенең традицияһы булған. Бөгөн иһә дини йолалар һәм электән килгәндәре бер-береһен тулыландыра, байыта. Шуға ла һәр халыҡ дини йолаларға бәйләп, үҙ йолаһын өйрәнергә тейеш. Ҡунаҡсылыҡҡа килгәндә иһә, ул - башҡорт халҡының төп милли сифаттарының береһе. Ул хаҡта төрлө риүәйәттәр ҙә сығарылған. Башҡорт өләшөнә бер байрам да ҡалмағас, һинең байрамың - ҡунаҡ килгән көн булһын, тип әйткән Аллаһы Тәғәлә, тип һөйләгән риүәйәт тә бар. Ысынлап та, ҡунаҡ килер булһа, өй-йортто йыйыштырып, матур кейемдәр кейеп ҡаршылау, тәм-том бешереп әҙерләнеү һәм башҡа күренештәр ысын байрам төҫө ала. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре аша ҡунаҡ булыу, ҡунаҡ һыйлау тәртибен дә белергә мөмкин: аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән. Ҡунаҡ килде - өй шатлыҡ менән тулды. Бәхетленең ҡунағы бергә.

### ИҒЛАН

Утерянный студенческий билет на имя **Шахмуратова Тагира Айдаровича** считать недействительным.

✓ Башҡорттар бармы ул Өфөлә? Үҙегеҙ ҡыҙыҡһынмаһағыҙ, балаларығыҙ башҡорт йыры, башҡорт бейеүе, башҡорт театры ниндәй икәнен бөтөнләй белмәйәсәк һәм белергә лә теләмәйәсәк бит.



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# МӘҘӘНИӘТ БЕҘҘЕ КҮТӘРӘ,

## беҙ мәҙәниәтте күтәрәйек!



**IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына килгән делегаттарға, республикалағы мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәтебеҙҙең кимәлен нисек баһалайһығыҙ, тип мөрәжәғәт иттек.**

***Римма Ғәбәйҙуллина, Күмертау ҡалаһының Республика политехник лицей-интернаты директоры:*** Һәр дәүләттең мәҙәниәте, әҙәбиәте нигеҙендә ошо ерҙә йәшәгән халыҡтарҙың әхлаҡи ҡиммәттәре ята. Ғөмүмән, мәҙәниәттән, сәнғәттән, әҙәбиәттән әһәмиәтен бер ҡасан да төшөрөргә ярамай. Уларҙың барыһын да "мәҙәниәт" тигән терминға берләштерһәк, бына шул мәҙәниәт аңыбыҙҙы киңәйтә, улай ғына ла түгел, беҙҙең бөгөн һәм иртәгә ниндәй ҡиммәттәр менән көн күрәсәгебеҙҙе билдәләй. Шөкөр, бөтөн донъя беҙҙе йырлы-моңло тәбиғәт балаһы итеп таный, милли кейемдәребеҙҙең һәр биҙәгенә һоҡлана. Ысынлап та, Башҡортостанда башҡорт сәнғәте бөтөн яҡлап көүҙәләнделәрелә. Юғары профессиональ кимәлдәге театрҙар, бейеү ансамблдәре бар, йырсыларыбыҙ традицион башҡарыу осталығын быуындан-быуынға тапшыра килә.

Уҡытыусы, лицей директоры булараҡ, уҡыусыларымдың бөгөнгө мәҙәниәт менән таныш булыуҙарына ныҡ иғтибар итәм. Ҡалабыҙға артистар килһә, уларҙы мотлаҡ үҙебеҙгә саҡырып, һөйләшеүҙәр үткәрәбеҙ. Балаларға билдәле шәхестәрҙе кумир тип иҫәпләү, уларға оҡшарға теләү ғәҙәти күренеш бит инде ул. Кемдәндер өлгөһөндә киләсәккә маҡсат ҡуйып, уға өлгәшә белһендәр өсөн кәрәк бындай осрашыуҙар. Унан һуң, халҡыбыҙҙың тарихын мәҙәниәттән тыш нисек өйрәнһен? Йыраҡ тип тормайбыҙ, Күмертауҙан спектаклдәргә, концерттарға килеп етәбеҙ, шулай уларҙың белеме арта, үҙҙәренең зауҡын үстерәләр, милли сәнғәт аша милләтебеҙ менән ғорурланырға өйрәнәләр, ҡыҫҡаһы, төрлө яҡлап камиллашалар. Әммә шул уҡ ваҡытта баш ҡала тамашасыһынын театр-филармонияларға йөрөмәүенә аптырайым мин. Ярты зал тулыр-тулмаҫ ҡына була ҡайһы саҡ. Башҡорттар бармы ул Өфөлә? Телевизор милли анығыҙҙы күтәреүҙә ярҙамсы түгел, үҙегеҙ ҡыҙыҡһынмаһағыҙ, балаларығыҙ башҡорт йыры, башҡорт бейеүе, башҡорт театры ниндәй икәнен бөтөнләй белмәйәсәк һәм белергә лә теләмәйәсәк бит.

***Әхиәт Ғәйетбаев, Өфөнөң Әҙһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбе директоры:*** Ҡоролтайға көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүҙән тыш, сәнғәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, ғөмүмән, үҙебеҙҙең бөгөнгө тормошобоҙҙо, донъяла биләгән урыныбыҙҙы күҙалларға тырышыу маҡсатынан да йыйылғанбыҙ. Сәнғәтебеҙҙең кимәленә килгәндә иһә, уны Башҡортостан юлдаш телевиденеһы аша ла яҡшы самаларға була. "Башҡорт йыры", "Байыҡ" тапшырыуҙарында ҡатнашыусылар һаны йылдан-йыл күбәйә, "Юлдаш" радиоһы йырсылар араһында үҙенең бәйгеләрен үткәрә. Йәгни, һуңғы ваҡытта сәнғәтебеҙ, халҡыбыҙҙың йыр, бейеү традициялары шул тиклем юғары кимәлгә күтәрелде. Артабан да шулай ғына барһын, тигән өмөттә йәшәргә ҡала. Был йүнәлештә хәлебеҙ насарҙан түгел, шөкөр. Милли сәнғәтте үҫтереү маҡсатынан асылған сәнғәт училищелары, бер аҙ ҡыҫҡартыуҙарға эләкһә лә, филармониялар ҙа эшләй. Музыка мәктәптәре күп, яңы программа буйынса хәҙер унда белем алыу 8-се класҡа тиклем оҙайтылды. 4 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар әҙерлек төркөмдәренә ҡулләп килә. Һәр музыка мәктәбендә ҡурай кластары бар. Үткән быуаттың 70-се йылдарында Ғата ағай Сөләймәнов Өфө сәнғәт училищеһында ҡурайға өйрәтә башлағанда, был музыка ҡоралының популярлығы ул тиклем түгел ине. Хатта ҡурайҙа уйнау өсөн юғары белем нимәгә, тип көлә инеләр элегерәк. Айрат Ҡобағошовҡа рәхмәт, уның тырышлығы менән сәнғәт академияһында ҡурай ғына түгел, ҡыл ҡумыҙ, башҡорт думбыраһы ла тергеҙелде. Шулай булғас, мәҙәниәтебеҙ үҫә, ә мәҙәниәт булғанда, беҙ юғалмаясаҡбыҙ, башҡорт халҡының ситтәргә үҙен танытырлыҡ үҙенсәлектәре лә һаҡлана.

***Мөжәүир Буранбаев, Свердловск өлкәһе, Каменск-Уральский ҡалаһы:*** Мәҙәниәт - ул халыҡтың рухын күтәреү сараһы. Башҡортостанда йәшәүселәр ошо мөхиттең эсендә булғанлыҡтан, быны бик һиҙеп-тойоп бармаһа ла, ситтә йәшәүселәр бик яҡшы белә. Минең төп телегем - беҙ бер-беребеҙ менән туғандар кеүек тығыҙ бәйләнештә йәшәһәк ине. Әлбиттә, башҡорттоң төп йәшәгән урыны - Башҡортостан Республикаһы, тик шулай ҙа башҡорт телевиденеһы, башҡорт радиоһы беҙҙең төбәккә лә килеп етһен ине. Башҡорт телевидениеһы, радиоһы булһа, халыҡ йәйлап башҡорт телендә гәзиттәр уҡырға ғәҙәтләнер ине. Коммуникациялар үҫешкән заманда ошоно булһа ла эшләй алһаҡ, киләсәк быуындар үҙ теленең моңон ишетеп үҫәсәк. Юғиһә, беҙҙең төбәктә халыҡ тарихын онота, үҙҙәрен башҡа милләт тип атап йөрөткәндәр ҙә осрай. Үҙ халҡының тарихын ишетеп, йырын тыңлаһа, улар ҙа ла башҡорт булғандары өсөн ғорурлыҡ уянып китер ине. Ҡоролтай шартлы ғына түләү хаҡы ҡуйып, концерттар ойоштормаҫмы икән, тип тә уйлайым. Бер килеп, шаулап ҡайтһалар, аҙаҡтан халыҡ үҙе уҡ саҡырып торасаҡ бит.

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# АСЫУ ТИҘ ҮТҺӘ ЛӘ...

## йөрәктә һүҙе ҡала

- Йүнһеҙҙең йәшәүенән ни файҙа - елгә оҫҡан саң кеүек.
- Килде-китте кешенән һыуҙа ятҡан таш яҡшы.
- Эшкинмәгән күп мыжыр, эш һөймәгән тел "натыр".
- Аҙыҡлы юл арытмаҫ, арҙаҡлы ир ялҡытмаҫ.
- Кәнде һыр бирмә: сәй эсһәң, бал эстем, өйрә эсһәң, өйрәк ашаным, тин, тип әйтә торғайны өләсәй.
- Ярлы байыһа, артын синкәгә күтәрә.
- Ашағанда ҡабаланма - ҡарылырһың, эшләгәндә ҡабаланма - абынырһың.
- Әңгәмә ҡорорға һүҙ, өй төҙөргә мал һәм көс кәрәк.
- Емтекле ергә себен, аҡсалы урынға ҡомһоҙ йыйыла.
- Бәндәнең нәфсеһе артҡан һайын, яуыҙлығы ла көсәйә.
- Аҡсаң булмаһа ла намыҫың булһын: намыҫы таҙаның йөҙө көләс, күңеле ныҡ, эше хаҡ.
- Асыу дауылдай тиҙ үтһә лә, яманлығы йөрәкте ҡатыра.
- Ялҡаулыҡ бөтөн тәндә эренле шешкә батырған яман сир ул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ФОРМАҢ МЕНӘН МАҠТАНМА,

## нормаң менән маҡтан

Үгеҙгә үҫкән мөгөҙ ишәккә сыҡһа, йыҡмаған затты ҡалдырмаҫ ине.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Героизмға ышаныу беҙҙе герой итә.

**(Бенджамин Дизраэли).**

Әгәр ҙә кешеләр ғашиҡ булыу арҡаһында ғына ғаилә ҡорһа, күбеһе ғүмер буйы тормош иптәшһеҙ йәшәп донъя ҡуйыр ине.

**(Роберт Стивенсон).**

Һуңғы һалдат ерләнгәс кенә һуғыш тамамланасаҡ.

**(Александр Суворов).**

Кешенең бәхете ул эйә булған нәмәләрҙән генә тормай.

**(Варна Дозье).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Табипҡа йөрәк неврозы менән ауырыған бер кеше килә һәм**

**- Минә бер ниндәй дарыуҙар ҙа ярҙам итмәй, минә хәҙер ни эшләргә, һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ? - тип һорай. Табип ауырыуға бик иғтибарлап ҡарап торған да, ярҙамсыһына ҡайсы килтерергә ҡушҡан. Ҡайсы килтергәнсе, ауырыу тулҡынланыуынан ни эшләргә лә белмәгән һәм табиптан:**

**- Һеҙ ҡайсы менән минең йөрәгемде киҫергә уйлайһығыҙмы? - тип һораған. Табип йылмайған һәм:**

**- Мин хирург түгел. Унан һуң, ҡайсы менән операция яһағандарын ҡайҙа күргәнең бар? - тигән. Табипҡа ҡайсы тоттоңғас, ул ауырыуҙың жилетындағы бер төймәне киҫеп алған һәм:**

**- Был урынға башҡаса төймә таҡмағыҙ һәм ул урынға ҡулығыҙ менән ҡағылмағыҙ, - тигән. Шунан ул ауырыуға ике аҙнанан тағы килергә ҡушҡан, ошо арала хәлегеҙ яҡшырыр, тип тә ышандырған.**

**Ауырыу табип ҡушҡандың барыһын да үтәгән. Ике аҙнанан һуң ул шат йөҙ һәм яҡшы кәйеф менән табип эргәһенә килгән һәм:**

**- Үҙемдең табибым мине тикшерҙе, ҡараны ла, аптыраны: мин һап-һау хәҙер. Һеҙ мине ни эшләттегеҙ, әфәндем, төймә менән бергә минең йәнемдәге яуыҙ шайтанды ҡыуҙығыҙмы? - тигән.**

**- Һеҙҙең ҡулығыҙ һәр ваҡыт жилетығыҙҙағы йөрәк тапҡырындағы төймә менән уйнаған. Ул төймәне һеҙҙең йөрәкте кимереүсе яуыҙ булған да инде. Ул төймәне киҫеп ырғытып, һеҙҙең йөрәкте һеҙҙең нервылы ҡулдарығыҙҙан ҡотҡарҙым - бары шул ғына..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририят: Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@mail.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 ноябрь 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4717 Заказ 5388